ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

9-15 сентябрь (нарысай) 2023

№35 (1077)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

**Иғтибар! 1 сентябрҙән 2024 йылдың беренсе яртыһы өсөн гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһы башланды. Аҡлы, зыялы уҡыусыларыбыҙҙы ошо осор өсөн дә "Киске Өфө" (индексы ПР905) гәзитенә 857 һум 04 тингә яҙылып ҡуйырға саҡырабыҙ. Ә беҙ һеҙҙе рухиәт менән һуғарыуҙы, кәрәкле мәғлүмәттәр биреүҙе дауам итербеҙ, тигән вәғәҙәбеҙҙе еткерәбеҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә бик шәп китаптар аласағы тураһында ла онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Законды боҙмай,**
әммә алдай



3

**Ҡырағай баҙар,**
йәки Урамдарҙа кемдәр сауҙа итә?



6

**Милләттең алтын фондын ойоштороуға...**
һәр кем кәс һалырға, үҙ өлөшөн индерергә тейеш!



8-9,11

**Ҡышлауға...**
һарымһаҡ сәсәйек



12-13


@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### Совет мәктәбендә белем алған быуынға алмашҡа грамоталылығы һайыраҡ быуын килә түгелме? Халыҡ-ара грамоталылыҡ көнө уңайынан ошо мәсьәләгә ҡарашығыҙҙы белмәксе булдыҡ әле...

***Гөлфирә АБДУЛЛИНА, Өфө фән һәм технологиялар университеты деканы, филология фәндәре докторы, профессор:*** Тәүҙә шулай ҙа асыҡлап китеү кәрәктер: нимә ул грамоталылыҡ? Википедияла әйтелеүенсә, грамоталылыҡ - ул кешенең үҙ туған телендә аралаша һәм дөрөҫ яҙа белеү кимәле. Грамоталылыҡтың иң тәүге шарты уҡый-яҙа белеү булһа ла, цивилизациялы илдәрҙә, шулай уҡ Рәсәй менән Башҡортостанда, уҡый-яҙа белмәгән кеше юҡ, тип әйтергә лә булалыр. Шуға күрә лә, беҙҙең өсөн грамоталы булыу юғарыраҡ талаптар ҡуя икәнен дә онотмайыҡ. Ике теллелек шарттарында, әйтәйек, беҙҙең халыҡ өсөн ул - башҡорт һәм рус телдәрендә берҙәй үк дөрөҫ яҙыу һәм аралаша белеү мөмкинлеге. Бына ошонда күренә лә инде кемдең ниндәй кимәлдә грамотаға эйә булыуы. Бөгөнгө көндә беҙҙең был кимәл интернетта, айырыуса социаль селтәрҙәр киңлегендә ус төбөндәгеләй күренеп тора башланы. Интернеттағы сәхифәләр һәм комментарийҙарҙы уҡып, сәстәр үрә тора: бер ниндәй орфография, пунктуация, тел-стиль ҡағиҙәләре һанға һуғылмай; кем нисек етте, шулай яҙа һәм был бер кемде лә ғәжәпләндермәй ҙә башланы шикелле. Күптәр тарафынан был норма, тип ҡабул ителә, буғай. Шуға бәйләп, грамоталылыҡ үҙенән-үҙе кешенең аң-белем һәм мәҙәни кимәленә барып тоташыуын күрәбеҙ.

Мин бында бала саҡтары һуғыш осорона тап килеп, уҡый алмай ҡалған быуынды күҙҙә тотмайым, уларҙың уҡырға мөмкинлеге булмаған. Грамоталылыҡ кимәле һуғыштан һуңғы совет осоро быуындарына ҡағыла, сөнки был йылдарҙа мәктәпкә йөрөмәгән, уҡымаған бала булманы, тиерлек, шуға күрә совет мәктәбендә уҡыған быуын дөрөҫ яҙыу һәм һөйләү ҡағиҙәләренә бер ни тиклем булһа ла йәлеп ителде. Ә бөгөнгө быуындың бөтөн вәкилдәре хаҡында ла быны әйтеп булмайҙыр, тием.

**Минең күҙәтеүҙәремсә, әлеге заман йәштәре совет осоро быуыны кеүек, төплө белем алып, уны тормошта ҡулланыу өсөн түгел, ә Берҙәм дәүләт имтиханын нисек тә тапшырып, тәүҙә мәктәпте, аҙаҡ махсус урта йә юғары уҡыу йортон тамамлап, аттестат, диплом алыу өсөн генә уҡыйҙар кеүек тойолоп китә. Хәҙерге балаларҙың күпселеге бөтә өлкәлә лә "ҡулланыусы" ролен өҫтөнөрәк күргәндәй, сөнки ашарына, кейеренә, ял итеп, күңел асырына аҡсаһы бөгөнгә етә икән - ул шуның менән ҡәнәғәт.**

Совет осорондағы кеүек йыһан киңлектәрен айҡарға йыйынған, табип йә уҡытыусы булырға хыялланғандар юҡ кимәлендә. Нисек еңелерәк юл менән аҡса эшләргә мөмкин - шул күберәк ҡыҙыҡһындыра. Мәскәү дәүләт университеты профессорының бик нык әсенеп, буласаҡ журналистарҙың шул тиклем хаталы яҙыуҙары хаҡында саң ҡаҡҡанын хәтерләйһегеҙҙер.

"Белем кимәле" тигәндә мин, тел белгесе булараҡ, иң тәү сиратта яҙыу һәм һөйләү грамоталылығын күҙҙә тотам. Беҙҙең башҡорт филологияһы, шәрҡиәт һәм журналистика факультетына уҡырға килгән абитуриенттар Берҙәм дәүләт имтихандарының уртаса балы буйынса (81-ҙән 91-гә тиклем) Өфө фән һәм технологиялар университетында ғына түгел, хатта Башҡортостан һәм Рәсәй буйынса алдынғы урында килә. Ысынлап та, рухлы, талантлы балалар беҙгә уҡырға килергә тырыша. Уҡый башлағас та күптәре "бишле"гә өлгәшә, шулай ҙа... Балаларҙың донъяуи фекерләүе тарыраҡ, теге йәки был мәсьәләгә ҡарата ҡалыплашҡан яуаптар ғына ишетелә.

Быйыл шуға күрә абитуриенттарҙың телмәр һәм фекерләү ҡеүәһен тикшереү өсөн башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса имтиханды тест түгел, ә әңгәмә рәүешендә ҡабул иттек. Уҡыусыларҙың бөтә фәндәрҙән дә дөйөм белем кимәлен баһалауҙы маҡсат итеп ҡуймағанда ла, башҡорт теле һәм әҙәбиәте даирәһендә генә фекер йөрөткәндә лә, күпселек балаларҙың ҡағиҙәләрҙе аңһыҙ рәүештә ятлап, уны яҙма эштәрҙә ҡуллана белмәүҙәре, һөйләү телмәренең шул тиклем ярлы булыуы, әҙәби әҫәрҙәге герой, персонаждарҙың һыҙланыуҙарын, шатлыҡ-ҡайғыларын күңелдәренә яҡын алмауҙары, автор әйтергә теләгән фекерҙе аңламауҙары күҙгә ташлана. Бөгөн хатта ауылда ла башҡорт балаларының урыҫ телендә аралашыуының әсе емештәре был. Хатта атай-әсәйҙәрҙә: "Хәҙер белем кәрәкмәй ул, төшөмлө эшкә урынлашырға танышың булһа, шул еткән",- тип баралар.

Ярай әле, кеҫә телефондары һәм компьютерҙарҙа хаталы яҙылған һүҙҙе күрһәтеп торған махсус программа бар, ләкин был ғына наҙан кешене грамоталылыҡҡа өйрәтә аламы һуң! Белемһеҙ йәмғиәттә йәшәүе ҡурҡыныс бит! Белем яғы һай табипта кемдең дауаланғыһы килә? Үҙе лә материалды йүнләп аңламаған уҡытыусыға балағыҙҙы ышанып тапшырыр инегеҙме? Техник белеме аҡһаған инженер төҙөгән самолетҡа ултырырға йөрьәт итер инегеҙме? Уйланайыҡ әле, йәмәғәт, БДИ һөҙөмтәһендә, ысынлап та, белемһеҙ быуын үҫеп килә түгелме?..

## УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ

# КЕМДӘР БЕҘҘЕҢ САФТАРҘА?




**"Киске Өфө" гәзитенең үткәндәге бер һанында тарихсы-этнограф Зәкирйән Әминевтың самауыр хаҡындағы ҡыҙыҡлы тарихи мәҡәләһен уҡып, бик ҡыуандым да, уйландым да. Бына бит, көнкүрешебеҙҙә ҡулланылған ниндәй генә әйберҙе алма, ул халҡыбыҙ тарихының тәрән тамырҙарына барып тоташа. Кем уйлаған, көн дә борҡой-йырлай, ялтырап табыныбыҙға килеп ултырған уңған самауырыбыҙҙың шундай бороңғо тарихы бар тип! Кемдәр был хаҡта белмәй йә уҡымай ҡалған, "Киске Өфө"нөң 29-сы һанын табып, мотлаҡ танышып сығығыҙ.**

(Дауамы 2-се биттә).

12+

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ЕРЕНӘ ЕТКЕРЕП ЭШЛӘ!

***Айнур ҒИМРАНОВ, "7 егет" телепроектында ҡатнашҡан БДМУ студенты, буласаҡ травматолог-ортопед:*** Ололар ҙа, йәштәр ҙә - һәр кем үҙ эшен уренеренә еткереп башҡарһын ине, тигән теләк-кәңәш бар. Был тормошобоҙҙоң бөтә өлкәһенә лә ҡағыла һәм һәр кем үҙ эшен тейешле кимәлдә атҡарған осраҡта көнкүрешебеҙҙе күпкә яҡшыртырға булышлыҡ итәсәк. Ҡыҙғаныҫҡа күрә, хәҙер йәш быуын ғына түгел, өлкәнерәктәр ҙә иненә яуаплылыҡ алырға ынтылмай кеүек. Ә бит йәшәү һәм хеҙмәт шарттары элекке заманға ҡарағанда күпкә еңел. Әммә йәштәштәрем билгән мөмкинлектәрҙе тулыһынса ҡулланып, үҫешкә ынтылыр урынға ваҡыттарын телефон, гаджеттарҙа ултырыуға, иптәштәр менән күңел асыуға сарыф итә. Араларында бик һирәктәр генә алдына ҡуйған маҡсаттарға ирешеү өсөн тырышып уҡый, төрлө йәмәғәт эштәрендә әүҙемлек күрһәтә, һөнәри яҡтан үҫешергә теләй. Ауылда мәктәптә яҡшы өлгәшеп тә, баш ҡалаға килгәс, башҡалар йоғонтоһонда илке-һалҡыға әйләнгәндәр ҙә юҡ түгел. Ә бит бындай ҡараш йәш белгестәргә бер ҙә яҡшылыҡ килтермәй, бигерәк тә беҙҙең табип һөнәрен үҙләштергәндәргә. Ғөмүмән, табип кешегә уҡыһанын-ятлағанын ел йыл һайын ҡабатлап тороу мөһим, сөнки мәғлүмәт ошо арауыҡта онотолоуы ихтимал. Әгәр ваҡытында еренә еткереп уҡыһаң, һөнәреңдә яҡшы үҙләштерһәң, йәмғиәткә файҙа килтерәсәкһең. Ошо турала күпселек онотоп китәме, әллә хәҙер заманы шулмы, аңламаҫһың.

Ҡайһы саҡта эшен башҡарамы-юҡмы, әммә ҡулына күберәк аҡса төшөрөүҙе өҫтөн күрәләр кеүек булып китә. Был тормошобоҙҙоң барлыҡ өлкәһендә лә, һаулыҡ һаҡлауҙа ла күҙәтелгән күренеш. Төҙәлөш эшендәгеләр өй-фатирҙарҙы бөтә талаптарға ярашлы һалмаған, ремонт эштәрен матур итеп башҡармаған, әммә юғары хаҡ алған осраҡтар йыш күҙәтелә, мәҫәлән. Ә беҙҙең быуын бигерәк тә совет осоронон тиҫтә йылдарға алһыҙ-ялһыҙ эшләрлек итеп сығарылған әйберҙәренә ғәжәпләнә инде: хәҙергеләр 2-3 йыл хеҙмәт итәме-юҡмы, боҙолоп бара. Медицина өлкәһендә лә хатта аҡса эшләүсе шәхси дауаханаларҙа табип пациент өсөн кәрәкмәгән өҫтәмә тикшерелеү үтергә йүнәлтмәләр, ҡиммәтле дарыуҙар яҙған осраҡтар була. Аҡсаның шундай бер ҡулдан сығып, икенсеһенә инеп "әйләнеп йөрөүе" иктисад өсөн яҡшы булған хәлдә лә, кешелегебеҙҙе, намыҫлылығыбыҙҙы, яуаплылығыбыҙҙы онотоп, башҡаларҙы һанға һуҡмай, бол йыйырға ынтылырға ярамайҙыр, тим. Әлбиттә, заман етеш, мул тормош алып барыу, күп итеп аҡса эшләү мөһимлеген үҙәккә ҡуя, йәмғиәтебеҙҙә шундай кешеләр унышлы иҫәпләнә. Шулай ҙа был намыҫлы хеҙмәт итеү, сифатлы тауар етештереү, һөнәреңдең оҫтаһы булыу һәм үҙ эшеңә яуаплы ҡарауҙы алмаштырмаһын ине.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ

# КЕМДӘР БЕҘҘЕҢ САФТАРҘА?



**(Башы 1-се биттә).**

Ғөмүмән, был гәзиттең һәр һанында ла мин үҙем өсөн файҙалы яңылыҡ, мәғлүмәт табам, шуға ла бынан өс йыл элек кенә Башҡортостаныбыҙға ситтән күсеп ҡайтыу менән балаларым йыл һайын бүләк итеп яҙҙыра килгән ошо гәзитте кинәнеп уҡыйым, ҡасан килерен ҡәҙерле ҡунаҡ кеүек көтөп алам. Ә бына күршем уны тиҫтә йылдан ашыу өйөнә алдыра, рәхмәт яуғыры! Элекке һандарын ташламай, иренән төпләтеп алған хатта. Шуларҙың береһен миңә уҡырға биреп тә торҙо әле, тик ҡәҙерле нәмәһен юғалтыуҙан ҡурҡҡандай: "Зинһар, йыртта, бысрата күрмә инде, биттәрен бөтәрләмә",- тип теңкәмде генә ҡоротто, әйтәгүр. Бөтәрләү ҡайҙа, ти, аулаҡ булмәмдән иркен өҫтәленә индереп һалдым. Ҡартым менән алмашлап инеп уҡыйбыҙ. Ысынлап та, ошоға тиклем ситтә башҡорт донъяһынан айырылып йәшәһәк тә, рухыбыҙ менән һәр саҡ тыуған төйәгебеҙгә яҡын, республика ваҡиғалары менән хәбәрҙар булып йәшәргә тырыштыҡ, тик шулай ҙа халҡыбыҙ тарихынан күп мәғлүмәттәрҙе әле бына һыуһын ҡандырып юлсы төҫлө, гәзит-журналдан йәбешеп ятып уҡыйбыҙ. Тап шуның өсөн дә дуҫтарыбыҙ "Киске Өфө" гәзите менән "Агиҙел" журналдарына яҙылырға кәңәш иткәйне. Рәхмәт, кәңәштәрен тотоп, ундыҡ, ҡулыбыҙҙан төшөрмәй уҡыйбыҙ.

Ҡайһы берәүҙәр, мин яңылыҡтарҙы интернеттан уҡыйым, тип эре сиртерә. Интернетты беҙ ҙә файҙалана беләбеҙ ул, шөкөр, йәш пенсионерҙар булараҡ, компьютер, смартфондар беҙгә лә ят түгел. Тик барыбер мин "ташҡа баҫылғанға" нығыраҡ ышанам һәм матбуғат һүҙен ихтирам итәм. Интернетта, дөрөҫөн әйткәндә, болғаҡ: кем нимә теләй, шуны сығарып һала һәм бер ниндәй яуаплылыҡ тоймай, был авторҙарҙың күбеһенең ялған исем менән яҙыуынан да асыҡ күренә. Башҡортостаныбыҙҙа әллә нисә төрлө гәзит-журнал сыға, был бик ыңғай, яҡшы күренеш, тик уларҙың тираждары кәмей барыуы ғына күңелгә тынғы бирмәй. Ни тиһәң дә, яңыраҡ бер аҡыллы кешенең, гәзит-журналды бөгөн илһөйәрҙәр менән тәрбиәле кешеләр генә уҡый, тигәне раҫтыр, күрәһең. Ә шулай ҙа, бәғзе берәүҙәр, белер-белмәҫ көйгә, гәзиттәр бөтөүгә табан бара, тип күрәҙәлек ҡылһа ла, улар бөтмәйәсәк, ә әлегесә әйтмешләй, яҙма матбуғат уҡыусыларын "иләктән" үткәрә генә: ваҡсыллаһып, арты йыл буйы рәхәтләнеп гәзит уҡыу өсөн бер меңен йәлләгәндәр беҙҙең сафтарҙан төшөп ҡала һәм шул аҡсаһына бер тапҡыр магазинға инеп сыға инде - бына шул ғына...

**Лилиә БАЙТИМЕРОВА.**
**Сибай ҡалаһы.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Совет мәктәбендә белем алған быуынға алмашҡа грамоталылығы һайыраҡ быуын килә түгелме? Халыҡ-ара грамоталылыҡ көнө уңайынан ошо мәсьәләгә ҡарашығыҙҙы белмәксе булдыҡ әле...***

***Тәлғәт ШАҺМАНОВ, журналист, педагог, Башҡортостандың атҡаҙанған киң мәғлүмәт хеҙмәткәре:*** Әлбиттә, совет мәғариф системаһы иң көслөһө булды, тип гел әйтә киләләр ул. Бәхәсләшмәйем, заманына күрә уҡытыу методикаһы ла, уҡытыусыларҙың әҙерлек-белем кимәле лә насар түгел ине. Тик шулай ҙа ул ваҡыттарҙан бирле беҙҙең мәғариф системаһы ла бер урында торманы: уҡытыуҙың яңы технология һәм алымдары, инновациялар ғәмәли ҡулланылышҡа инде. Улар үҙҙәренең ыңғай һөҙөмтәһен бирмәй ҡалманы: хәҙерге уҡыусыларҙың белем кимәле үткән быуаттың 50-60-сы йылдарҙағы балаларҙыҡынан күпкә юғары. Балаларҙың күбеһе 1-се синыфҡа хәрефтәрҙе танып, уҡыйҙа белеп килә, һанай, төҫтәрҙе, геометрик фигураларҙы айыра, һөйләү телмәре лә ярайһы була. Эйе, грамоталылыҡ иң тәүҙә кешенең белем кимәленә бәйле. Балаларҙың күпселеге диктанттарҙы хаталы яҙа, телмәр ярлылығы, үҙ фекерен бәйләнешле итеп бирә алмағандар күп. Был йәһәттән күп нәмә тел уҡытыусыларының оҫталығы һәм ныҡышмалылығына бәйлеләр, тип уйлайым мин.

**Ҡағыҙҙа ятлатыу ғына бер ни ҙә бирмәй, әгәр ул тупҡауһыҙ, бала дөрөҫ яҙып өйрәнгәнгә тиклем, күнегеүҙәр менән нығытылмай икән. Дәрестәрҙә дөрөҫ яҙыу һәм һөйләү телмәрен үҫтереү буйынса төрлө алымдар ҡулланыу отошло. Мәҫәлән, балаларҙан бер-береһенең яҙма өй эштәрен тикшертеү, бер-береһенә хаттар яҙҙырыу, телмәр үҫтереү йәһәтенән ҡапма-ҡаршы диалогтар ҡороу дәресте лә йәнләндерә, ҡағыҙәләрҙе иҫтә ҡалдырырға ла ярҙам итә.**

Ә шулай ҙа грамоталылыҡты үҫтереүҙең иң отошло юлы - әҙәби китаптар уҡыу, минеңсә. Уҡыған ваҡытта бала йәки башҡа кеше булһынмы, тыныш билдәләрен, һөйләмдең төҙөлөшөн, тел-стиль үҙенсәлектәрен нығыраҡ иҫтә ҡалдыра. Совет осоро быуыны грамоталыраҡ булды, тип әйтәбеҙ икән, бының сере бик ябай: ул саҡ интернет, компьютер, смартфон һәм башҡалар булмаһы - күпселек кеше йыйылып ятып китап уҡыны.

Уҡыусының белем кимәле, тимәк, грамоталылығы ла, ата-әсәнән дә тора: улар китап-гәзит уҡый икән, был яҡшы ғәҙәт мотлаҡ балаларына ла "йоға". Өйҙә уҡыу культы булған ғаиләлә ана шул әлеге грамоталылыҡҡа нигеҙ һалына ла инде ул. Икенсенән, ата-әсә балаһының нисек уҡыуы, дәрес әҙерләүе-әҙерләмәүе менән ҡыҙыҡһынамы, ата-әсәләр йыйылышына йөрөймө - былары ла бик мөһим.

Хәҙерге балаларҙың күпселеге белемле, тик уларҙың мәктәптә, колледждарҙа, юғары уҡыу йорттарында алған белеме тормошта дөрөҫ ҡулланылыш тапмаған осраҡтар йыш күҙәтелә: улар алған һөнәрҙәре буйынса эшләмәй йә шунын буйынса эш таба алмай. Быны нәмә хаҡында борсолорға кәрәк!

Бөгөнгө көндә тәҙәүсе, механизатор, иретеп йәбештереүсе, малсы кеүек һөнәрҙәргә ҙур ҡытлыҡ кисерелә. Совет заманында белеме бик шәптән булмаған уҡыусыларҙы ПТУ, СПТУларҙа ошо һөнәрҙәргә уҡытып, барыбер кеше итеп сығара торғайнылар. Эш һинең белемеңдән тәрәнме әллә һаймы икәнлегеңдә түгел, ә күңеленә ятҡан, үҙеңде үҙең, ғаиләңде тәьмин итә алырлыҡ һөнәргә эйә була белеүеңдә бит.

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Белем көнөндә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров әлеге ваҡытта махсус хәрби операция зонаһындағы дуҫы һәм фекерҙәше Азат Бадрановтың ҡыҙын беренсе класҡа оҙатыу, уҡытыусыларҙы, уҡыусыларҙы һәм ата-әсәләрҙе яңы уҡыу йылы башланыуы менән ҡотлау өсөн Мостай Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһына килде. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Радий Хәбиров район һәм ҡала башлыҡтарына әлеге ваҡытта махсус операция зонаһында хеҙмәт иткән яугирҙарҙың балаларын беренсе класҡа алып барырға ҡушҡайны.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театрын яңыртып төҙөү барышын тикшерҙе. Быйыл йыл аҙағында уҡ йәш тамашасылар ҡурсаҡ театрының тәүге спектаклдәрен ҡарай ала, тип хәбәр итте ул. Билдәләнеүенсә, Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театрының майҙаны реконструкциянан һуң 2,5 тапҡырға - 6,4 мең квадрат метрға тиклем киңәйтелә, ә тамашасы өсөн урындар 300-ҙән алып 435-кә тиклем арттырыла. Әлеге ваҡытта объектта эшселәр төкәтмә төҙөй башланы.

✓1 сентябрҙә Башҡортостанда 528 129 бала мәктәпкә юлланды. Уларҙың 52,2 меңдән ашыуы белем биреү ойошмаларына ГЛОНАСС, тахографтар, тиҙлекте сикләү ҡоролмалары менән йыһазландырылған автобустарға ултырып китте. Транспорт саралары тикшереү үткән һәм ГОСТ талаптарына яуап бирә. Август айында ғына республика мәктәптәре 26 уҡыусыға иҫәпләнгән 18 яңы автобуслы булған. Әйткәндәй, республиканың мәктәп автопаркында 1,5 мең автобус иҫәпләнә, шуларҙың меңгә яҡыны 2018 йылдан һатып алынған.

✓Белем көнөндә Башҡортостанда "Башнефть" ярҙамында төҙөлгән ике мәктәп асылды. Хәйбулла районының Аҡъяр ауылында 140 урынлыҡ интернат менән 550 уҡыусыға иҫәпләнгән полилингваль күп профилле мәктәп һәм Әлшәй районының Раевка ҡасабаһында 375 урынлыҡ мәктәп. Һуңғы өс йылда ғына Башҡортостан нефтселәре хәйриә проекттарына 4,5 миллиард һумдан ашыу аҡса йүнәлткән. 47 район-ҡалала 140-тан ашыу проект ғәмәлгә ашырылған, тиҫтәләгән ҙур социаль инфраструктура объекттары асылған.

КӨНАУАЗ

# ЗАКОНДЫ БОҘМАЙ, әммә алдай

**Рәсәйҙә аҙыҡ-түлеккә дәүләт тарафынан ҡуйылған стандарттарға (ГОСТ) төҙәтмәләр индерелергә мөмкин. 1 литр урынына 930 мл һөт, 1 кг урынына 800 г билмән, 1 тиҫтә урынына 9 йомортҡа - һатып алыусыны бөгөн етештереүсе үҙенсә ошолай отоп маташа. Хәҙер бына был хәлгә Генпрокуратура ла иғтибар иткән һәм етештереүсе хаҡын шул килеш ҡалдырып, тауарҙың ауырлығын кәметмәһен өсөн аҙыҡ-түлек ҡабына берҙәм талап билдәләргә уйлай.**



873 мл. 900 мл. 900 мл. 930 мл. 1 литр

"Руспродсоюз" билдәләүенсә, ҡайһы бер ризыҡ ҡаптарының шулай ҡапыл бәләкәйләнеп китеүендә сеймалдың, тауар етештереүҙең, тауар ташыуҙың ҡиммәтләнеүе, ә халыҡтың йылдан-йыл һатып алыу мөмкинлегенең кәмеүе "гәйепле" икән. Улар төп сәбәп тип ошоно атай. Халыҡ бер аҙ алданһа ла, һөт, йомортҡа кеүек рационында көн һайын булырға тейешле әйберҙе һатып ала алыуы менән етештереүсегә рәхмәтләр уҡып йәшәргә тейеш, тиғән ҡараштa улар. Икенсе сәбәп - ҡала халҡының холоҡ-ҡылыҡтарындағы үҙгәрештәр. Улар элекке кеүек өйөнә тоҡлап-тоҡлап ризыҡ ташымай. Магазинға йышыраҡ йөрөһә лә, бөгөн ашай торғанын ғына һатып ала. Етештереүсе бында ла һатып алыусының файҙаһын күҙ уңында тотоп эш итә, имеш: 1 л һөттө ҡасан эсеп бөтәһең әле, ә былай иһә көн һайын һатып алғас, сифаты ла юғары була.

Эшҡыуарлыҡты үҫтереү һәм иҡтисад институты мәғлүмәттәренә ярашлы, 2008-2009 йылдарҙағы көрсөктән һуң етештереүселәрҙең ҡайһы берҙәре аҙыҡ-түлек ҡаптарын - 7, бәғзеләре иһә 20, 30 процентҡа тиклем бәләкәйләткән. Уның ҡарауы, тауарҙың хаҡы элеккесә ҡалған. Ғилми телдә был күренеш шринкфляция тип атала. Етештереүсе законды боҙмай, сөнки ҡапҡа, әйтәйек, шул уҡ һөттөң күләме 930 мл тип яҙа. Институт ғалимдары әйтеүенсә, һатып алыусы өсөн һөттөң 30-50 мл-ға әҙерәк булыуы ҡурҡыныс түгел, ул уны һиҙмәй ҙә. Ә бына хаҡ артһа, шунда уҡ күреп ҡала һәм, етмәһә, тауыш ҡуптарыуы ла бар. Беҙҙең ошолай һиҙмәй-белмәй генә аҙыраҡ һөткә күберәк хаҡ түләп йөрөүебеҙ яҡшыраҡ булған икән. Институт етәксеһе Наталья Назарова әйтеүенсә, хәҙер етештереүсе был мөмкинлектең иң һуңғы сигенә еткән, кәметкән тиклемдән дә күберәк бәләкәсәйтә алмай ҡаптарҙы. "Тимәк, хаҡтарҙы күтәреүҙән башҡа сара ҡалмай", - ти ул.

Халыҡ һиҙмәй ул, тиһәләр ҙә, осҡор күҙҙәр табылған шул. Йәмәғәт фекерен өйрәнеү үҙәге (ВЦИОМ) асыҡлауынса, 2019 йылда уҡ рәсәйҙәрҙең 60 проценты был хәлгә кире ҡарашын белдергән. Рәсәй ҡулланыусылар берлеге рәйесе Петр Шелищ та был хәлде һатып алыусыларҙы алдау тип атай. Магазин кәштәһенән һөт алғанда кеше уның ҡабын ҡарап та тормай. Сөнки 1 л урынына 930 мл һөт алып, алданыуы тураһында уйламай ҙа. Дәүләт Думаһы рәйесе урынбаҫары Борис Чернышев та шундай уҡ фекерҙә. "Халыҡ күрәләтә алданыуҙан арыған. Июнь башында Дәүләт Думаһына "Гәҙел хаҡ тураһында" закон проекты тәҡдим иттек. Ул магазиндарға хаҡты кеше аңларлыҡ итеп - 1 л йәки 1 кг өсөн яҙып ҡуйыуҙы талап итә. "Проект халыҡ тарафынан бик йылы ҡабул ителде, 10 меңгә яҡын мөрәжәғәт ҡабул иттек, былар барыһы ла мәсьәләнең актуаллеге тураһында һөйләй", - ти ул "Известия" гәзитенә биргән аңлатмаһында.

Генпрокуратураның ҡаптарға берҙәм талаптар ҡуйырға һәм уларға 1 кг йәки 1 л тип кенә яҙырға рөхсәт бирергә тигән ниәте депутаттарҙың был проектын тулыландырып, һатып алыусыны алдауҙарҙан һаҡлар ине, бәлки. Әммә стандарт ҡабул ителгәнсе, етештереүселәрҙең эшен ошо нормалар сиктәрендә яйға һалғансы ярайһы ваҡыт үтер әле. Етештереүсе яғынан ярайһы сығымдар ҙа буласаҡ. Һәҙөмтәлә, аҙыҡ-түлеккә сираттағы тапҡыр хаҡтар күтәрелеп, был сығымдар һеҙҙең менән беҙҙең елкәгә ятмаҫ тигән ышаныс ҡына юҡ. Эшҡыуарлыҡты үҫтереү һәм иҡтисад институты әле уҡ был инициативаның халыҡ файҙаһына булырына шик белдерә. Был осраҡта НДС-ты кәметергә, етештереүселәргә льготалы кредиттар бирергә, хатта йәшәү өсөн мөһим тип иҫәпләнгән аҙыҡ-түлекте лә һатып алырға мөмкинлеге сикле булғандарға сертификаттар программаһын уйлап табырға була тип иҫәпләй улар. Һәр хәлдә, тәғәрмәс тәгәрәгән инде, уның нимәгә алып килеүен киләсәк күрһәтер. 930 мл һөт, 185 г аҡ май, 450 гр макароны магазин кәштәләренә кире ҡайтарығыҙ тип әйтерлек булмаһын инде, тәүбә...

**Ләйсән ВӘЛИЕВА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ? Совет мәктәбендә белем алған быуынға алмашҡа грамоталылығы һайыраҡ быуын килә түгелме? Халыҡ-ара грамоталылыҡ көнө уңайынан ошо мәсьәләгә ҡарашығыҙҙы белмәксе булдыҡ әле...

***Гөлфиә МӨХӘМӘТШИНА, йәш быуын вәкиле, Өфө ҡалаһы:*** Грамоталылыҡ уҡый һәм дөрөҫ яҙа белеүҙе аңлатһа ла, үҫешкән йәмғиәт шарттарында уның сиктәре киңәйә төшә, миненсә. Сөнки бөгөн йәштәргә генә түгел, урта быуын һәм хатта тормошҡа, яңылыҡҡа ҡыҙыҡһыныуы һүрелмәгән өлкән йәштәге кешеләр өсөн дә заман мәғлүмәт технологияларын ҡуллана белеү грамоталылығына, шулай уҡ хоҡуҡ, финанс, мәҙәни грамоталылыҡҡа эйә булыу бик кәрәк. Был ябай ғына тормош хәлдәренән дә күренә. Мәҫәлән, өлкәндәр өсөн был картаға килгән пенсияларын онлайн тәртибендә коммуналь хеҙмәттәргә күсереү, иҫәпләү приборындағы тотонолған газ, һыу, электр энергияһы күрһәткестәрен ресурс ойошмаларына электрон почтанан ебәрә белеү кәрәк, сөнки өлкәндәрҙең күбеһе был ойошмаларға барып йөрөй алмай. Финанс, хоҡуҡ грамоталылығына эйә булыу кәрәклеген дә күптәр һәр төрлө мошенниктарҙан алданғас ҡына иҫтәренә төшөрә торғандыр. Гөмүмән, грамоталы булыу - кешенең мәҙәнилек кимәле күрһәткесе ул, тип әйткем килә.

Йәш быуын заман технологияларын шәп белә, һүҙ ҙә юҡ, ләкин, уйлап ҡараһаң, был уларҙың грамоталылыҡ күрһәткесе тип тә әйтеп булмай, сөнки улар был белемгә, мотлаҡ талап булараҡ, мәктәп йылдарында уҡ эйә булып сыға. Кемдер әйтмешләй, хәҙер сабый балалар ҙа "ҡулдарына смартфон тотоп" тыуа, интернетта гиҙә һәм башҡалар. Уның ҡарауы, бөгөнгө йәш быуындың ҡайһы бер вәкилдәре, үкенескә, башҡа өлкәләрҙә наҙан булып үҫә. Бөгөн Рәсәйҙә бит юҡҡа ғына мәғариф системаһы үҙгәрештәр алдында тормай. Совет системаһы юҡҡа сыҡҡас, мәғариф өлкәһе илдәге либераль сәйәсәт һөҙөмтәһендә бөтөнләй "һайығa" төшкәйне. "...Совет мәғариф системаһының етешһеҙлеге ижад кешеһе үҫтереүҙә ине, хәҙер беҙҙең бурыс башҡалар ижадын квалификациялы файҙалана белгән квалификациялы ҡулланыусы әҙерләү", - тип яҙғайны 2004-2012 йылдар буйы Рәсәй мәғариф министры булып ултырған "менеджер" А.Фурсенко.

Тап бына ошондай сәйәсәт алып барылыу арҡаһында, һеҙ әйтмешләй, совет мәктәбендә белем алған быуынға алмашҡа ярым наҙан йәштәр барлыҡҡа килде лә инде.

**Уларҙан илһөйәр, телһөйәрҙәр түгел, ә маҡсатлы рәүештә башты, мейене эшләтеү кәрәк булмаған "ҡулланыусы" әҙерләнеләр һәм был тәүге "үҫентеләрен" күрһәтә лә башлағайны инде: балалар әллә ни көс түкмәй генә океан аръяғы "ижадсылары"ның гаджеттарын ҡулланып, өй эштәре эшләргә, мәсьәләне аңламай ғына әҙер хәл ителеште күсерергә һәм, ниһайәт, фәҡәт БДИ тестарына "механик" рәүештә яуаптар ғына әҙерләргә күнекте.**

Донъя, рус, башҡорт әҙәби классиктарының әҫәрҙәре бар тип тә бирелмәне, күренекле тарихи шәхестәребеҙ беҙҙе класс кабинеттары стенаһынан ғына элеүле торған портреттарҙан ғына өнһөҙ күҙәтте. Әҙәби китаптар уҡымағас, фекер ебе лә өҙөлдө; диктанттарҙа һүҙһөйләмдәрҙе кем нисек теләй йә нисек ишетә, шулай яҙҙы; өтөр, һыҙыҡ, нөктәләр бөтөнләй онотолдо...

Хәйер, йәш быуын тип бөтәһен дә бер ҡалыпҡа һалыу ҙа дөрөҫ булмаҫ, совет быуыны кешеләренең дә ҡайһыларына грамоталылыҡ етешмәгән кеүек, бөгөн дә йәштәрҙең төрлөһө бар, бик тә белемле, күп уҡыған, мәҙәни кимәллеләре байтаҡ, һөйөнөскә. Йәғни грамоталылыҡ етешмәү һәр быуынға ла хас, бында эш шәхсән кешенең үҙенән дә тора, шулай уҡ мәктәптә, колледж һәм вуздарҙа уҡытыусыларҙан был өлкәлә күп тырышлыҡ талап ителә. Мәктәп, факультет күләмендә диктанттар яҙҙырыу, викторина, тематик конкурстар үткәреү, хатаһыҙ эш һәм яуаптар авторҙарын дәртләндереү, бөтә мәктәп йә вуз коллективы алдында өлгө итеп күрһәтеү ҙә балаларҙы һәм йәштәрҙе хатаһыҙ яҙырға, күберәк белергә дәртләндерер ине, тип уйлайым.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔Башҡортостанда 9 сентябрь берҙәм экологик өмә көнө тип иғлан ителде, тип хәбәр итте республиканың торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры вазифаһын башҡарыусы Ирина Голованова. Хәбәр ителеүенсә, 2 сентябрҙән ҡала-ауылдарҙың биләмәләрен таҙартыу һәм төҙөкләндереү буйынса дөйөм республика экологик өмәләре, шулай уҡ таҙалыҡ көндәре башланды.

✔Хәйбулла районы игенселәре ашлыҡтың сираттағы партияһын Ҡаҙағстанға оҙатты. Унан алда Ветеринар һәм фитосанитар күҙәтеү буйынса федераль төбәк идаралығы хеҙмәткәрҙәре ауыл хужалығы предприятиеһының күрше Ҡаҙағстанға экспортҡа сығарыу өсөн әҙерләгән 44 тонна һолоһон тикшергән һәм һайлап алған продукция өлгөләренең ЕАЭС илдәре талап иткән бөтә экспертизаларҙы үтеүен, уның һөҙөмтәләре буйынса продукцияла зарарлы организм асыҡланмауын, импортер илдең талаптарына тап килеүен билдәләгән.

✔Башҡортостанда һәм тотош илдә "Урманды һаҡлайыҡ" Бөтә Рәсәй акцияһының бишенсе миҙгеле башлана, 2023 йылда ул тәүге тапҡыр яңыртылған форматта ойошторола. Рәсәй вице-премьеры Виктория Абрамченко һүҙҙәренсә, акцияла ҡатнашыусылар ағас ултыртыу менән бер рәттән, урман биләмәләрен агротехник тәрбиәләү һәм йыйыштырыу менән шөғөлләнә, шулай уҡ мәғариф һәм ғилми проекттарҙы ғәмәлгә ашыра ала. Башҡортостанда көҙгө урман культуралары эштәре 15 сентябрҙән башлана, тип белдерҙе республиканың урман хужалығы министры Марат Шәрәфетдинов.

✔"Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың барыһына ла: хәрби кадрҙарға, ирекмәндәргә, контрактсыларға, мобилизацияланғандарға һәм хоҡуҡ һаҡлау органдары хеҙмәткәрҙәренә тиң хоҡуҡтар биреү мөһим, - тип белдерҙе Рәсәй Президенты Владимир Путин "Еңеү" комитеты ултырышында. - Беҙҙең егеттәр, уларҙың ғаилә ағзалары ла яугирҙар өсөн махсус льготалар һәм ярҙам саралары менән тәьмин ителергә тейеш, шул иҫәптән хәрби хәрәкәттәрҙә ҡатнашыусы статусы менән дә".

✔Радий Хәбиров Дмитрий Ситниковты Ҡаҙағстанда Башҡортостандың Рәсәй сауҙа вәкиллеге ҡарамағындағы яңы вәкиле итеп тәғәйенләү тураһында указға ҡул ҡуйҙы. Килешеү ваҡыты - 1 йыл, тиелә унда. Дмитрий Николаевич Ситников 1964 йылда Ҡаҙаҡ ССР-ының Алма-Ата ҡалаһында тыуған. Быға тиклем Башҡортостандың сауҙа вәкиле Урал Аҙнабаев ине.

✓ *Сентябрь уртаһында мәсетте тикшереү, уның ниндәй хәлдә булыуы хаҡында отчет әҙер буласаҡ. Бынан һуң проектлау һәм баһалау документацияһына төҙәтмәләр индереүгә тотонасаҡбыҙ.*



ҠЫҪҠАСА

## "АТАЙЛЫҠ ДАНЫ" КЕМГӘ?

**Башҡортостанда 51 ир-уҙаман "Атайлыҡ даны" йәмәғәт наградаһы менән бүләкләнә, тип хәбәр итә Башҡортостандың Йәмәғәт палатаһы.** Ул күп балалы атайҙарға, табиптар, педагогтар һәм аграрийҙар династияһы вәкилдәренә, музыканттарға, ирекмән хәрбиҙәргә, спортсыларға, ҡотҡарыусыларға, экологтарға һәм донорҙарға, шулай уҡ һаулыҡ мөмкинлектәре сикле балалар тәрбиәләгәндәргә бирелә. Наградалар тапшырыу тантанаһы 4 октябрҙә "Торатау" конгресс-холлында була. Әйткәндәй, 2021 йылда - 27, 2022 йылда 38 кеше ошо абруйлы наградаңы алған. "Атайлыҡ даны"на республиканың 54 муниципалитетынан йәмғеһе 191 ғариза килгән. Айырыуса Әлшәй, Архангел, Белорет, Бөрө, Благовещен, Илеш, Краснокама, Көйөргәҙе һәм Өфө райондары, Өфө һәм Октябрьский әүҙемлек күрһәткән. Проект Башҡортостан Башлығы гранттары фонды ярҙамында тормошҡа ашырыла.

✓ **Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров аҙналыҡ оператив кәңәшмәлә республиканың Ветеринария буйынса дәүләт комитеты етәксеһе Азат Йыһаншиндың 50 йәше менән ҡотлап, "Хеҙмәт батырлығы өсөн" миҙалы менән бүләкләне.** Яуап һүҙендә Азат Йыһаншин республика етәкселегенә ветеринария хеҙмәтенә ярҙам күрһәткәне өсөн рәхмәт белдерҙе. "Ярҙам һөҙөмтәһендә беҙҙең хеҙмәт ҙур һәм һөҙөмтәлеләрҙең береһе булып тора. Унда 2224 кеше эшләй, эш хаҡы йыл да арта, матди-техник база яҡшыра. Һуңғы биш йылда ул 60 процентҡа яңыртылды. Ғөмүмән, эпизоотик хәл бик көсөргәнешле. Августа беҙҙең ветеринарҙар 10 көнгә яҡын Авдон ҡошсолоҡ фабрикаһында сирле ҡош-ҡортто яндырыу менән шөғөлләнде. Улар тулыһынса юҡ ителде, әле дезинфекция эштәре бара. Иң мөһиме, бындай сығанаҡтарға юл ҡуймау. Беҙ артабан да һаҡта торасаҡбыҙ. Беҙгә йәштәрҙең эшкә килеүе ҡыуандыра, хеҙмәтебеҙҙең эшен артабан да яҡшыртырбыҙ", - тине Азат Йыһаншин.

✓ **Башҡортостанда махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға социаль ярҙам саралары сиктәрендә 220 яугир шифахана-курорттарҙа дауаланған.** "Башинформ"дың тематик матбуғат конференцияһында республиканың ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры Ленара Иванова ошо турала белдерҙе. "Хәрби хеҙмәткәрҙәрҙе реабилитациялау һәм дауалау тәү сираттағы бурыс булыуын иҫәпкә алып, шифахаларҙа уларҙы ҡабул итеүҙән баш тартмайҙар. Дөйөм номер фондының 10% резервта тотола", - тип билдәләне Иванова. Республиканың Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы етәксеһе әйтеүенсә, бөгөнгә 80-дән ашыу яугир һәм уларҙың ғаилә ағзалары талап ителгән һөнәрҙәр буйынса уҡыу өсөн һәр береһе 50 мең һумлыҡ белем биреү сертификаты алған. Бынан тыш, Ленара Иванова мәғлүмәттәре буйынса, 206 яугир һәм уларҙың яҡындары газ үткәреүгә 100 мең һумлыҡ сертификаттар менән тәьмин ителгән.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

## ЙӘШ ТАБИПТАРҒА...

**Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәләрендә Башҡортостан Һаулыҡ һаҡлау министрлығының республика программаһы хаҡында иҫкә төшөрҙө. Уға ярашлы, йәш табиптар өс миллион һум күләмендә аҡса алырға мөмкин.**

Башҡортостан етәксеһе әйтеүенсә, һүҙ профилле юғары уҡыу йорттарын тамамлаусылар, шулай уҡ 2021 йылдан республикаға күсеп ҡайтҡан белгестәр хаҡында бара. Аҡса хеҙмәт килешеүе төҙөлгәндән һуң өс йыл дауамында бирәр миллион һумлап түләнә.

"Программа терапевтарға һәм педиатрҙарға, шул иҫәптән участка һәм дөйөм практика табиптарына иҫәпләнгән. Компенсацияға 25 мендән аҙыраҡ пациент беркетелгән медицина ойошмаларына эшкә урынлашҡан белгестәр хоҡуҡлы. Республикабыҙҙа 24 үҙәк район дауаханаһы ошо талапҡа тап килә. Программа бик актуаль, ауыл медиктары етешмәй. Ул "Ауыл табибы" һәм "Ауыл фельдшеры" программаларын да тулыландыра. Шуныһы мөһим: яңы программаны эшләгәндә медицина вуздарын тамамлаған йәш табиптарға ғына иҫәп тотманыҡ. Ауыл дауаханаларында быға тиклем башҡа төбәктәрҙә йәшәгән һәм эшләгәндәрҙе лә күреүебеҙгә шатбыҙ", - тип яҙҙы Хәбиров.

"Башинформ" республиканың медицина кадрҙарын йәлеп итеү өсөн иң яҡшы тәжрибәләре булған төбәктәр рейтингына инеүе тураһында ла хәбәр иткәйне.

## БАШҠОРТ ТЕЛЕ ДӘРЕСЛЕКТӘРЕ...



**Республика Мәғариф һәм фән министрлығы йыл һайын башҡорттар күпләп йәшәгән төбәктәрҙәге мәктәптәрҙе башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәреслектәре, методик әҙәбиәт, күргәҙмә әсбаптар менән тәьмин итә. Был эш "Башҡортостан Республикаһының дәүләт телдәрен, Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәрен һаҡлау һәм үҫтереү" дәүләт программаһына ярашлы алып барыла.**

Яңы уҡыу йылы башланыр алдынан Рәсәй Федерацияһы төбәктәренең туған (башҡорт) теле өйрәнелгән белем биреү ойошмаларына башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән 7470 дана уҡыу һәм уҡыу-методик әҙәбиәт, башҡорт теле һәм әҙәбиәте кабинеттарын биҙәү өсөн 15 комплект стенд, ҡыҙҙар һәм малайҙар өсөн 24 башҡорт милли костюмы, 101 башҡорт милли музыка ҡоралы - ҡурай, мәктәпкәсә белем биреү учреждениелары өсөн 44 башҡорт милли кейемендәге ҡурсаҡтар килде. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса бөтә дәреслектәр ҙә - федераль дәреслектәр исемлегендә. Был хаҡта Башҡортостан Мәғариф министрлығының матбуғат хеҙмәте хәбәр итә.

Дүрт төбәктең (Силәбе өлкәһе - 22, Ырымбур өлкәһе - 3, Ҡурған өлкәһе - 2, Һамар өлкәһе - 1) 28 мәктәпкәсә белем биреү ойошмаларында һәм биш төбәктең (Силәбе өлкәһе - 36, Ырымбур өлкәһе - 9, Ҡурған өлкәһе - 5, Һамар өлкәһе - 2, Татарстан Республикаһы - 1) 53 дөйөм белем биреү ойошмаларында башҡорт телен өйрәнеү дәрестәре алып барыла. Өҫтәмә белем биреү сиктәрендә 16 ойошмала 308 бала башҡорт телен, башҡорт халҡының тарихын һәм мәҙәниәтен өйрәнә.

Бынан алдараҡ Рәсәй Мәғариф министрлығының башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса федераль программаларҙы раҫлауы тураһында хәбәр ителгәйне.

## ИКЕНСЕ КӘҢӘШМӘЛӘ...

**Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров "Әр-Рахим" мәсетен төҙөү буйынса кәңәшмә үткәрҙе.**

"Башҡортостан Башлығы Радий Фәрит улы Хәбиров етәкселегендә Әр-Рахим йәмиғ мәсетен төҙөү буйынса икенсе ултырышта проект офисы булдырылды, уның составына вице-премьерҙар, Төҙөлөш, Ер мөлкәте министрлыҡтары, Өфө ҡала округы хакимиәте вәкилдәре инде. Проект офисы форматында эшләү ҡарарҙар ҡабул итеү һәм барлыҡҡа килгән барлыҡ мәсьәләләрҙе тиҙ арала хәл итеү мөмкинлеген тәьмин итә", - тине фекер алышыуҙың төп һөҙөмтәләре тураһында Башҡортостан мосолмандарының дини идаралығы рәйесе Айнур Биргәлин. Уның билдәләүенсә, мәсеттең йылылыҡ контурын булдырыу өҫтөнлөклөләр иҫәбендә. Ул шулай уҡ: "Сентябрь уртаһында сираттағы ултырыш үткәрәсәкбеҙ. Был ваҡытҡа мәсетте тикшереү, уның ниндәй хәлдә булыуы хаҡында отчет әҙер буласаҡ. Бынан һуң проектлау һәм баһалау документацияһына төҙәтмәләр индереүгә тотонасаҡбыҙ. Республика Башлығы мәсет йылы булһын өсөн йылылыҡ контурын ябыу бурысын ҡуйҙы. Яҡынса 2024 йылдың яҙында төп төҙөлөш-монтаж эштәре башлана. Был осорҙа проект-смета документацияһын тергеҙеп, төҙәтәсәкбеҙ. Проект яңыртылғас, төп эште башлайбыҙ", - тип тә өҫтәне.

## БӘЙГЕЛӘРҘӘ ҠАТНАШ!

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республикала йәшәүселәрҙе башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү буйынса ойошманың гранттар конкурсында әүҙемерәк ҡатнашырға саҡырҙы.**

"Беҙ башҡорт теленә, уны һаҡлауға һәм үҫтереүгә күп иғтибар бүләбеҙ. Бында республика халҡы ла әһәмиәтле роль уйнай. Беҙ ошондай әүҙем, туған телендә рәхәтләнеп һөйләшкән, уны яратҡан һәм ошо һөйөүҙе башҡаларға ла еткереүселәргә ярҙам итергә булдыҡ. 1 сентябрҙә Башҡортостанда физик шәхестәр өсөн гранттар конкурсы старт алды. Унда 18 йәштән өлкән граждандар ҡатнаша ала. Төп шарт - конкурста ҡатнашҡан проекттар башҡорт телен, башҡорт халҡының мәҙәниәтен, тарихын һәм хәҙерген популярлаштырыһын ине", - тип яҙҙы республика етәксеһе социаль селтәрҙә. Конкурста төрлө йүнәлештәр буйынса ҡатнашырға мөмкин, тип билдәләне ул. Йәштәр медиаһы, IT, мәғариф, мәҙәниәт һәм фән. Проектты тормошҡа ашырыуға күп тигәндә 200 мең һум алырға мөмкин. Ғаризалар 2023 йылдың 30 сентябренә тиклем ҡабул ителә.

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓10 сентябрҙә - Берҙәм тауыш биреү көнөндә Башҡортостанда 3,2 меңдән ашыу һайлау участкаһы асыла, тип хәбәр итте республика етәксеһе Радий Хәбиров хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә. Уның билдәләүенсә, ошо йәкшәмбелә Дәүләт Йыйылышы депутаттарын, ауыл советы депутаттарын һайлау була. "Беҙҙең бурысыбыҙ - барыһын да ойошҡан үткәреү, граждандарға үҙ ихтыярын белдереү өсөн шарттар булдырыу", - тине Башҡортостан Башлығы һәм бөтәһенә лә алдағы һайлауҙа уңыштар теләне.

✓Башҡортостанда "Башнефть" заправкаларында һуңғы дүрт айҙа 13-сө тапҡыр хактарҙың артыуы күҙәтелә. Был юлы дизель яғыулығының бер литры 50 тингә ҡиммәтләнгән. Бөгөндән дизель яғыулығының бер литры 59,30 һум тора. Яғыулыҡтың башҡа төрҙәренә хаҡтар шул килеш. Хәҙер АИ-100-К5 бензины - 63,15 һумға, ATUM-95 - 52,95 һумға, АИ-92-К5 - 48,80 һумға, ATUM-92 - 49,90 һумға барып баҫа. 1 сентябрҙә "Башнефть" яғыулыҡ ҡойоу станцияларында дизель - 60 тингә, АИ-100 50 тингә ҡиммәтләнгәйне.

✓1 сентябрҙән мәктәп уҡыусылары һәм көндөҙгө бүлектә белем алыусы студенттар "Башҡортостан ҡала яны пассажирҙар компанияһы"ның электричкаларына билетты ярты хаҡ менән аласаҡ. Был ташламаны республика сиктәрендә генә ҡулланып була. Ташламалы билет һатып алыу өсөн уҡыусылар мәктәптән белешмә алырға тейеш. Студенттар өсөн студент билеты мотлаҡ. Былтырҙан Рәсәйҙең ҡала яны поездарында 7 йәшкә тиклемге балалар бушлай йөрөй ала.

✓Өфөнән 37 йәшлек модель Светлана Шевцова "Рәсәй. Ер-2023" конкурсында беренсе вице-миссис исеменә лайыҡ булды. Яҡташыбыҙ "Иң яҡшы милли костюм" номинацияһында ла еңеү яуланы. Матурлыҡ конкурсы Мәскәүҙә 27 августа үтте. Унда тотош илдән төбәк этаптарында һайлап алыу турын үткән иң сибәр ҡыҙҙар һәм ҡатындар ҡатнашты. Проект "Рәсәйҙең иң яҡшы социаль һәм мәҙәни проекты" тип танылған.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

*✓ Ошондай ҡыҙыҡлы фестивалдең тап Башҡортостанда уҙғарылыуының етди сәбәптәре бар. 2022 йылда Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте балалар тауарҙары индустрияһын үҫтереү программаһын ғәмәлгә ашыра башлағайны.*



ӨФӨ - ТӘРТИПТӘ!



# АҒИҘЕЛДЕҢ АРЪЯҒЫНДА...

**Өфө ҡалаһы хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев Ленин районының "Затон-Восточный" биҫтәһендә алып барылған эштәр торошо менән танышты.**

Ошо микрорайонда торлаҡ төҙөлөшө бик әүҙем бара, күп ҡатлы яңы йорттарҙан тотош урамдар барлыҡҡа килә, бындағы төҙөлөш "Торлаҡ һәм ҡала мөхите" милли проекты сиктәрендә башҡарыла. Оҙаҡламай шунда уҡ 1225 урынға иҫәпләнгән яңы мәктәп төҙөлөп бөтәсәк. Микрорайондың 11-се кварталының дөйөм майҙаны - 130 га, бында урман массивы менән йәнәшә ҙур ял итеү зонаһын булдырыу ҡаралған. Яңы торлаҡ зонаһы өсөн канализация коллекторы, һыу үткәргес һәм "Затон-Восточный" канализация-насос станцияһынан хасил булған ҙур күләмле объекттар сафҡа индереләсәк. Хакимиәт башлығы белдереүенсә, Өфө ҡалаһының 450 йыллығы алдынан ошо микрорайонда Башҡортостан Республикаһының фехтование үҙәген төҙөү эштәре бара, уға СССР-ҙың фехтование буйынса атҡаҙанған тренеры Рәмил Әйүповтың исеме биреләсәк. Майҙаны 500 кв. метрлыҡ спорт комплексында көйәрмәндәр өсөн 350 урынлыҡ трибуна ҡорола, бында Рәсәй кимәлендәге спорт ярыштарын уҙғарыу мөмкин буласаҡ.

# УЙЫНСЫҠТАР БАШ ҠАЛАҺЫ...

**Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров белдереүенсә, ошо йылдың 14 - 17 сентябрендә баш ҡалабыҙҙың Совет майҙанында беренсе Бөтөн Рәсәй уйынсыҡтар фестивале уҙғарыласаҡ, унның исеме лә тап балаларса: "Әйҙә уйнарға!"**

Бында 4 көн дауамында Рәсәй уйынсыҡтарын етештереүселәрҙең күргәҙмә-һатыу итеүе ойошторола, балалар өсөн иң яҡшы уйын практикалары күрһәтеләсәк. Программала төрлө ҡыҙыҡлы саралар бар. Тамашасылар алдында "Непоседы" һәм "Домисолька" популяр балалар коллективтары, Ваня Дмитриенко һәм Милана Хаметова сығыш яһаясаҡ, ә балалар яратып ҡараған "Спокойной ночи, малыши!" телетапшырыуын алып барыусы Татьяна Веденеева һәм Оксана Федорова улар өсөн мауыҡтырғыс программа әҙерләгән. Ҡурсаҡ театрҙары артистарының оҫталығына һоҡланырға, анимация проекттарында ҡатнашырға, мультпарадты тамаша ҡылырға мөмкин буласаҡ. Ә байрам флешмобында "Союзмультфильм" геройҙары - Бремен музыканттары, Винни Пух һәм Пятачок та ҡатнашасаҡ. Башҡортостандың Милли музейы махсус күргәҙмәлә үтә һирәк осрай торған уйынсыҡтар күрһәтәсәк.

Ошондай ҡыҙыҡлы фестивалдең тап Башҡортостанда уҙғарылыуының етди сәбәптәре бар. 2022 йылда Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте "Балалар тауарҙары индустрияһы предприятиелары ассоциацияһы" (АИДТ) менән хеҙмәттәшлек хаҡында килешеү төҙөп, республикабыҙҙа балалар тауарҙары индустрияһын үҫтереү программаһын ғәмәлгә ашыра башлағайны. Йыл ярым ваҡыт эсендә ошондай предприятиеларҙың һаны биш ярым тапҡырға артты, һәм Башҡортостан ошо өлкәләге ҡаҙаныштары өсөн балалар тауарҙары етештереү һәм хеҙмәт күрһәтеү өлкәһендә бирелә торған "Алтын айыу балаһы" Милли премияһына лайыҡ булды. Шулай итеп, оҙаҡламай Өфөбөҙ балалар уйынсыҡтарының баш ҡалаһына әйләнәсәк.

# БЕҘҘЕҢ КЛОУНДАР...

**9 - 10 сентябрҙә Тула ҡалаһында XV Халыҡ-ара урам театрҙары фестивале уҙғарыла, ул "Театр ихатасығы" исеме аҫтында билдәле. Быйыл унда Рәсәйҙең 12 ҡалаһынан 150-нән ашыу артист ҡатнашасаҡ.**

Нимә һуң ул урам театры? Әлбиттә, театр булғас, тамашалар күрһәтеләсәк, тамашасылары ла буласаҡ - тик байрам сәхнәлә түгел, ә урамдарҙа барасаҡ. Иң ҡыҙығы ла ошонда инде - тамашаға килеүселәргә лә, артистар менән бер рәттән, бейергә, йырларға, уйында ҡатнашырға рөхсәт ителәсәк. Тулалағы байрамда 8 асыҡ майҙансыҡта 40 спектакль һәм перфоманс тамашасылар иғтибарына тәҡдим ителә. Баш ҡалабыҙҙың Йәш тамашасылар театры ла ошо фестивалдә ҡатнашасаҡ, ул "Ер" тип аталған этник клоунада тамашаһы менән сығыш яһай. Артистарыбыҙ милли колоритлы кейемдәре менән генә түгел, ылыҡтырғыс гримдары, нескә юмор, мимика һәм ым-ишара хәрәкәттәре аша бер башҡорт ғаиләһенең тарихын тамашасылар иғтибарына тәҡдим итә. Тамашаның режиссёры - Анастасия Ғайнанова. Ролдәрҙе Дмитрий Широнин, Зөлфәр Әхмәтов, Виктория Емелёва, Зөһрә Баймурзина, Алина Латынова һәм Павел Лобанихин башҡара. Әйҙә, Тула халҡы ла башҡорт клоундары сығышынан ләззәт алһын, тип теләргә ҡала беҙгә.

# "ПОБЕДА" АВТОМОБИЛЕ...

**"Еңеү беҙҙең йөрәктәрҙә" тигән медиаэкспедицияны тәүге тапҡыр 2012 йылда Югра ҡалаһының йәштәр парламенты вәкилдәре ойоштора. Ул саҡта Урал федераль округында уҙғарылған автойөрөштә ГАЗ М-20 "Победа" маркалы 2 ретроавтомобиль ҡатнаша.**

Быйылғы туғыҙынсы экспедицияла ҡатнашыусыларҙың маршрутына Рәсәйҙең 15-тән ашыу герой-ҡалаһы, яугирлыҡ даны һәм хеҙмәт ҡаһарманлығы ҡалалары ингән. Акцияның төп маҡсаты - Ватаныбыҙҙың тарихи хәҡиҡәтенә тоғролоҡ һаҡлау, бөйөк алыш ҡаһармандары хаҡындағы мәғлүмәттәрҙе яңы быуындарға тапшырыу. Севастополдә башланған патриотик сәйәхәттә ҡатнашыусылар Өфө ҡалаһына килеп етте. Советтар Союзы Геройы В.Г. Недошинин исемендәге 37-се мәктәп кадеттары ла ошо акцияла ҡатнашыусылар менән осрашыуға килде. "Әлбиттә, балаларға совет осоро машиналары оҡшаны, уларҙың ошондай машиналарҙы бер ҡасан да күргәне булмаған бит. Улар ниндәй сифатлы итеп эшләнгән булған: әлегә тиклем йөрөйҙәр, Өфөгә тиклем күпме саҡрым юл үткән улар!" - тине мәктәп директорының тәрбиә эштәре буйынса урынбаҫары Зәлифә Ғәбитова. Автойөрөш сентябрь аҙағында Ханты-Мансийск ҡалаһында тамамланасаҡ.

ИЛҺӨЙӘРЛЕК МӘКТӘБЕ

# БАЛАЛАР БАҺАЛАНЫ



**Өфөләге "Родина" кинотеатрында балалар өсөн башҡорт ерендә тыуған тарихи шәхестәр тураһында "Атайсал. Беҙҙекеләр! Беҙҙекеләрҙе белегеҙ!" документаль фильм күрһәтелде.**

Проект "Бишек" коммерцияға ҡарамаған ойошма тарафынан Башҡортостан Республикаһы Башлығы гранты фонды ярҙамында "Тамыр" балалар һәм йәштәр телеканалы ҡатнашлығында төҙөлгән. Проект авторҙары тарихи шәхестәр портреттары менән Геройҙар аллеяһын булдырған, улар тураһында ете фильм төшөргән. Йәшел таҫманы киҫеү һәм аллея асыу хоҡуғына кинола тарихи шәхестәрҙең бала сағын уйнаған йәш актерҙар Заһир Әминев, Наҙгөл Зәйнетдинова һәм Морат Ярышев лайыҡ булды.

Залда балаларҙы Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Президиумы рәйесе, Рәсәй Федерацияһы Дәүләт Думаһы депутаты Эльвира Айытҡолова һәм "Башҡортостан ир-егеттәр советы" ("Ир-егеттәр ҡоро") йәмәғәт ойошмаһы рәйесе, Рәсәй Федерацияһы Дәүләт Думаһы депутаты Зариф Байғусҡаров сәләмләне. Балалар өсөн документаль сериал Санкт-Петербургта тау мәктәбе асҡан феноменаль шахтер, меценат Исмәғил Тасимов, күренекле хәрби етәксе, башҡорт старшинаһы Кинйә Арыҫланов; совет дипломаты, ғәрәп илдәрендә беренсе тулы хоҡуҡлы вәкил Кәрим Хәкимов; беренсе профессиональ башҡорт рәссамы, педагог Ҡасим Дәүләткилдиев; Башҡорт АССР-ы мәғариф министры Фатима Мостафина; беренсе башҡорт осоусыһы, Өфө аэроклубына нигеҙ һалыусы, "Башосоавиахим" етәксеһе Ғәлимйән Ишмырҙин; күренекле яҙыусы, төрки донъяһында трилогия романын ижад иткән беренсе ҡатын-ҡыҙ Зәйнәб Биишева тураһында һөйләй.

Фильмды йәш тамашасылар менән бергә тарихсылар Нәзир Ҡолбахтин, Нурислам Ҡалмантаев, кино төшөрөүҙә ҡатнашҡан журналист Сәрүәр Сурина ҡараны. "Һөҙөмтә көткәндәгенән дә яҡшыраҡ булыуы тураһында әйтергә мөмкин, - тине проект концепцияһы авторы, "Тамыр" балалар-үҫмерҙәр телеканалы директоры Гөлназ Ҡолһарина. - Былтыр "Атайсал. Беҙҙекеләр! Беҙҙекеләрҙе белегеҙ!" проектында ҡатнашырға булғас, бөгөнгө заман балаларына кесе Ватан ҡиммәттәре тураһында идеяны еткереп булырмы икән, тигән шик тыуғайны. Килеп сыҡты. Бөгөн проект коллективы өсөн күңел байрамы. Башҡорт ерендә тыуған күренекле шәхестәр тураһында шундай замanса, ҡыҫҡа, мәғәнәле фильмдар төшөрөүгә бик шатмын".

**Ләйсән ЗАКИРОВА.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Мастит

❖ Был халыҡ ысулдарын эренле мастит осрағында ҡулланырға ярамай, тик сирҙең башланғыс осоронда ғына мөмкин. Түштең ҡатыланыуы йәки шешенеү билдәләре барлыҡҡа килгәндә боҫламалар яһарға була. Кизе-мамыҡ туҡыманы 6-8 ҡатлап, түҙерлек эҫелектәге шифалы ромашка сәскәһе төнәтмәһенә манып ҡулланырға. Шулай уҡ ромашка төнәтмәһе урынына яртылаш бешкән арпаны туҡымаға төрөп, 20-30 минут түшкә баҫып торорға була.

## Эс киткәндә

❖ 3 кишер, 1 сөгөлдөр, 3 сельдерей һабағынан һут яһап, эс киткәндә көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 30 минут алда 0,5-1 стакан эсергә.

❖ Крыжовник һутын һәм иҙелгән емештәрен көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 30 минут алда 1-әр ҡалаҡ ашарға.

❖ Ашҡаҙан-эсәк юлының эшмәкәрлеге боҙолғанда 10-ар грамм ҡалған тамыры (лапчатка прямостоячая) һәм бөтнөк үләненә (мята перечная) 200 мл һыуыҡ һыу ҡойоп, ҡайнар хәлгә еткерергә һәм 15 минут төнәтергә. Көнөнә 2-3 тапҡыр ашарҙан 20 минут алда яртышар стакан эсергә.

## Аҙҡанлылыҡ

❖ 2 балғалаҡ Себер миләше емешенә 2 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 1 сәғәт төнәтергә, теләк буйынса шәкәр ҡушырға. Көнөнә 3-4 тапҡыр яртышар стакан эсергә. Был төнәтмә бай витамин сығанағы.

❖ 60 грамм меңъяпраҡҡа 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 1 сәғәт төнәтергә, һыуытып һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр 1-әр балғалаҡ эсергә.

❖ Меңъяпраҡ үләне һәм сәскәһенең араҡыға һалынған 20 процентлы 2 ҡалаҡ төнәтмәһенә һыу ҡушып, ашарҙан алда эсергә.

❖ Литрлыҡ шешәгә май айында йыйылған әремде тултырып һалырға, араҡы ҡойорға. Йылы, ҡараңғы урында 21 көн төнәтергә. Көнөнә 1 тапҡыр, иртәнсәк ас ҡарынға 1 ҡалаҡ һыуға 1 тамсы төнәтмә тамыҙып эсергә. Был рәүешле 3 аҙна дауамында дауаланырға. Шунан ике аҙнаға туҡталып тороп, киренән ҡабатларға.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

*✓ Тәҡдим ителгән тауарҙар үҙ төбәгебеҙҙә үҫкән, экологик яҡтан таҙа, әллә ҡайҙан килтерелгән, оҙаҡ һаҡланһын өсөн махсус эшкәртелмәгән. Мәҫәлән, магазинда алма тулып ятһа ла, кешеләр уны урамда сауҙа иткән инәйҙәрҙән алыусан.*



*ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...*



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Селән**

**(Серая цапля)**



Селәндәр ғаиләһенә ҡараған был ҡоштар оҙон тура суҡышлы. Һыуҙа йәки ярҙа оҙаҡ ҡыбырламайынса баҫып тора. Торнанан саҡ ҡына бәләкәйерәк. Арҡаһы һоро, ҡорһағы, муйыны - аҡ. Оҙон һәм нескә муйыны буйлап ҡара төҫтәге ҡаурыйҙар сылбыры һуҙылып төшә. Соңҡаһында ҡара өлтөгө бар. Ҡанатының осо ҡара. Осоп барғанда муйыны "S" хәрефе формаһында, аяҡтары артҡа тартылып тора. Тауышы үҙәккә үткес әсе.

Рәсәйҙең урта өлөшөндә, Себерҙең көньяғында, Алыҫ Көнсығышта таралған. Билдәле ғалимдар В.Д. Ильичев, В.Е. Фомин был ҡош тураһында түбәндәге мәғлүмәттәрҙе яҙып ҡалдырған: "Башҡортостанда селән осоп барышлай ғына туҡтап китә. Шулай ҙа Көньяҡ Уралдың урманлы-далалы райондарында оя ҡорған мәлдәре булған. Әлеге ваҡытта аҙашып йөрөгән оло ҡоштар осраштыра. Урал аръяғында юҡ".

Беҙҙең күҙәтеүҙәр был раҫлауҙы юҡҡа сығара. Селән Башҡортостандың бөтөн райондарында ла (2003 й.) оя ҡороп йәшәүсе ғәҙәти ҡош иҫәпләнә. Орнитологик тикшереНеүҙәр үткәрелгән урындарҙың барыһында ла, шул иҫәптән, Белорет районының Үҙән, Ҡағы һыуһаҡлағыстарында, Йылайыр районы Сәлим, Матрай ауылдары тирәһендә, Баймаҡ районының Талҡаҫ күлендә, Хәйбулла районының Таналыҡ һыуһаҡлағысында, Учалы районының Ҡарағайлы, Әбйәлил районының Сыбаркүл күлендә һ.б. осрай. Ҡағы һыуһаҡлағысы, Федоровка районы "Балыҡ" балыҡ хужалығы, Өфө районында 10-15 парҙан торған ҙур туптар булып йәшәйҙәр.

Һыу яҡкылығы булған ерҙә ағасҡа оя ҡора. Оя өсөн ботаҡ, ҡамыш ҡуллана. 4-5 йәшкелт-зәңгәр йомортҡа һала.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан. (Дауамы бар).**

*ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ...*

**Һуңғы ваҡытта урамда сауҙа итеү тураһында йыш яҙыла һәм һөйләнелә. Минеңсә, был мәсьәләгә бер яҡлы ғына ҡарау бик үк дөрөҫ түгелдер. Һүҙ баш ҡаланың Үҙәк баҙар туҡталышында сәләмәт тормош алып бармаған (был уларҙың йөҙ-ҡиәфәтенә сыҡҡан), тамаҡ хаҡына, бигерәк тә кәйефләнеп алыу маҡсатында, Затон ҡасабаһындағы күмәртәләп һатыу базаһынан сифатһыҙ йәшелсә-емеш килтереп тәҡдим иткән кешеләр хаҡында бармай. Бында ысын мәғәнәһендә антисанитария хөкөм һөрә. Уларҙың йөҙөнә, ҡулдарына, һатҡан нәмәләренә ҡарау ғына ла ытырғаныс. Ә тауарҙарын алалар, сөнки арзан. Тегеләргә нимә, баш төҙәтергә, тамаҡ ялғарға эшләһә, ярай.**

# ҠЫРАҒАЙ БАҘАР,

## йәки Урамдарҙа кемдәр сауҙа итә?



Бер нисә йыл элек араларындағы башҡорт ҡатыны менән һөйләшеп киттем. Үҙебеҙҙең милләт кешеһенең шунда тороуына әсендем, ояптырға уйланым, ниндәй сәбәп уны ошонда килергә мәжбүр итеүен асыҡларға тырыштым. Бөрйән яғынан булып сыҡты ул. Эшендә ҡыҫҡартыуға эләккән. Йәшәгән урынынан да ҡыуғандар. Ике балаһын әсәһе эргәһенә ҡайтарған. "Эҙләп ҡараһаң, эш табырға булалыр бит", - тигән булдым. "Эйе, шулай икәнен беләм, апай. Аҙыраҡ аҡса эшләйем дә балаларымды алып киләм, эшкә урынлашам", - тине. Тик бер нисә йыл рәттән Үҙәк баҙар эргәһендә уны йыш күрәм. Ваҡыт үтеү менән даими эскән кеше ҡиәфәтен ала бара, ауыҙында - тәмәке, эргәһендә үҙе ише ир-ат сыуала. Нимә тип әйтәһең инде, үҙе һайлаған яҙмыш...

Өфөнөң бер нисә урынында пенсионерҙар өсөн махсус сауҙа урындары булдырылды. Унда өлкәндәр үҙ баҡсаларында үҫтергән йәшелсә-емештәрҙе һата. Яҡын-тирә райондарҙан килеүселәр ҙә бар. Хаҡлы ялдағы өлкән кешеләр, исмаһам, миҙгелендә аҙ булһа ла баҡсаһының файҙаһын күреп ҡалырға тырыша. Улар өсөн баҙар бинаһының эсендә махсус урындар бар. Әммә халыҡ урамда, туҡталышта күберәк. Тимәк, тауар ҙа тиҙерәк һатылалыр. Пенсионерҙар ул урындарҙы үҙ-ара бүлешеп алған тиерлек. Яңы килгәндәрҙе араларына бик индереп бармайҙар. Минә лә шундай күренештең береһенә шаһит булырға тура килде. Йәшәгән еребеҙгә яҡын сауҙа урынына картуф һатып алырға тип сыҡҡайным. Ситтәрәк торған ир менән ҡатын янына барҙым. Картуфтың иҫкеһен дә, яңыһын да тәҡдим итәләр ине. "Эре картуф ҡайҙа үҫкән икән?" тип ҡыҙыҡһындым.

- Шишмәнән беҙ, - тине ҡатын. Ауылын да, исем-фамилияһын да әйтте. Йылдың ҡоро килеүе, йәшелсәнең нисек үҫеүе хаҡында хәл-әхүәл һораша торғас, асылып китеп, түбәндәгеләрҙе һөйләне:

- Килеүебеҙ булды, әбейҙәр ябырылды. "Бында райондыҡылар торорға тейеш түгел, китегеҙ, һеҙҙең өсөн баҙар бар", - тинеләр. Әйтмәгән һүҙҙәре ҡалманы. Яҡындағы магазин директорынан ҡыуҙыртабыҙ тип тә янанылар, - тип һөйләп аптыратты.

Әммә уларҙың бында тороуы тормош хәлдәренә бәйле булып сыҡты. Баҡһаң, улдары ошо тирәлә уҡый икән. Уны бер нисә сәғәткә генә ялға сығарған арала ауылға алып ҡайтып, мунса индереп, өй ашы менән һыйлап килтерәләр. Шуға әлеге майҙансыҡ уңайлы, юл хаҡын булһа ла сығарайыҡ, тиҙәр.

- Тағы бер улыбыҙ бар, уны ла уҡытырға кәрәк. Үҙем эшләгән ойошма ябылды. Бухгалтер инем, эшһеҙ ҡалдым. Хеҙмәт биржаһында иҫәптә торғайным, бөтөнләй ят һөнәр тәҡдим итәләр. Маляр булып эшләй ҙә белмәйем, һаулығым да юҡ, буяуға аллергия ла. 26 йыл хеҙмәт стажлы килеш өйҙә ултырырға мәжбүрмен. Ирем ваҡытлыса ғына эшләп ала. Шишмә шәкәр заводында көҙ генә эшләп ҡалалар, ҡыш һәм йәй - өйҙә. Эш юҡ, тип ҡул ҡаушырып ултырып булмай. Баҡса үҫтерәбеҙ, мал аҫрайбыҙ. Нисек тә йәшәргә кәрәк бит, - тип тамамланы һүҙен.

Шишмә эшһөйәрҙәре 40 сутый ерендә картуф, һуған, кишер, сөгөлдөр, ҡабаҡ, помидор, борос һәм башҡа йәшелсә үҫтерә. Үҙҙәренән артҡанын ҡала халҡына һата. Өфөнөң урамда сауҙа итеүселәренең уларға асыуы килеүенең сәбәбе бар. Шишмәләр тиҙерәк һатыу өсөн хаҡты арзаныраҡ ҡуя, шуға башҡаларҙың тауарының хаҡы төшә. Ғөмүмән, былары - йәһәтерәк һатыу, тегеләре ҡиммәткәрәк тәҡдим итеү өсөн тырыша.

- Мал аҫрауы ла еңел түгел, - тип дауам итте ҡатын. - Бесәнде һатып алабыҙ. Ике һыйыр, ике башмаҡ һәм ике быҙауыбыҙ бар. 12 мең һумға төштө бесән. Бер төргәген 700-гә бирәләр, килтергәнгә 500-800 һум һорайҙар. Ике машина һалам да кәрәк. Аҙ булһа ла аҡса туплайһы урынға, ишетмәгәнде ишетеп, иларҙай булып ҡайтабыҙ...

Өфөлә урам баҙарҙары байтаҡ. Әлбиттә, унда төрлө халыҡ сауҙа итә. Шуларҙың береһе, мәҫәлән, үҙен баҙар хужаһы кеүек тота. Арзанға алып, арттырып һатып ултырыусылар уға ярарға тырыша, сөнки ҡайһы саҡ быларға ла "тауар" тама. Тегеңә күмәртәләп ҡайҙандыр (ғәҙәттә, Ташкенттан, тиҙәр) килтерелгән йәшелсә-емеште алалар ҙа, ваҡлап һатып, үҙҙәренә "навар" сығаралар. Кемдер үҫтергәнде һатыу рәхәт, көн буйы баҡсаңда бөксәңләп, һыу һибеп, утап, йыйып, кисен ҡалаға килтереп, хәлдән тайып ултырыу түгел. "Тәмләткестәр ҡайҙан?" тип һораусыларға күҙ ҙә йоммай: "Үҙемдеке, бына бит таҙартып ултырам", - тиҙәр. Алты сутый ерҙә көндәр буйы һатырлыҡ итеп үҫтерерһең редисканы! Һыулы полиэтилен тоҡта оҙаҡ ятыуҙан япраҡтары серей башлаған тауарға "төҫ" индереп ултырғанын йәнәшәһендәгеләре күреп тора, әммә һатып алыусыға был хаҡта әйтергә ярамай.

- Мин үҫтергән йәшел һуған ҡояшта һулып бара, ә тегенеке көнө буйы ятһа ла бер нәмә лә булмай, сөнки химик ашлама менән эшкәртелгән, - ти инәйҙәрҙең береһе.

- Һеҙҙе урамға һатыу итергә сығырға нимә мәжбүр итә? - тип ҡыҙыҡһынам бер нисәһенән.

- Улым йорт һатып алды, әле эше бик күп. Уға ярҙам итәйем, тим. Яңыраҡ пенсиямдың 5 мең һумын бирҙем. Икенсе малайым да кредитҡа сит ил машиналы булды. Уныһына ла өлөш сығарғым килә, - тине береһе.

- Балалар баҡса өйөнә газ, ут, һыу үткәртте, байтаҡ аҡса тотонолдо. Шуға ҡыҙымдың баҡсаһында үҫкән йәшелсә-емеште булһа ла һатып бирәйем тип ултырам, - тине йәнәшәһендәгеһе.

- Пенсиям аҙ, фатирға түләгәндән, дарыу алғандан һуң йәшәр өсөн ҡалмай ҙа тиерлек. Шуға үҙемдән артҡанын һатырға тура килә, - ти өсөнсөһө.

Бына шулай, урамға береһе лә сәбәпһеҙ сығып ултырмаған.

Бер бабай сәскә үҫтерә, уны баҙарҙа йыш күрәм. Яратып, күңел биреп шөғөлләнгәне әллә ҡайҙан һиҙелә, улар хаҡында мауыҡтырғыс итеп һөйләй.

Кемдер юҡ ҡына әйберен сығарып, алыу-алмауҙарына ҡарамай, көнө буйы үҙе ишеләр араһында ултыра. Ундайҙар, күрәһең, аралашыуға мохтаж: йә яңғыҙ йәшәйҙер, йә өйөндә аңлау тапмайҙыр.

Урамдағы баҙар һатып алыусылар өсөн уңайлы, әлбиттә. Эштән һуң алыҫҡа барып йөрөйһө түгел, юл ыңғайы кәрәк нәмәнде алаһың. Икенсенән, тәҡдим ителгән тауарҙар үҙ төбәгебеҙҙә үҫкән, экологик яҡтан таҙа, әллә ҡайҙан килтерелгән, оҙаҡ һаҡланһын өсөн махсус эшкәртелмәгән. Мәҫәлән, магазинда алма тулып ятһа ла, кешеләр уны урамда сауҙа иткән инәйҙәрҙән алыусан.

"Быларына әҙерәк ҡорт төшкән, - тип уңайһыҙланған әбейҙән бер ҡатын: "Минә тап шул алмаларҙы бирегеҙ, улар таҙа була. "Алманың аҫылын ҡорт ашай" тигән мәҡәл юҡҡа ғына әйтелмәгән бит", - тип күп кенә итеп үлсәттерҙе. Шунан:

- Яңыраҡ телевизорҙан ишеттем, Краснодар өлкәһенән сит илгә тап ҡортло алмалар ебәреүҙәрен һорағандар икән, - тине.

Ә беҙгә килтерелгәндәре өс ай ятһа ла бер нәмә лә булмай. Быйыл йәй ошондай хәлде күҙәтергә тура килде. Июнь уртаһында күстәнәскә тип алма һатып алдым. Тыштан бик матур ине, үҙебеҙгә лә ҡалдырҙым. Ни эшләптер ашалмай оҙаҡ торҙо, яңыраҡ ҡына ташланым. Бер генә лә үҙгәрмәнеләр. Тик өс ай һаҡланған алма ашарға яраҡлымы икән, тигән шик тыуҙы.

Әйтергә теләгәнем шул: урамдарҙа баҙар кәрәк, ләкин уларҙа ситтән килтерелгән һәм тикшерелмәгән йәшелсә-емеш, тәмләткес үләндәр һатылмаһын. Өфө өсөн махсус булдырылған баҙарҙар бик аҙ. Уларын да ныҡлап тикшереп, ҙур туҡталыштарҙағыларын ғына ҡалдырып, сауҙа итеү өсөн уңайлы шарттар тыуҙырырға кәрәктер. Мәҫәлән, С. Перовская менән С. Кувыкин урамдары мөйөшөндә өҫтө япмалы бәләкәй баҙар бик тә ярап ҡалыр ине. Дөрөҫ, әллә ни йыраҡ та түгел Аврора урамында бар ул баҙар, ләкин кеше күп йөрөй торған урында түгел, эске яҡта. Бында әллә нисә урам киҫешкән, байтаҡ туҡталыш бар, шуға ла уңайлы булыр ине. Миллионлы ҡала өсөн баҙарҙың күп булыуы отошло. Тик улар һәр яҡтан уйланып, халыҡ өсөн уңайлылыҡ тыуҙырып ойошторолһон ине.

**Зөһрә ҠОТЛОГИЛДИНА.**

ХӘҠИҠӘТИҺҮҘ

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Беренсе киҫәк. Боронғо дәүер.

### Дүртенсе бүлек. Көньяҡ Урал гун эпохаһында



Иң боронғо төркиҙәрҙең этномәҙәни берлегенең тәү формалашҡан территорияһын асыҡлау һәм хәҙерге төрки халыҡтары ата-бабаларының бынан ер шары буйлап таралып китеү ыҡтыбын билдәләү өсөн башланғыс ориентирҙар ошолар: а) төрки телдәренең бер-береһе менән һүҙлек запасы һәм грамматик төҙөлөшө яғынан ныҡ оҡшаш булыуы, ә был берҙәмлек бары тик иң боронғо ата-бабаларҙың бер уртаҡ территорияла оҙайлы ваҡыт дауамында бергә йәшәүе шартарында барлыҡҡа килгән; б) боронғо төркиҙәрҙең теле тураһындағы иң иртә яҙма сығанаҡтар. Һуңғылары Шумер һәм Ҡытай документтарынан тора. Шумер яҙмаһы - ер шарында иң боронғоларҙан һанала, Яҡын Көнсығышта (Месопотамияла) б.э. тиклем IV - III мең йыллыҡтарҙа барлыҡҡа килгән һәм ул эш документтаре, уҡыусыларҙың көндәлектәре, тарихи сюжеттар һ.б. нәмәләр яҙылған балсыҡ таҡтасыҡтарҙа (табличкаларҙа) сағылыш тапҡан. Ошо документтарҙы ҡалдырған Месопотамия халҡының теле ғалимдар араһында киҫкен бәхәстәр тыуҙырҙы. Ошондай фекер айырымлыҡтарының асылына ҡағылып тормайынса, бына нимәне билдәләп үтәйек: күп кенә хәҙерге заман лингвистары шумер телендәге 100-гә яҡын һүҙҙең мәғәнәһен боронғо һәм хәҙерге төрки телдәре аша аңлап булыуына иғтибар итҡән. Ҡайһы бер миҫалдарға туҡталайыҡ: ада - атай, ата - әсә, ту - тыуҙырыу, ере - ир, рядовой, угу - уҡ, таг - тағып ал, заг - яҡ, ме - мин, зе - һин, ане - ана, гаш - ҡош, кир - ер, кер, уш - өс, у - ун, уд - ут, удун - ағас, утын һ.б. Шумер телендә типик төрки һүҙҙәре булып, уларҙың мәғәнәһе төрки халыҡтары вәкилдәренең һәр ҡайһыһына аңлашылып тора. Ошо темаға беренселәрҙән булып Ҡаҙағстандың арҙаҡлы ғалимы һәм йәмәғәт эшмәкәре Олжас Сөләймәнов иғтибар итә, ул шумер һәм боронғо төрки телдәренең оҙаҡ йылдар дауамында параллель рәүештә үҫешә барып, бер-береһенә йоғонто яһауы хаҡында белдерә. Уның ошо фекере менән байтаҡ ҡына төркиәтселәр ҙә килешә. Тимәк, Яҡын Көнсығыш халыҡтарының ниндәйҙер бер өлөшө боронғо замандарҙан бирле борого төрки телендә һөйләшкән һәм дәүләт халҡының телендә һәм яҙма документтарында сағыу эҙ ҡалдырған. Ошо боронғо төрки теленең ҡайһы бер һүҙҙәре урындағы географик атамаларҙа (топонимикала), этнонимияла (халыҡ атамалары) һаҡланып ҡалған

Тикшеренеүселәр бер һүҙҙән документтарҙа субар (субар - һыу, йылға кешеләре) халҡы иҫкә алыныуын таный, ә был атама сыуаш халҡы ұҙатамаһының иң боронғо варианты икән. Хәҙерге осорҙоң ҡайһы бер Рәсәй ғалимдары ошо фактҡа мөһим этногенетик мәғәнә һалып, сыуаш халҡының иң боронғо ата-бабаларының килеп сығышын Яҡын Көнсығыш территорияһы менән бәйләй. Уларҙың фекеренә ярашлы, субар ҡәбиләләре Урта Волга буйына Урта Азия биләмәләре аша күсеп килгән, унда ла боронораҡ шул уҡ этноним таралған була. Шулай итеп, килтерелгән миҫалдар Алғы һәм Урта Көнсығыштың төрки халыҡтары телдәренең нигеҙе - боронғо төрки телендә аралашҡан иң боронғо ҡәүем таралып йәшәгән өлкә булыуы хаҡындағы фекерҙе раҫлай.

Иң беренселәрҙән булып ошондай уҡ фекерҙе Ә.-З. Вәлиди белдерә, ул ошо төбәктең иң боронғо төркиҙәрен энеолит эпохаһының Анау мәҙәниәте ҡәбиләләре менән бәйләй, уларҙың тоньяҡтағы биләмәләренең сиктәре Урта Азияның бөтөн көньяҡ өлөшөн эсенә алған була. Шумер цивилизацияһы тарҡалғандан һуң Алғы Азия төркиҙәренең бер өлөшөнөң Урта Европаға күсеп китеп, унда Европаның төньяғында Этрурия дәүләтен барлыҡҡа килтереүҙә һәм үҫтереүҙә ҡатнашыуы хаҡындағы ҡараш бар (б.э. тиклем VIII - II бб.). Этрусктарҙан шулай уҡ яҙма ҡомартҡылар ҡалған, уларҙың теленә лә боронғо төрки теленең йоғонтоһо булғанлығы күҙәтелә.

Ғалимдарҙың Яҡын һәм Урта Көнсығыштың, Урта Азияның һәм Үҙәк Европаның боронғо төркиҙәре хаҡында белдерелгән ҡараштары сактарҙың, массагеттарҙың, дайҙарҙың (дахтар, дактар) - Урта Азияның, Ҡаҙағстандың көсмә ҡәбиләләренең һәм Көньяҡ Урал ҡәбиләләренең төрки телле булыуын еңел генә аңларға мөмкинлек бирә. Әйтелгәндәргә бәйләп, Ф.Р. Латыповтың боронғо сактарҙың тәүҙә Яҡын Көнсығышта йәшәүе, һуңынан килеп тыуған ҡатмарлы хәлдәр арҡаһында Урта Азия, Ҡаҙағстан һәм Көньяҡ Себер аша көнсығышҡа табан хәрәкәт итеүе, Яҡут ерҙәренә барып сығып, яҡуттар халыҡ булып ойошҡан дәүерҙә уларҙың этник төшөн хасил итеп, уларға үҙҙәренең боронғо үҙатамаһын - сак, йәғни саха исемен биреүе хаҡындағы фекерҙәре тарихи ҡыҙыҡһыныу уята. Яҡут халҡының боронғо ата-бабаларының сактар менән туранан-тура генетик бәйләнеше хаҡындағы ҡараш иғтибарға лайыҡ.

Юл ыңғайы скифтарҙың һәм улар менән союздаш халыҡтарҙың теле мәсьәләһен ҡарауҙы зарури тип иҫәпләйбеҙ. С.Е. Маловтың тикшеренеүҙәренән һуң был мәсьәлә Ф. Ғ. Ғарипова һәм бигерәк тә М.З. Зәкиевтың хеҙмәттәрендә яңы сифатлы кимәлгә күтәрелде. Айырым алғанда, М.З. Зәкиев билдәле булған скиф һүҙҙәренең этимологияһын яңынан тикшерә һәм уларҙың күптәренең төрки тамырлы икәнен, ә мәғәнәләрен хәҙерге төрки халыҡтары телдәре аша еңел аңлатып булыуын иҫбатлай. Ошо тәү сығанаҡ материалдары иҫәбенә б.э. тиклем IV быуатта йәшәгән скиф батшаһы Атейҙың исемен дә индергә була, ул "атай" тигәнде аңлата.

М.З. Зәкиев скифтарҙың сак сығышлы булыуы хаҡындағы мәсьәләне яңынан ҡуя һәм боронғо Ҡытай сығанаҡтарында скифтарҙың саи (сак һүҙенең варианты) тип аталыуы хаҡында мәғлүмәт килтерә. Ул иирк, аргиппей этнонимдары этимологияһына иғтибар итеп, уларҙың төрки сығышлы булыуын раҫлай. Унан башҡа, ғалим аргиппейҙарҙың башҡорттарҙың ата-бабалары булғанлығы хаҡындағы фекер менән килешә.

Боронғо төркиҙәрҙең теле тураһындағы яҙма сығанаҡтарҙың икенсе төркөмө Боронғо Ҡытай, антик һәм Рим-Византия авторҙары хеҙмәттәрендә сағылыш тапҡан гун (һун) һүҙҙәренән тора. Иң тәүгеләрҙән булған, б.э. тиклем III быуатта йәшәгән авторҙың хеҙмәтендә өс гун һүҙе яҙып ҡалдырылған: "tang-li-ku-tu-san-jui", уның мәғәнәһен хәҙерге төркиәтселәр бер ауыҙҙан "күк тыуҙырған... шаньюй", тип уҡыйҙар. Был гун императоры титулының бер өлөшө. Мәҫәлән, ошо титулдың тулы вариантарының береһе - "сюннуның күктән ҡуйылған бөйөк шань-юйы" тигәне менән - император Маодунь нарыҡланған (б.э. тиклем II быуат). Хәҙер фәндә б.э. тиклем IV - III быуаттарҙа гундарҙың һәм Үҙәк Азияның башҡа халыҡтарының үҙҙәренең яҙмаһы булыуы хаҡында мәғлүмәт бар, һәм күптәр уны тағы ла иртәрәк быуаттарҙа хасил булған, тип иҫәпләй. Тимәк, ул замандарҙа уҡ үҙ яҙмаһы булған төрки-гун теле булған. Н.А. Баскаков гун теленең төркиҙәр теленә ҡарағанлығы хаҡында мөһим аргументтар тапҡан, ул төрлө сығанаҡтарҙан гун исемдәрен йыйнап алып, уларҙың этимологияһын аңлата алған. Ул шулай уҡ гундар теленең болгар теленә яҡын булыуын һыҙыҡ өҫтөнә ала.

Төркиҙәрҙең тәү Ватанының Үҙәк Азияла булыуы хаҡындағы ҡараштың формалашыуына VI быуатта баҙыҡ руник яҙмаһы булған Бөйөк төрки ҡағанатының барлыҡҡа килеүе факты хәл иткес йоғонто яһаған. Үрҙә бәйән ителгәндәрҙән боронғо төрки ҡәбиләләре йәшәгән территорияларҙы тарайтып күрһәтеүҙең Ҡаҙағстан, Алғы Азия, Көнсығыш һәм Үҙәк Европа биләмәләре менән бәйле фактарға тура килмәүе беленә.

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**
**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы. Башы 2022 йылдың 28-се һанында).**

---

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 78



## ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

### Калинковичи-Мозырь һөжүм итеү операцияһы. Мозырь рейды

Мозырь ҡалаһы гарнизонында немецтарҙың төп көсө - 251-се пехота дивизияһы, уға танкылар һәм үҙйөрөшлө орудиелар бирелгән була, шулай уҡ 167-се боевой төркөм һәм тар-мар ителгән часть ҡалдыҡтары оборона тотоуға йәлеп ителә. Немец командованиеһы уларға Мозырь ҡалаһын нисек итеп булһа ла үҙ ҡулдарында ҡалдырырға бойора.

Корпус командирының һәм штабтың планына ярашлы, 13 ғинуарға ҡаршы төндә 15-се гв. атлы дивизияһының ике полкы һәм 147-се гв. артминполкы Щекотово ауылын үтеп, Матренкиға яҡынлаша, ошо ауыл янында дошмандың Мозырь ҡалаһынан сигенеү юлын киҫә. Корпустың ошо частары дошмандың ике батальонға яҡын пехотаһын тар-мар итә, уның миномет батареяһының утын баҫтыра, Лапти утары эргәһендә тупланған немец обоздарын туҙҙыра.

16-сы гв. атлы дивизияһы частары һөжүмгә күсергә әҙер тора. Был ваҡытта 62-се гв. атлы полкында ике генә эскадрон ҡалған була. Полктың 1-се эскадроны дошманды Передерейки ауылынан бәреп сығара. 13 ғинуарҙа корпус командиры М.П. Константинов 15-се гв. атлы дивизияһына 415-се уҡсы полк менән бергәләшеп Мозырь ҡалаһына көньяҡ-көнсығыштан һөжүм башларға бойора. 14-се һәм 16-сы гв. атлы дивизияларына Мозырь ҡалаһының тимер юлы станцияһын алыу бурысы ҡуйыла. Ошо көндөң кисенә 15-се дивизияның 53-сө гв. атлы полкы Бибики, Бобренята, Булавки ауылдарын дошмандан таҙартып, Мозырь ҡалаһының көньяҡ ҡырыйына килеп етә. Шулай уҡ ошо дивизияның 55-се гв. атлы полкы Бобры утарын биләй һәм Мозырь ҡалаһы йүнәлешендә хәрәкәт итеүен дауам итә.

Еңелә барыуын аңлап, ҡамауҙа ҡалыу хәүефенән Мозырь гарнизоны командирҙары ҡаланан сигенергә ҡарар итә. Дошман подразделениеларында паника башлана, улар үҙҙәренең һуғыш мөлкәте менән тулы келәттәрен шартлата башлай. 15-се гв. атлы һәм 415-се уҡсы дивизиялары Мозырь партизандары бригадаһы булышлығында 14 ғинуарға ҡаршы төндә Мозырь ҡалаһын азат итә. Дошман Припять йылғаһының икенсе ярына сигенә. Ә 14 ғинуар иртәһендә 14-се һәм 16-сы гв. атлы дивизиялары Мозырь тимер юлы станцияһын ала. Шул уҡ көндә 61-се армияның уҡсы частары Калинковичи ҡалаһын да дошмандан азат итә.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

---

АҢЛАТАБЫҘ...



## ТҮЛӘҮҘӘР

**Балалар өсөн түләүҙәр, ғәҙәттә, билдәле бер осорға тәғәйенләнә, унан һуң йәнә ғариза яҙырға кәрәк. Быны Дәүләт хеҙмәттәре аша эшләү күпкә еңелерәк һәм уңайлыраҡ.**

**Ниндәй ташламаларҙы оҙайтырға кәрәк?**

● Берҙәм пособие - 12 айға тәғәйенләнә. Уны йөкләлөктөң 12 аҙнаһына тиклем иҫәпкә торған ҡатын-ҡыҙҙар, шулай уҡ сабыйы донъяға килгәндән алып 17 йәше тулғанға тиклем ата-әсәләр (уллыҡҡа йәки ҡыҙ итеп алыусылар, опекундар, попечителдәр) ала.

● Әсәлек капиталынан түләү бер йылға иҫәпләнә. Әгәр ғаиләнең йән башына уртаса килеме ике тапҡыр төбәк йәшәү минимумынан артмаһа, пособие өс йәшкә тиклемге балаларҙың ҡайһыһына булһа ла түләнә.

● Өс йәшкә тиклемге тәүге балаға пособиены бер йәшкә тиклем, һуңынан ике һәм өс йәшкә тиклем тәғәйенләйҙәр. Түләү баланың тыуған көнөнән һуң оҙайтыла. Уны балалары 2022 йылдың 31 декабренә тиклем тыуған ғаиләләр алырға мөмкин.

Балалар өсөн түләүҙәрҙе Социаль фондтың клиенттар хеҙмәтендә һәм Күп функциялы үҙәктә лә оҙайтырға мөмкин. Түләүҙәрҙе оҙайтыу өсөн ағымдағы ваҡыт тамамланғанға тиклем бер ай алдан мөрәжәғәт итергә кәрәк.

*✓ Глобалләшеү шарттарында бер халыҡ та тик үҙенең генә телендә һөйләшеп йәшәй алмай. Шуның өсөн бөгөн һәр кемдең кәмендә ике телде белеүе мотлаҡ, ә инде күберәк телде белһә, тағы ла яҡшыраҡ.*

# МИЛЛӘТТЕҢ АЛТЫН

## һәр кем көс һалырға, үҙ өлөшөн индерергә тейеш!

**"Иң тәүҙә һүҙ булған" тиелә изге китапта. Ә бит төптән уйлап ҡараһаң, ысынлап та, барлыҡ башланғыстарҙың нигеҙендә һүҙ ятҡанлығын аңлауы ауыр түгел. Һүҙгә һүҙ ялғанһа, төшөнсә, мәғлүмәт барлыҡҡа килә һәм шул мәғлүмәтте дөрөҫ һәм урынлы ҡулланыусы кеше башҡаларҙы үҙенең артынан эйәртә алыусы уҡытыусыға, яҙыусыға, сәйәсмәнгә әүерелә.**
**Ғалим-филолог, журналист, дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре, юғары мәктәп уҡытыусыһы, филология фәндәре кандидаты, Рәсәй Федерацияһының 8-се саҡырылыш Дәүләт Думаһы депутаты, "Берҙәм Рәсәй" фракцияһы һәм Дәүләт Думаһының Мәғариф буйынса комитеты ағзаһы, Башҡортостан Республикаһының 5-се һәм 6-сы саҡырылыш Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты, Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайы рәйесе урынбаҫары, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы (конгресс) - йәмәғәт ойошмаларының Халыҡ-ара берлеге Президиумы рәйесе Эльвира Ринат ҡыҙы АЙЫТҠОЛОВАның да барлыҡ башланғыстарының нигеҙендә һүҙгә, мәғлүмәт менән эш итеүгә туранан-тура мөнәсәбәт ята. Былар хаҡында уның менән ҡорған әңгәмәлә уҡырһығыҙ.**

**Эльвира Ринат ҡыҙы, һеҙҙең бала, үҫмер сағығыҙ совет осорона тура килгән. Ул саҡтарҙа малайҙарҙың күбеһе - шофер, космонавт, ҡыҙҙарҙың күбеһе уҡытыусы, әртис булырға хыяллана торғайны. Бөгөнгө ысынбарлыҡ менән сағыштырғанда һеҙҙең хыялығыҙ нисә процентҡа тура килә тип уйлайһығыҙ?**

- Мин бер ҡасан да депутат булырмын, сәйәсәт менән шөғөлләнермен тип уйламағайным. Шул яҡтан ҡараһаң, бала, үҫмер сағым хыялдары менән хәҙерге ысынбарлығым бер нисек тә тап килмәй. Әсәйем уҡытыусы булғас, уға оҡшарға тырышып, туғандарымды, ҡурсаҡтарымды бергә ултыртып ҡуйып үҙемсә уҡыта торғайным. Йәй көндәрендә бәләкәй туғандарымды командаларға бүлеп, ярыштар, төрлө уйындар ойоштороҙом. Тәүге хыялым уҡытыусы булһа, икенсеһе әртис булыу хыялы. Ул ваҡытта өйҙәрҙең стеналарында, шифоньерҙарҙа билдәле сәнғәт кешеләренең фотоһүрәттәрен ҡуйыу модала ине. Шуға күрә уларға ҡарап әртис булам тип тә хыялланып алдым.

Әле сәйәсәт менән шөғөлләнәм икән, был эшемдә атҡарыр өсөн әҙерәк уҡытыусы ла, әҙерәк журналист булырға ла тура килә. Журналист булыуға килгәндә, инәйемдең иҫләүенсә, мин таяҡты микрофон итеп тотоп, кешеләр янына килеп, уларға һорауҙар биреп, һөйләндереп тә йөрөгәнмен икән. Шуның өсөн дә барыһын бергә алғанда хыял менән ысынбарлыҡ нисбәттәре, бәлки, тап киләләр ҙә. Мин шундай мәғлүмәт ишеткәйнем. Беҙҙең илдәге иң ҙур һаналған Һаҡлыҡ банкында бер нисә йыл элек етәкселәрҙең һәр береһенең педагогик белеме булыуы талап итеп ҡуйылған. Кеше әгәр ҙә балалар менән аралаша белһә, һәр бер кеше менән дә дөрөҫ итеп мөнәсәбәт ҡора алалыр тип уйлайым.

Икенсенән, журналист булараҡ тәжрибәмдә ҡарағанда, журналист - ул профессиональ дилетант. Беҙҙең һәр бер өлкә буйынса, бик тәрәнгә төшмәһәк тә, мәҡәлә яҙырлыҡ белемебеҙ бар. Өсөнсөнән, уҡытыусы ла, журналист та иң беренсе нәүбәттә үҙе өсөн түгел, кешеләргә ярҙам итер өсөн тырыша, ә был сифаттар сәйәсмәнгә хас. Биографиямда ошо ике йүнәлештең булыуы артабанғы эшмәкәр-легем өсөн ныҡ ярҙам итте, эшемдә еңеләйтте.



*Әле сәйәсәт менән шөғөлләнәм икән, был эшемдә атҡарыр өсөн әҙерәк уҡытыусы ла, әҙерәк журналист булырға ла тура килә. Журналист - ул профессиональ дилетант. Беҙҙең һәр бер өлкә буйынса, бик тәрәнгә төшмәһәк тә, мәҡәлә яҙырлыҡ белемебеҙ бар. Өсөнсөнән, уҡытыусы ла, журналист та иң беренсе нәүбәттә үҙе өсөн түгел, кешеләргә ярҙам итер өсөн тырыша, ә был сифаттар сәйәсмәнгә хас. Биографиямда ошо ике йүнәлештең булыуы артабанғы эшмәкәрлегем өсөн ныҡ ярҙам итте, эшемдә еңеләйтте.*

**Шундай күҙәтеүем бар: юғары уҡыу йортона ингәнсе педучилище (хәҙер педколледж) тамамлаусылар тормоштарында күпкә өлгәшәләр. Педколледжда вузға тиклем уҡыу һеҙгә нимә бирҙе?**

- Мин Белорет педучилищеһына һигеҙенсе кластан һуң килдем. Унда практик белем күп бирелә. Мин, мәҫәлән, башланғыс кластарҙа барлыҡ дәрестәр менән бер рәттән, хеҙмәт дәресен дә алып бара алам икән, бының өсөн сигергә лә, тегергә лә, бесергә лә, ашарға бешерергә лә белергә тейешмен. Әгәр ҙә быларҙы белмәһәң, педучилищела һинә барыһын да, рәсем дәресен үткәрергә лә, физкультура уҡытыусыһы булырға ла өйрәтәләр. Һин музыка дәресен дә алып бара алаһың. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, минең музыкаль белемем юҡ ине, әммә бер кем дә һинән "Бармы-юҡмы?" тип һорап тормай. Шул уҡ ваҡытта үҙең йырларға ла, бейергә лә, фортепьянола уйнарға ла бурыслыһың, сөнки үҙең белмәгәнде балаға өйрәтеп булмай. Дәресте алып барғанда үҙеңде нисек тоторға, дәрес планын яҙырға, балалар менән дөрөҫ аралашырға ла өйрәтәләр. Бындай практик белемде юғары уҡыу йортонда бирмәйҙәр.

Мин педучилищены ҡыҙыл дипломға тамамлап, Өфөгә, Башҡорт дәүләт университетының журналистика факультетына уҡырға килдем. Тәүҙә хайран ҡалдым, сөнки теләһәң - уҡыйһың, теләмәһәң - уҡымайһың. Ә педучилищела етди сәбәпһеҙ бер дәрес тә ҡалдырып булмай. Унда, ғөмүмән, дәрес ҡалдырыу тигән төшөнсә лә юҡ. Киске сәғәт унда барыһы ла йоҡларға ята, ут һүндерелә. Әгәр ҙә ниндәйҙер өйгә эшенде эшләп өлгөрмәһәң, коридорға сығып ултырырға мәжбүр булаһың.

Инәйем (әсәйем) уҡыған Белорет педучилищеһында белем алыу минә ҙур тормош һабағы биргәндер. Әгәр ҙә урта мәктәптән һуң тура юғары уҡыу йортона ингән булһам, кем белә, бәлки, тормош юлым башҡасараҡ та булыуы мөмкин ине. Белоретта мине бик тәжрибәле, белемле педагогтар уҡытты, уларға бик рәхмәтлемен. Унда алған белем, тәжрибә минә, үҙем уҡытыусы булып эшләмәһәм дә, бик кәрәк. Университеттың һуңғы курсында уҡығанда тормошҡа сығып, дипломды тап шул мәлдә тыуған ҙур ҡыҙым менән бергә алдыҡ. Бер үк ваҡытта гәзит, радио, телевидение редакцияларында ла эшләнем.

**Бала сағығыҙҙың иң бәхетле мәлдәре ниндәй хәтирәләргә бәйле, мөмкин булһа, ҡайһы сағығыҙға әйләнеп ҡайтырға теләр инегеҙ?**

- Инәйемдең оҙон күлдәген кейеп, ултырғысҡа баҫып, концерт ҡуя торғайным. Шул мәлдәрем иҫемә ныҡ уйылып ҡалған. Тыуған ауылым Яңы Байрамғол, унда әзәйем дә (өләсәйем дә) йәшәне, бик күп ваҡытымды уның менән үткәрә торғайным. Ул мине ҡумыҙ сиртергә, домино уйнарға өйрәтте, йәйҙәрен бергәләп еләккә йөрөнөк. Айырым ниндәйҙер бер ваҡиғаны әйтә алмайым, күрәһең, бала сағым тотошлайы менән тик яҡты нурҙар менән тукылғандыр. Мин ауылдағы әбейҙәрҙе аптыратырлыҡ тел бисҭәһе булғанмын, әлбиттә, ул саҡтарыма ҡайтҡым килә. Ул саҡта беҙҙең ауыл ҙур һымаҡ, ә Учалы ҡалаһы йыһан һымаҡ булып тойола ине. Мин тыуған саҡта ул ҡалаға ун йәш кенә булған. Атайымдың ата-әсәләре Златоуст ҡалаһында йәшәне. Ә ул ҡала Учалынан да ҙурыраҡ, етмәһә, ул ҡалалағы ҙур магазинда торған ҙур ҡурсаҡ донъяның иң ҙур мөғжизәһе һымаҡ. Атайымдың "Муравей" тигән мотоциклы бар ине. Ул мине шунда ултырта ла ялан-ҡырҙар буйлап алып йөрөй, һабантуйға барабыҙ. Инәйем уҡытыусы булғас, уның менән күберәген мәктәптә осраша торғайныҡ.

Мин бик иртә уҡырға, һанарға өйрәндем. Мәктәпкә барам тип илай торғас, алты йәшем тулғас, октябрь айында мине 1972 йылғы балалар менән беренсе класҡа алып барып ултырттылар. Һуңғы партала ултырам, әммә минән уҡытыусы ҡул күтәрһәм дә һорамай. Кластағы балалар үҙ-ара дуҫлашып бөткән, минә салага тип ҡарайҙар. Тағы ла илай торғас, инәйем мине өйгә алып ҡайтып, икенсе йылына тиңдәштәрем менән бергә уҡырға алып барҙы. Ҡыҫҡаһы, мин беренсе класҡа ике тапҡыр барҙым. Былар барыһы ла бала сағымдың яҡты иҫтәлектәре.

**Һеҙ ике телдә лә, башҡортса ла, русса ла, логик фекерләй алаһығыҙ. Нисек уйлайһығыҙ, күп тел белеүҙең әһәмиәте нимәлә? Мәҫәлән, беҙ, башҡорттар, бер ваҡытта булмаҫ ваҡиға хаҡында "ҡыҙыл ҡар яуғас" тип әйтәбеҙ, ә урыҫтар "после дождичка в четверг" ти. Тимәк, ике телдә лә яҡшы белеү һәм логик фекерләү һәләте ошоларҙың синтезын табырға ярҙам итә. Быны нисек аңлата алаһығыҙ?**

- Ул минең ғаиләмдән килә. Минең инәйем ауылда үҫкән, ул башҡортса ғына һөйләшә, ә атайым Златоуста тыуып үҫкән, унда мәктәп тамамлаған, күберәк русса аралаша. Уның атаһы

✓ *Беҙ конкурентлылыҡҡа һәләтле булғаныбыҙ өсөн дә шәжәрәләребеҙ һаҡланып ҡалған. Беҙҙең шәжәрәләрҙә дини руханиҙар ҙа, юғары хәрби вазифа яулаған олатайҙарыбыҙ ҙа бар.*



менән әсәһе башҡортса һөйләшә ине, әммә Златоуста мөхит урыҫ телендә ине. Шуға күрә мин бәләкәй саҡтан ике тел араһында үҫтем. Әйтәйек, атайым урыҫса бер һүҙ әйтһә, мин инәйемдән ул һүҙҙең башҡортсаһын һорайым. Инәйем менән башҡортса, атайым менән урыҫса һөйләшкәнгә күрә миңә ике телдә лә һөйләшеү еңел бирелгәндер.

Беҙ байтаҡ ваҡыт Ҡаҙағстанда йәшәп алдыҡ. Шуға күрә мин башта башҡортса иркен һөйләшә алманым. Аҙаҡ Өфөлә уҡый башлағас, рухлы башҡорт ғаиләһенә килен булып төшкәс, башҡорт теле миңә кире ҡайтты. Сөнки телем асылған сакта зиһенемә һалынып ҡалған туған телем үҙ шытымын бирҙе һәм мин бөгөн башҡортса иркен һөйләшә, фекер йөрөтә алам.

Глобалләшеү шарттарында бер халыҡ та тик үҙенең генә телендә һөйләшеп йәшәй алмай. Шуның өсөн бөгөн һәр кемдең кәмендә ике телде белеүе мотлаҡ, ә инде күберәк телде белһә, тағы ла яҡшыраҡ. Ике телде белеү беҙгә конкурентлыҡта өҫтөнлөк бирә.

Элек йәштәр ауылдарҙан ҡалаларға сығып киткәс, мохтажлыҡтан сығып

**конкурентлылыҡҡа һәләтле була алабыҙ, заман башҡортоноң модуле ниндәй булырға тейеш тип иҫәпләйһегеҙ?**

- Был турала ҡоролтайҙа бик йыш фекер алышабыҙ. Әлеге көнгә тиклем йәмәғәт ойошмалары, ғалимдар менән берлектә башҡорт халҡының стратегияһы ҡабул ителгән. Унда конкурентлылыҡ тураһында ла һүҙ бар. Әлбиттә, беҙгә хас түгел, тип әйткән хәлдә лә, беҙ корпорацияларҙа ҡатнаша алабыҙ. Беҙ ҡайһы ваҡыт үҙебеҙҙең образдың аманаты ла булып китәбеҙ. Был күренеш башҡорттарға хас түгел, тибеҙ ҙә, аяҡ һәлендереп нимәләр көтөп ултырабыҙ. Минеңсә, квоталар, льготалар ғына талап итеп ултырыу, улары ла кәрәк, оранжереяларҙа ғына ел-ямғыр тейҙермәй үҫтергән сәскәне хәтерләтә. Ә ул сәскәне теплица ҡурсаулығынан ситкә сығарһаң, һулыуға дусар. Шуның өсөн беҙгә теплицала ултырыу бөтөнләй ярамай. Сөнки беҙ донъя халыҡтары ниндәй шарттарҙа йәшәһә, шундай уҡ шарттарҙа йәшәргә дусар ителгәнбеҙ. Беҙ балаларыбыҙҙы дөрөҫ тәрбиәләп, уларға кәрәкле белемде биреп, үҙебеҙҙең элитаны үҙебеҙ үҫтерергә бурыслыбыҙ.

каһы Башлығы Радий Фәрит улы тәҡдим иткән "Атайсал" проекты әсендә лә тормошҡа ашырып була. Быға тиклем был проектта кемдең аҡсаһы бар, кем ауылда мәсет йә башҡа объект төҙәтә ала, шул ҡатнаша ине. Әммә иң ҙур байлығыбыҙ интеллектуаль базабыҙ икәнлеген дә оноторға ярамай. Ҙур трибуналарҙан тороп, юғары һүҙҙәр һөйләгәнсе, һәр ҡайһыбыҙ үҙебеҙҙең ҡулдан килгәнде эшләргә бурыслы. Алтын бөртөкләп йыйыла, тиҙәр халыҡта. Милләтебеҙҙең алтын фондын ойоштороу өсөн һәр беребеҙҙең көс һалырға, үҙ өлөшөн индерергә мөмкинлеге бар.

▸ **Тимәк, беҙ конкурентлылыҡҡа һәләтле тип уйлайһығыҙмы?**

- Һис шикһеҙ, һәләтле! Сөнки конкурентлылыҡҡа һәләтле булыу сифаттан ғына тормай, иң беренсе нәүбәттә, белемгә, тырышлыҡҡа бәйле. Балаларыбыҙға төплө белем, йүнәлеш биреп ярҙам итһәк, киләсәгебеҙ булыр. Бөгөн кемдең белеме, тәжрибәһе, старт мөмкинлектәре бар, шулар алға китә. Кемдәр халыҡҡа ярҙам итә, халыҡ уларға ла ярҙам итергә тейеш. Күп кенә халыҡтарҙа бер кеше үҫә башлаһа, уға күмәк көс менән ярҙам итә башлайҙар. Был үҙенә күрә селтәрле маркетингка оҡшаған.

▸ **Әйткәндәй, беҙҙең шәжәрә формаһы шул уҡ селтәрле маркетинг һымаҡ...**

- Ҡануниәткә килгәндә, беҙҙә иң тәүҙә ниндәйҙер күренеш барлыҡҡа килә, артабан уға ярашлы йәмғәт фекере туплана башлай, шунан һуң ғына закондар ҡабул ителә. Минеңсә, әле был өлкә үҫешә башланы. Дөрөҫ, беҙ бындай бумға әҙер түгел инек. Тәбиғәттә булған һәр нәмә йә дарыу, йә ағыу тип тә әйтәләр. Барыһы ла миҡдарына ҡарап. Шуның кеүек, интернет дарыу булһын өсөн, әлбиттә, сама кәрәк. Ә сама миҡдарын һәр кеше үҙе хәл итә. Закондарҙы ҡараһаҡ, ике-өс йыл элекке менән сағыштырһаҡ, беренсе аҙымдар эшләнгән. Әле фейктарға ҡаршы закон ҡабул ителде. Хәҙер элекке һымаҡ булмаған нәмәне баштан сығарып ҡотҡо таратыуға сик ҡуйылды. Дәүләт тарафынан финансланған матбуғат сараларында эшләүсе журналистың интернетта биш мең уҡыусыһы булһа, блогерҙарҙыҡы миллионлап. Шул уҡ ваҡытта блогерҙың яҙғандарын объектив тип атай алабыҙмы? Юҡ, әлбиттә!

▸ **Тимәк, объективлыҡ мәғлүмәтте ҡабул итеүселәрҙең һанына бәйле түгел, тип әйтә алабыҙмы?**

- Шулай, беҙ бөгөн блогерҙарҙың да эшмәкәрлеген закон нигеҙендә яйға һалырға тейешбеҙ. Улар ҙа яҙғандары өсөн яуаплы булырға бурыслы. Ҡыҫҡаһы, интернет селтәрендә тәртиптең зарурлығы барыһына ла билдәле. Быны барыһы ла таный. Ә бына ике йыллап элек барыһы ла һүҙ азатлығы яҡлы ине.

# ФОНДЫН ОЙОШТОРОУҒА...

урыҫ телен өйрәнә башлай торғайны. Хәҙер интернет, телевидение йоғонтоһонда балаларҙың, үҫмерҙәрҙең барыһы ла тиерлек урыҫ телендә һөйләшеп, туған телен онота башланы. Әле ғилми яҡтан был хаҡында ныҡ уйланам. Туған телдәрҙе, башҡа телдәрҙе белеү мәсьәләләре ғилми яҡтан ныҡ өйрәнелмәгән. Шуға күрә Мәскәүҙә ошо мәсьәләләр менән ҡыҙыҡһынған эксперттар менән бәйләнештәмен...

▸ **Ысынлап та, был хәл ҙур проблемаға әүерелде, уны нисек төҙәтеп була тип иҫәпләйһегеҙ?**

- Иң беренсе нәүбәттә интернет селтәрендә башҡорт балалары өсөн контент булырға тейеш. Икенсенән, урыҫ телендәге йәнһүрәттәрҙе башҡортсаға тәржемә итеү, үҙебеҙҙең телдәге йәнһүрәттәрҙе мөмкин тиклем күберәк төшөрөү мотлаҡ. Бының өсөн ҙур күләмдәге финанс талап ителә. Рәсәйҙәге һәр милли төбәк донъя стандарттарына ярашлы йәнһүрәт сығара алмауын да яҡшы беләбеҙ. Балаларҙың туған телен белеп үҫеүендә ғаиләнең дә роле ҙур. Мәғариф системаһына килгәндә, дәрестәрҙең ҡыҙыҡлы булыуы, уҡытыусыларҙың янып эшләүе талап ителә.

▸ **Һеҙгә Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы етәксеһе булараҡ һорау: бынан ун биш-егерме йыллап элек Рәсәй Федерацияһы Президенты Владимир Путин Рәсәй өсөн милли идея тип дәүләтебеҙҙең һәр йәһәттән дә конкурентлылыҡҡа һәләтле булыуын атағайны. Бының менән килешергә була. Беҙ, башҡорттар, донъяның ҙур сәйәси донъяһында ҡатнаша алмайбыҙ, корпорациялар төҙөп, ҙур иҡтисади-финанс донъяһы төҙөй алмайбыҙ. Былар өсөн беҙҙең менталитет та тап килмәй. Беҙ әлеге донъяла нисек**

Әле бына нимә асыҡланды: бөтөн донъяла химия фәне өлкәһендәге иң ҙур шәхес - ул башҡорт егете, Республика инженер лицей-интернаты уҡыусыһы Вадим Харисов. Ул быйыл июль айында Швейцарияла үткән халыҡ-ара химия олимпиадаһында 90 илдән ҡатнашҡан уҡыусылар араһында еңеп сығып, Алтын миҙал яуланы. Беҙҙең бурыс - ошондай милләттәштәребеҙҙе күтәреп, уларҙың эргәһендә мәктәптәр асыу. Был егетте шундай уңыштарға алып сығыусы уҡытыусыһы - ул Айнур Ғүмәров, ә Айнурҙың уҡытыусыһы-

- Эйе, беҙ конкурентлылыҡҡа һәләтле булғаныбыҙ өсөн дә шәжәрәләребеҙ һаҡланып ҡалған. Беҙҙең шәжәрәләрҙә дини руханиҙар ҙа, юғары хәрби вазифа яулаған олатайҙарыбыҙ ҙа бар. Улар конкурентлылыҡҡа эйә булмаһа, быға өлгәшә алмаҫтар ине.

▸ **Урта быуаттар үлсәме буйынса ҡарағанда интернет меңәр йыллыҡҡа торошло үҫеште тәшкил итте. Мәғлүмәт туплауҙың, аралашыуҙың был ысулы кешегә бихисап мөмкинлектәр бирҙе. Интернет ярҙамында кешеләр бер-беренен табыша, уның ярҙамында мил-**

***Әле йәмәғәт ойошмалары, ғалимдар менән берлектә башҡорт халҡының стратегияһы ҡабул ителгән. Унда конкурентлылыҡ тураһында ла һүҙ бар. Әлбиттә, беҙгә хас түгел, тип әйткән хәлдә лә, беҙ корпорацияларҙа ҡатнаша алабыҙ. Беҙ ҡайһы ваҡыт үҙебеҙҙең образдың аманаты ла булып китәбеҙ. Был күренеш башҡорттарға хас түгел, тибеҙ ҙә, аяҡ һәлендереп нимәләр көтөп ултырабыҙ. Минеңсә, квоталар, льготалар ғына талап итеп ултырыу, улары ла кәрәк, оранжереяларҙа ғына ел-ямғыр тейҙермәй үҫтергән сәскәне хәтерләтә. Ә ул сәскәне теплица ҡурсаулығынан ситкә сығарһаң, һулыуға дусар. Шуның өсөн беҙгә теплицала ултырыу бөтөнләй ярамай.***

Рәсәйҙең халыҡ уҡытыусыһы Лиза Әгәҙуллина. Лиза Ҡыям ҡыҙы химия фәненә һәләтле балаларҙы үҙ янына туплаған, уларҙы ҡурсалай, һәр уҡыусыһы менән үҙе шөғөлләнә. Шуға күрә лә маҡсатына өлгәшә. Һәр башҡорт шәхесенең үҙ йүнәлеше һәм ундағы тәжрибәһе бар. Тимәк, беҙ йәштәребеҙҙе үҙебеҙҙең йүнәлештә тәрбиәләй алабыҙ. Әммә был эш системаға һалынмаған әле.

Беҙ быйылдан һәр милли мәктәпкә билдәле шәхестәребеҙҙе беркетеүҙе маҡсат итеп ҡуйҙыҡ. Шул мәктәптәрҙә талантлы балалар асыҡланһа, уларҙы бергәләп үҫтереү ҙә беҙҙең бурысҡа инә. Быны Башҡортостан Республи-

**ләтебеҙ берләшә, фекер алыша, ижадсылар яҙған әйберҙәренә лайк-баһа ала, үҙ-үҙен бойомға ашыра. Бер үк ваҡытта интернет ярҙамында донъяны юҡҡа сығарырға ла була. Социаль селтәрҙәрҙә ялған мәғлүмәт таратҡан өсөн яуаплы булыуҙың талаптары юҡ. Гәзит-журналда, китапта баҫылған ялған мәғлүмәтең өсөн яуап бирәһең. Сөнки ул - документ. Интернетта урынлаштырылған мәғлүмәтең өсөн яуаплылыҡ сиктәре киләсәктә дәүләт тарафынан ниндәйҙер формаһын алырға тейештер бит, нисек уйлайһығыҙ? Әгәр ҙә былар булдырылмаһа, интернет милләтте һәм дәүләтте тарҡатыусы көскә әйләнеүе бар...**

▸ **Ә бит һүҙ азатлығы менән объективлыҡ араһында ла айырма бар. Әгәр ҙә мәғлүмәт еткереүсе кемдәндер үс алыу, йөҙөн йыртыу, башҡалар алдында шәхсиәтен кәмһетеү маҡсатын ҡуйһа, объективлыҡ хаҡында фекер йөрөтөү ҙә мөмкин түгел...**

- Бөгөн кем нимә теләй, шуны яҙа, хатта сәйәсмән булмаһа ла сәйәсәт тураһында фекер йөрөтә. Беренсенән, әлбиттә, һүҙ азатлығы ла кәрәк, икенсенән, кеше үҙенең фекерен еткереү хоҡуғын тормошҡа ашырырға теләй икән, уның эске контроле булырға тейеш, шунһыҙ йәмһеҙ күренеш килеп сығасаҡ. Әлбиттә, киләсәктә интернетта ла дөйөм ҡағиҙәләр барлыҡҡа киләсәк.

▸ **- Наполеон "Сәйәсмәндең йөрәге башында булырға тейеш", тигән. Ошоға ниндәй аңлатма бирер инегеҙ?**

- Минеңсә, сәйәсмән булыуы бик ҡатмарлы. Ни өсөн тигәндә, популизм сәйәсмәндәргә хас булырға тейеш түгелдер. Бөгөн сәйәсәт донъяһы шулай ҡоролған: унда кешеләрҙең хистәрендә уйнау йыш күренеш. Кешеләрҙе илатыу, йәлләтеү тойғоһо уятыу өсөн бик күп технологиялар ҡулланалар. Күп илдәрҙә "төҫлө революциялар" ошо рәүешле тормошҡа ашырыла. Югославияны ошо юл менән бер нисә өлөшкә бүлделәр, Украина майҙан аша үтеп, бөгөн ниндәй хәлгә килеп баҫты. Бындай сәйәсәт халыҡтың хисендә уйнау юҫығында тормошҡа ашырыла. Сәйәсмән булараҡ, шуны ла әйтәм, ҡайһы ваҡыт бик ауыр ҡарарҙар ҙа ҡабул итергә мәжбүрһең. Һәр бер ҡарарҙы йөрәк аша үткәреп, баш аша тормошҡа ашырһың. Бөгөн технологиялар шулай ҡоролған.

(Дауамы 11-се биттә).

***✓ Ғәжәп хәл. Таҙа ҡанлы башҡорт тоҡомонан бындай аттарҙы ошоға тиклем осратҡаным юҡ. Улар, нигеҙҙә, ҡола төҫтә, сыҫҡан һыртлы була: баштары ҙур, муйындары йыуан, көслө, ләкин байтаҡ тәпәш була.***



Беҙҙең старшина ла ошондай юлды һынап ҡарарға булды. Ул, эскадронды таратып ебәргәс, ветврачты саҡырып алды ла:

- Һин теге Яуымбаевтың атын манежға сығар әле, ипкә килтерәйек, - тине.

Ләкин һарайға инеп киткән ветврач урамда ҡалған Заровняев эргәһенә йүгереп кире сыҡты.

- Юҡ, юҡ, иптәш старшина, яҡын барырлыҡ түгел, үрәпсеп, ажғырып тора.

- Ничево, ничево, ундай сығынсыҡтарҙы өйрәтә торған саралар ҙа етерлек! - Старшина һарайға ынғайланы, артынан ветврачты ла эйәртте. Әүхәҙи быларҙы ҡолаҡтарын шымайтып ҡаршы алды. Ләкин донъя күргән старшинаны ҡолаҡ шымайтып ҡына ҡурҡытырлыҡ түгел ине. Әммә ат та иҫәр түгел, старшинаға арты менән боролдо ла шартлатып ишеккә типте. Был урынында шып туҡтаны ла ветврачҡа ымланы. Ә теге, икенсе яҡтан ат алдына сығып, рәшәткә аша таяҡ менән төрткөләп аттың башын старшина торған ишек яғына борҙо. Шуны ғына көтөп торған Заровняев ҡапыл ишекте шар асты ла аттың моронона йәбеште. Һул ҡулы менән Әүхәҙиҙең үңәсенән һығып тотоп, уң ҡулы менән аттың морон кимерсәгенән эләктереп алды, аттың башын аҫҡа баҫып, сәбәләнеп йөрөгән ветврачҡа:

- Давай, давай закрутку! - тип ҡысҡырҙы. Әүхәҙи башын күтәреп старшинаны һелкеп ырғытырға тырышты. Бер нисә тапҡыр уны иҙәндән күтәреп тә алғайны, ләкин аяуһыҙ старшина бурауыҙ һымаҡ ҡыҫып тотҡан ҡулдарын ысҡындырманы. Ат бөтә көсөнә тыпырсынды, ажғырып төрлө яҡҡа әйләнгеләп туланы, ләкин уны һелкеп ырғыта алманы. Ҡылдан эшләнгән закрутка менән Әүхәҙиҙең ирендәрен ҡыҫып борҙолар ҙа бөтә кәүҙәһе ҡалтыранып иҫтән яҙа башлаған айғырҙың нуҡтаһы өҫтөнә йүгән, шунан башын өҫкә күтәрмәһен өсөн мартингал һалдылар. Бер нисә минут эсендә ҡара тиргә төшөп, еүешләнгән күҙҙәрен өҫкә текәгән атты закрутканан тартып, һөйрәп тигәндәй, манежға сығарып эйәрләнеләр. Хәҙер атҡа Заровняев хужа. Ул бесәй шикелле ат өҫтөнә һикереп менде лә:

- Закрутканы ысҡындыр, - тип ҡысҡырҙы. Әүхәҙи сайҡалып алды ла торған ерендә туп кеүек ырғырға тотондо. Артҡы аяҡтарын өҫкә ташлап, һыртында ултырған рәхимһеҙ кешене һелкеп ташларға ынтылды.

- Ә һин әле козлить итергә маташаһыңмы? Ничево, ничего, ашыҡма, уныһына ла сара табырбыҙ, - тип ауыҙ йырҙы эйәргә сайыр һымаҡ йәбешкән старшина. Аяғындағы шпорҙары менән аттың ҡабырғаһын тызыны. Бындай мөғәмәләне ғүмерендә лә күрмәгән айғыр уның һайын ҡарышты, торған урынынан бер аҙым да ҡуҙғалманы. Старшина ауыҙын йырғыслап, ҡамсы менән дә ярып ҡараны, ләкин ат тағы ла нығыраҡ ҡарышты. Шунан, артын борҡотоп, өҫтөндәге кешене ергә алып һелкте, әммә сос старшинаны йыға алманы. Теге бесәй шикелле аяғы менән төштә. Тамам сығырынан сыҡҡан старшина аттың янбашына ҡамсы менән бер нисә тапҡыр һыҙыра тартты ла, ялына йәбешеп, яңынан уның өҫтөнә атланды. Хәҙер Әүхәҙи арт аяҡтарына торҙо, алғыларын юғары күтәрҙе - старшинаны артҡа шылдырып төшөрөргә самаланы. Ләкин старшина көслө аяҡтарын нығыраҡ ҡыҫып бөтә кәүҙәһе менән алға эйелде лә бының муйынына йәбеште. Ат, өҫтөндәге кешенең көслө ҡулдарынан ысҡынырға теләп, муйынын борғоланы, һыртын бөгөп, бөтә кәүҙәһе менән һелкенде, әммә старшинаны барыбер ергә ырғыта алманы. Шулай бер урында күп кенә тапанып торғас, старшина һуңғы сараһын уйлап сығарҙы. Аттан һикереп төштө лә:

- Давай был сығынсыҡты кешәнләйек, - тип һарайҙан арҡан алып килергә ҡушты.

Тамам киреләнгән атты кешәнләп тә артыҡ эш ҡыйрата алманылар. Артҡы бер аяғы үҙ муйынына ныҡ тарттырып бәйләнгән Әүхәҙиҙең ҡымшанырға ла әмәле ҡалманы. Муйынын дуға кеүек бөгөп ҡан һауған йәшкелт күҙҙәрен маңлайына атты ла, бөтә тәнен дерелдәтеп, үҙ яҙмышын көттө. Старшина башы ла, аяғы ла ҡуҙғалмаҫлыҡ итеп шаҡарып бәйләнгән аттың һыртына ултырҙы ла бөтә ғәләм алдында мәсхәрәләнгән ғорурлығы өсөн көтмәгәндә атты ҡамсыларға тотондо.

Арғымаҡ, старшина һуҡҡан һайын, тыпырсынды. Ҡамсы менән һуҡҡан эҙҙәренән юлаҡ-юлаҡ булып ҡабарып сыҡҡан урынын дерелдәтте. Ахырҙа арыған старшина ҡамсыһын ергә ырғытты ла шпорҙары менән тибенә башланы. Бындай яҙаны көтмәгән Әүхәҙи ҡапыл ҡабырғаһына ауҙы. Итегенең йөҙләгән өҙәңгенән ысҡындырып өлгөргән Заровняев ат аҫтына эләкмәне. Ерҙә дырҫ-дырҫ тын алып ятҡан Әүхәҙиҙе яңынан ҡамсыланы ла кешәнен систе. Күҙ төптәренә тиклем ҡара тиргә төшкән ат аяғына баҫып бөтә көсөнән һелкенде лә, ике яғында баҫып торған ике кешегә күҙҙәренән ҡәһәрле осҡон атып, һарайына йүнәлде. Был инде, ун биш йыл атлы ғәскәрҙә хеҙмәт итеп, дошман алдында ла сигенмәгән Заровняевтың ат алдында беренсе еңелеүе ине.

- Был атты бөгөн ашатмағыҙ! Ул һыуынырға тейеш! - тип әмерен бирҙе лә каптеркаға ҡарай атланы.

Уның ҡайтыуын дүрт күҙ менән көткән Ғилмишәриф, ниҙер булғанын йыртыҡ итеген ҡаплап, һөмһөрө ҡойолоп килеп инеүенән үк һиҙенде. Ул һылтау табып шунда уҡ һарайға йүгерҙе. Күңеле һиҙгән икән шул: тәне ут кеүек янып, йөндәре ойошҡан Әүхәҙи ҡан һауған ҡабырғаһын стенаға терәгән. Ғилмишәрифте күргәс, үҙ ҡайғыһын һөйләргә теләгәндәй ыңғырашып алды, Әүхәҙи кормушкаһын кимереп тора ине.

Юлаҡ-юлаҡ ҡамсы эҙҙәрен күргәс, ат йәнле Ғилмишәрифтең күҙенә йәш эркелде, тамағына төйөр тығылды. Ҡара тиргә төшкән, ауыҙ ситтәре иҙелеп бөткән. Тимәк, атты кемдер көсләп менергә маташҡан. Был тик старшинаның ғына этлеге! Старшинаға булған ихтирамы көл булып елгә осто. Ғилмишәриф ҡулын әсе тир йылыһы бөркөп торған ат ялы араһына тығып бер аҙ торҙо ла, һалҡын һыуға мансылған сепрәкте аттың ҡабарған, ялланып сыҡҡан урындарына һалды. Хайуан муйынын бөгөп яҡташының арҡаһынан иркәләне.

Әүхәҙиҙе бер нисә көн урамға сығармай тоттолар. Заровняев камил ябығып йонсоғандан һуң аттың уға буйһоноп баш һалыуын көттө. Әммә малҡай ябығыу түгел, Ғилмишәрифтең тырышлығы менән көн дә матурайҙы, ялтыраны. Ғилмишәриф старшина ҡушҡандың киреһен эшләне. Уны ваҡытында таҙартты, ашатты, эсерҙе. Ат старшинаға мөнәсәбәтен тиҙ генә үҙгәртергә теләмәне, ҡолаҡтарын шымайтып ҡаршы алды, һалҡын ҡараш менән оҙатып ҡалды. Старшина ла тиҙ бөгөлөп төшә торғандарҙан түгел: Әүхәҙигә йәшертен генә килеп уны тәрбиәләп йөрөгән Ғилмишәрифкә ҡарата үтемлерәк сара эҙләне. Нисек кенә булмаһын, Ғилмишәрифте үҙ атынан айырырға, ситләтергә уйланы, сөнки үҙе атлана алмаған атҡа рядовой Ғилмишәрифтең менгәнен эскадрон күреп йә ишетеп ҡалһа, Заровняевҡа был часта урын ҡалмаясағын бик яҡшы һиҙә ине. Был тиклем мәсхәрәне нисек күтәрә алһын? Ошоға тиклем бер кемгә лә билдәле булмаған ауыл егете рядовой Яуымбаев эскадронда ғына түгел, ә бөтә училище күләмендә дан ҡаҙанасаҡ. "Билдәле, был атты эскадрон командирына ла тәҡдим итеп була, ул да яҡшы ат күрһә йоҡоһонан яҙа. Ләкин Әүхәҙиҙең эскадронда тороп ҡалыуы килешеп етмәҫ, сөнки ул Яуымбаев бар ерҙә башҡа кешене яҡын ебәрмәйәсәк", - тип уйланы Заровняев.




## VIII

Бер нисә көн үтеүгә, эскадрон командованиеһының саҡырыуы буйынса училищеның ат белгестәре, шул иҫәптән ат өйрәтеү буйынса инструктор, эскадрон старшинаһының күптәнге танышы, хеҙмәттәше Дон казагы майор Пустовой яңы аттарҙы ҡарарға килде. Уларҙы бер тапҡыр урап сыҡты ла бөтәһенән дә аша ҡарап торған бурыл айғырға сат йәбеште:

- О, бына был, исмаһам, ат! Был хайуан өсөн йәнең дә йәл түгел, - тип телен шартлатып ҡуйҙы. Артынан бер аҙым ҡалмай йөрөгән ветврачтан:

- Йә, документын күрһәтегеҙ әле был хайуандың. Ниндәй тоҡомдан, ата-инәләре кем? - тип һораны.

Ветврач, Әүхәҙиҙең паспортын алып, мәғлүмәттәрҙе уҡып сыҡҡас:

- Ғәжәп хәл. Таҙа ҡанлы башҡорт тоҡомонан бындай аттарҙы ошоға тиклем осратҡаным юҡ. Улар, нигеҙҙә, ҡола төҫтә, сыҫҡан һыртлы була: баштары ҙур, муйындары йыуан, көслө, ләкин байтаҡ тәпәш, бәкәлдәрендәге сәсмәүҙәренә үҫкән йөнө услап алмалы, үҙҙәре сиктән тыш сыҙамлы була. Был хайуандың тик ял-ҡойроғо ғына башҡорт атыныҡы. Ә үҙе ысын альбинос[1], - тип уны тыңлап тороусы кешеләргә башҡорт аты тураһында тулы мәғлүмәт бирҙе. Промерҙарын күҙе менән самаланы ла: - Был ысын стипль-чез[2], конкур[3] аты. Бына исмаһам һын, бына был инде беҙҙең кавалерияның данын күтәрә, биҙәй торған спорт аты буласаҡ, - тип эске шатлығын йәшерә алмай телен тағы шартлатып алды. Ләкин үҙе ҡолаҡтарын шымайтып, нуҡта чумбурына тартылып торған ат эргәһенә килергә шикләнде. Майор үҙен уратып алған бөтә кешене һөҙөп ҡарап сыҡты ла: - Атты эшлектән сығара яҙғанһығыҙ. Ул бөтөнләй ҡарыш ҡанға оҡшай. Бына закрутканан һуң әле ирендәре лә уңалып бөтмәгән, - тип ул Әүхәҙиҙең аҫҡы-өҫкө ирендәрендә түңәрәкләнеп өтөлөп сыҡҡан, көрән ҡутырына ҡулы менән төртөп күрһәтте. - Кемегеҙ һуң менергә маташҡайны? - тип майор тирәләп торған атлыларға һорау бирҙе. Аҫҡа төбәлеп, итегенең башы менән нишләптер ер соҡоп торған Заровняев, ҡапыл йоҡоһонан уянған кеше шикелле:

- Өсөнсө көн мин атланырға маташҡайным, - тип яуап бирҙе.

- Йә, йә, шунан?..

- Шунан шул. Был ат мине мендермәне. Уның характеры минекенә ҡарағанда нығыраҡ булып сыҡты, иптәш майор.

Бөтә ат белгестәре старшинаның яуабынан ҡысҡырып көлөп алды. Тағы ла нығыраҡ йәнләнә төшкән майор күҙҙәрен хәйләкәр ҡыҫып:

- Ай-ай, ай-ай! Бына һиңә кәрәк булһа, беҙҙең кавалерияла һин дә атлана алмаған ат килеп сыҡты бит, ә! Был мәсхәрәне нисек күтәреп йөрөмәк кәрәк, иртәгәнән башлап һиңә, шпорҙарыңды тапшырып, йәйәүле ғәскәргә күсергә тура килер, ахыры, - тип майор старшинаның былай ҙа әсенеп торған күңел йәрәхәтенә тоҙ һалды. Атлы ғәскәрҙән йәйәүлегә күсеү кавалерист өсөн иң ҙур яза икәнен белгән кешеләр бер-береһенә ҡарап йылмайҙы.

- Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы шул - иртәгә был дөлдөлдө беҙҙең ат һарайына күсерегеҙ. Беҙҙә, әлбиттә, иптәш старшина, һинең һымаҡ атаҡлы кавалеристар юҡ, шулай ҙа был атты мин үҙем өйрәтеп ҡарарға уйлайым, - тип әмер бирҙе. Оялышынан кишер һымаҡ ҡыҙарған старшинаға көмөш шпорҙарын зыңҡылдатып (бәлки, шпорҙарының һуңғы сылтырауылыр) үксә шаҡып:

- Тыңлайым, иптәш майор, барыһы ла һеҙ ҡушҡанса булыр, - тип әйтеүҙән башҡа әмәл ҡалманы.

Кис, ҡараңғы төшөү менән, бөтә эскадрон казармала саҡта, старшина, артына текә таҡта ҡуйылған бричкаға тағып, Әүхәҙиҙе кавалерия училищеһының ат һарайына оҙатты. Казармалағы иптәштәре төнгө йоҡоға талғас, Ғилмишәриф йәһәт кенә кейенеп үҙҙәренең ат һарайына йүгереп килде. Ләкин Әүхәҙиҙең деннигы буш ине. Аҫау айғырҙың һыу төбөнә төшөп юғалған таш кеүек ғәйеп булыуы күп кеше, шул иҫәптән Ғилмишәриф өсөн дә, сер ине.

**(Дауамы. Башы 29-33-сө һандарҙа).**

*[1] Альбинос - кешеләр һәм хайуандарҙың ата-бабаларынан килгән нормаль пигментацияһының юғалыуы. Бабаларының тоҡомона оҡшамай, ғәҙәттә, аҡ төҫлө булып тыуыуы.*

*[2] Стипль-чез - 4 км-ҙан 8 км-ға тиклем (ҡаршылыҡтар ҡуйылған) ябыҡ дистанцияла аттарҙың сабышы.*

*[3] Конкур - ун дүрт ҡаршылыҡ ҡуйылған кәртәле майҙанда атлы-спорт ярыштары үткәреү.*

# МИЛЛӘТТЕҢ АЛТЫН ФОНДЫН ОЙОШТОРОУҒА...

## һәр кем көс һалырға, үҙ өлөшөн индерергә тейеш!

**(Башы 8-9-сы биттәрҙә).**

**Һеҙ модератор булған бер нисә форумда булдым. Көтөлмәгән йүнәлештәрҙә дөрөҫ булған дәлилдәр килтереп, һөйләшеүҙе кәрәкле йүнәлештә алып китеү һәләте һеҙгә ҡайҙан килә? Был тәжрибәгеҙ һөҙөмтәһеме, әллә логик фекерләүегеҙ үҙенсәлегеме?**

- Ул минең журналист булып эшләгәндә туплаған тәжрибәмдер, тием. Миңә телевизион журналист булараҡ тура эфирҙарҙа оҙаҡ эшләргә тура килде. Шул уҡ ваҡытта мин алдан йүнәлештәрҙең төрлө яҡҡа боролоу ихтималлығын иҫәптә тотоп, төрлө сығанаҡтарҙан мәғлүмәт туплайым. Эфирҙар аша үткәндә бер нисә сценарий башымда була.

**Пушкин "Даһилыҡ парадокстың дуҫы" тигән. Тормошоғоҙҙа көтөлмәгән парадокс хәлдәр булғаны бармы?**

- Сәйәсәт, ғөмүмән, көтөлмәгән күренеш. Ниндәйҙер үҙем көтмәгән хәлдәргә тарыһам, мин уларҙы булырға тейешле күренеш тип баһалайым, аптырамаҫҡа тырышам. Шул уҡ Дәүләт Йыйылышына барыуҙы тәҡдим итеүҙәре лә парадокс булғандыр. Шул уҡ ваҡытта Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайына килеүемде лә ҙур һынау тип ҡабул иттем.

**Дәүләт Думаһында профилле йүнәлештә эшләгән депутат булараҡ, мәғариф системаһына үҙгәрештәр индереүҙең мотивтарын нимәлә күрәһегеҙ? Был - бер, икенсенән, мәктәптә туҡтауһыҙ инновациялар үткәреп, балаларҙы "тәжрибә ҡуянына" әйләндермәйбеҙме?**

- Минеңсә, һуңғы ике йылда мәғарифта барған үҙгәрештәр бик кәрәкле. Ә "тәжрибә ҡуяны"на килгәндә, беҙҙең балалар үҙҙәре шундай осорға тура килде бит. Элек уҡытыусыларға Хоҙайға табынған һымаҡ ҡаранылар, сөнки улар бер кемдән алып булмай торған белем бирә инеләр. Бөгөн иһә уҡыусы интернет аша мәғлүмәт туплап, уҡытыусынан да күберәкте белергә мөмкин. Балаларҙы беҙ бөгөн мәғлүмәт менән аптырата алмайбыҙ. Ә бына уларҙы тормошҡа әҙерләргә тейешбеҙ. Бында инде кешелек сифаттары, хеҙмәт тәрбиәһе биреү алға сыға.

Мәғариф системаһында бөгөн барған үҙгәрештәр саҡ ҡына һүңлабыраҡ башланды. Рособрнадзор вәкилдәре менән осрашыуҙа улар беҙгә ҡыҙыҡ ҡына фекер әйтте: беҙҙә стандартизация йәһәтенән күрһәткестәр йылдан-йыл яҡшырыуын сит илдәр күҙәтеп бара икән һәм тиҙҙән беҙҙең Рәсәй Федерацияһы донъялағы иң яҡшы системалар араһына инергә тейеш. Спорттағы кеүек, бында ла беҙгә санкциялар башлағандар, йәғни халыҡ-ара олимпиадаларға индермәйҙәр, командаларҙы РФ байрағы менән ҡатнаштырмайҙар, һ.б. Сөнки улар беҙҙең көсөбөҙҙө күрә. Шуның өсөн беҙгә тик үҙебеҙгә генә хас булған системаны ойошторорға кәрәк. Шуға микән, ҡайһы бер илдәр беҙҙең совет системаһын нигеҙ итеп алып, үҙҙәренең системаһын үҫтерәләр. Ә бына хеҙмәт тәрбиәһе беҙҙең системаның төп өлөшө. Беҙ әле шуға кире ҡайтып барабыҙ.

Былтыр беҙҙә "Мөһим дәрес" башланды, унда балалар дәүләт байрағын күтәрә, гимнды тыңлай. Был яңылыҡ башланғанда күпселек ата-әсәләр "Балаларға сәйәсәт нимәгә кәрәк?" тип риза һыҙлыҡ белдергәйне, ә бөгөн беҙ дөрөҫ юлда булғанлығыбыҙҙы аңлайбыҙ.

Уҡытыусыларға килгәндә, улар заманға яраҡлы булырға тейеш. Сөнки бала һәр ваҡыт бала булып ҡала, улар ҡатмарлы ситуацияларға эләккән саҡта уҡытыусы уларға дөрөҫ юл күрһәтергә бурыслы. Икенсенән, беҙ балаларыбыҙҙы үҙебеҙҙең традициялар нигеҙендә үҙебеҙҙең рухта тәрбиәләргә тейешбеҙ.

**Әйтеүҙәренсә, Берҙәм дәүләт имтиханын уйлап сығарыусы кеше быны үҙенең тормошондағы иң ҙур хатаһы тип иҫәпләгән икән. Беҙҙең мәғариф системаһына ситтән ингән был яңылыҡҡа нисек ҡарайһығыҙ?**

- Эйе, ул ҙур бәхәс тыуҙырҙы. Минең фекергә килгәндә, БДИ ул форма ғына, уның йөкмәткеһен, йәғни контроль-тикшереү материалын үҙебеҙҙең уҡыу йөкмәткеһенә яраҡлаштырыу талап ителә. Һорауҙар беҙҙең мәктәп программаһына тап килергә тейеш. Уҡыусы ун бер йыл буйына алған белемен ошонда күрһәтергә тейеш. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, БДИ һорауҙары күпкә ҡатмарлаштырып бирелә, шул арҡала балалар һәм ата-әсәләр стресс кисерә. Сөнки ул һорауҙар мәктәп программаһында юҡ, шуға күрә аҡса сығарып, өҫтәмә рәүештә әҙерләнергә кәрәк була.

Ә формаға килгәндә, беҙҙең балалар илебеҙҙең төрлө-төрлө алдынғы юғары уҡыу йорттарында белем алыуға өлгәшә. Элек, әйтәйек, Мәскәү дәүләт университетына инеү мөғжизә һымаҡ ҡабул ителә торғайны. Бөгөн бындай хәлдәр бер кемде лә аптыратмай. Элек ата-әсәләрҙең финанс мөмкинлеге, танышлыҡ принцибы был йәһәттән төп ролде уйнаны. Был йәһәттән БДИ беҙҙең балаларға трамплин ролен үтәгән оло мөмкинлек.

***БДИ ул форма ғына, уның йөкмәткеһен, йәғни контроль-тикшереү материалын үҙебеҙҙең уҡыу йөкмәткеһенә яраҡлаштырыу талап ителә. Һорауҙар беҙҙең мәктәп программаһына тап килергә тейеш. Уҡыусы ун бер йыл буйына алған белемен ошонда күрһәтергә тейеш. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, БДИ һорауҙары күпкә ҡатмарлаштырып бирелә, шул арҡала балалар һәм ата-әсәләр стресс кисерә. Сөнки ул һорауҙар мәктәп программаһында юҡ, шуға күрә аҡса сығарып, өҫтәмә рәүештә әҙерләнергә кәрәк була. Ә формаға килгәндә, беҙҙең балалар илебеҙҙең төрлө-төрлө алдынғы юғары уҡыу йорттарында белем алыуға өлгәшә. Элек, әйтәйек, Мәскәү дәүләт университетына инеү мөғжизә һымаҡ ҡабул ителә торғайны. Бөгөн бындай хәлдәр бер кемде лә аптыратмай.***

**Һеҙ халыҡ араһында йөрөгән, халыҡ менән үҙ телендә һөйләшә алған Дәүләт Думаһы депутаты. Һеҙҙең коллегаларҙан Лилиә Ғүмәрова, Зариф Байғусҡаров шулай уҡ башҡорт телендә аралашыусылар. Хәҙерге көндә һайлаусыларығыҙ күберәгендә ниндәй мәсьәләләр буйынса һеҙгә мөрәжәғәт итә?**

- 90 процент халыҡ үҙенең шәхси һорауы менән килә, уларҙың араһында табиптарға эләгеү мәсьәләһе менән килеүселәр - иң күбеһе. Шулай уҡ эшкә урынлашыу, мәктәп мәсьәләһе менән дә йыш мөрәжәғәт итәләр. Ҡайһы ваҡыт судтан һуң да киләләр - был осраҡта беҙ бер нисек тә ҡыҫыла алмайбыҙ, сөнки суд бөтөнләй айырым тармаҡ. Үҙенең идеяһын, ярҙамын тәҡдим иткән кешеләр ҙә бик күп. Мин быға бик шат, сөнки күп кенә милләттәштәребеҙ үҙҙәре өсөн түгел, халҡыбыҙ өсөн борсолоп йәшәй. Халыҡты иҫәпкә алыу кампанияһы барғанда беҙҙең төплө команда барлыҡҡа килде, тарихсыларыбыҙ, телселәребеҙ, йәмәғәт эшмәкәрҙәре был йүнәлештә дәррәү эшкә тотонғас, күршеләребеҙ беҙгә был эшмәкәрлек өсөн күпме финанс бүленеүе менән ҡыҙыҡһынды. Ә ысынбарлыҡта барыһы ла үҙ халҡы өсөн бушлай, ҡайһы берҙә ваҡытын ғына түгел, үҙ аҡсаһын сарыф итеп эшләне. Ҡыҫҡаһы, беҙҙең халыҡ араһында ысын фиҙаҡәрҙәр меңдәрсә.

Ҡайһы ваҡыт минең үҙемә лә ярҙам һорап мөрәжәғәт итергә тура килә. Әйтәйек, минән ярҙам һорап килеүсегә ярҙам күрһәтә алыусыларҙы ошо юл менән табам. Бер-беребеҙгә ярҙам ҡулы һонғанда ғына алға китербеҙ, тим. Әлбиттә, ярҙам һораусыларға кисекмәҫтән, ҡапыл ярҙам талап ителә. Ә ул мәсьәләне хәл итеү өсөн заманға ярашлы программалар ҡабул ителгәнсе байтаҡ ваҡыт кәрәк була. Глобаль кимәлдәге һорауҙар барлыҡҡа килһә, мин ул һорауҙарҙы Дәүләт Думаһында мәсьәлә итеп күтәреү юлдарын эҙләй башлайым, коллегаларым менән аралашам.

**Дәүләт Думаһында шәхсән инициативағыҙ менән ниндәй проблеманы закон кимәленә күтәрә алдығыҙ?**

- Һәр бер инициативаны үткәрер өсөн бик күп процедуралар аша үтергә кәрәк. Бының өсөн егермегә яҡын экспертиза үтеү талап ителә. Күтәргән проблемаңа барыһы ла ыңғай ҡараһын өсөн уның актуаль булыуы мотлаҡ. Закондар ижад иткәндә автор булараҡ төркөм менән ҡатнашам. Мин был саҡырылышта туған телебеҙгә ҡарата инициатива менән сығыш яһаусылар төркөмөндә булдым. Был мәсьәләне бер нисә тапҡыр ойоштороп ҡараныҡ, тик ул бик ауыр бара. Быны асыҡтан-асыҡ әйтәм, сөнки беҙҙең милли телдәрҙе һаҡлау мәсьәләһенә төрлө яҡтан ҡарап мониторинг үткәрәләр. Рәсәй күп милләтле ил, был ил кимәлендә ҡабул ителгән закон булғас, Башҡортостанда ла, Рязанда ла ул закон эшләйәсәк, шуның өсөн быны тик Башҡортостан өсөн генә ҡабул итеү мөмкин түгел.

**Ағымдағы йыл Рәсәйҙә "Педагог һәм остаз йылы" тип иғлан ителде. Һеҙҙең остаздарығыҙ бармы, беренсеһе - инәйегеҙ...**

- Ниһайәт, ил кимәлендә уҡытыусыға иғтибар барлыҡҡа килде. Инәйемә килгәндә, ул минең уҡытыусым да, инәйем дә, остазым да. Көнөнә ике-өс тапҡыр шылтыратышып, кәңәшләшеп торабыҙ. Яңы Байрамғол мәктәбендә уҡығанда Наилә апай беренсе уҡытыусым булды. Уның хаҡында яҡты иҫтәлектәр һаҡлайым.

Профессиональ яҡтан алғанда, минең уҡытыусым-остазым Тәнзилә Абдулла ҡыҙы Үлмәҫбаева. Мин радиоға эшкә килгәс, ул минең беренсе етәксем булды. Ғәҙел, талапсан, кешелекле, мин уға ҡарап: "Етәксе шулай булырға тейеш", - тип өйрәндем. Теге йәки был ситуацияла: "Тәнзилә Абдулла ҡыҙы ошо осраҡта нимә эшләр ине?" - тип фекер йөрөтәм. Һәр бер кеше, ғөмүмән, һинең тормошонда дуҫ та, дошман да түгел, ә уҡытыусылыр.

**"Үҙеңдән башҡаны әүлиә тип бел" тип өйрәтә халыҡ аҡылы...**

- Эйе, һәр бер кешенән нимәгәлер өйрәнергә тырышаһың. Яҡшыһын алаһың, насарынан ҡотолаһың. Ҡайһы бер кешеләрҙә күркәм сифат күрһәм, йыш ҡына шулай уйлайым: был сифат уға тыумыштан бирелгәнме, әллә ул быға үҙ-үҙен тәрбиәләү юлы менән өлгәшкәнме? Шунан уның ул сифатын үҙемдә тәрбиәләргә тотонам...

**Фәһемле әңгәмәгеҙ өсөн оло рәхмәт, Эльвира Ринат ҡыҙы! Һеҙҙе меңәрләгән гәзит уҡыусылар исеменән алтын юбилейығыҙ менән ихлас ҡотлайбыҙ, тыуған илебеҙ, республикабыҙ, халҡыбыҙ мәнфәғәте өсөн тынғыһыҙ эшегеҙҙән ҡәнәғәтлек алып, балалар, ейән-ейәнсәрҙәр ҡыуанысында йәшәүегеҙҙе теләйбеҙ!**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

ИНТЕРНЕТТАН



# КӨҘҘӨҢ ҮҘ ЙӘМЕ

■ Асыҡланыуынса, күптәр балаһын мәктәпкә әҙерләүҙе ярты йыл элек башлай. Яуап биреүселәрҙең 44 проценты бының өсөн ғаилә бюджетын ныҡ ҡыҫырға тура килеүен белдерә, 23 проценты - алдан аҡса йыя. Һәр дүртенсе респондент мәктәпкә әҙерлек өсөн аҡса етә тип иҫәпләй, әммә 7 проценты кредит алырға мәжбүр. Ата-әсәләрҙең 73 проценты совет осорондағы кеүек берҙәм форманың кире ҡайтыуын теләй. "1 баланы мәктәпкә әҙерләү күпмегә төшә?" тигән һорауға яуаптар төрлө була. Шулай ҙа күпселек 20 мең тирәһе тотона, шулай уҡ мәктәп кәрәк-яраҡтары өсөн 5-10 мең аҡса сығарып һалыусылар ҙа бар. Магазиндар буйлап йөрөүҙе иһә күптәр йәйҙең иң аҙаҡҡы аҙнаһына ҡалдыра икән.

■ Японияның Цукуба университеты тикшеренеүселәре физик әүҙемлектең кәйефте күтәреүен асыҡлаған. Быға тиклем дә психик сәләмәтлек өсөн спорттың ыңғай тәьҫире тураһында күп һөйләнелде. Әммә унда өйрәнеү объекты булып велосипед тора ине. Был юлы ғалимдар йүгереүҙең баш мейеһендәге кәйеф һәм когнитив функциялар өсөн яуап биреүсе өлөшөнә тәьҫирен өйрәнгән. Йүгергән саҡта организмдың күп кенә өлөштәре хәрәкәткә килә. Һынауҙарҙа 26 кеше ҡатнашҡан, улар йә 10 минут буйына йүгергән, йә шул уҡ ваҡыт ял иткән һәм мотлаҡ рәүештә интеллект һәм кәйефте билдәләүсе тест үткән. Был ваҡытта махсус ҡорамалдар уларҙың баш мейеһендәге әүҙемлекте күҙәтеп, теркәп барған. Һөҙөмтәлә ғалимдар йүгереүҙе психик сәләмәтлекте яҡшыртыу өсөн тәҡдим ителгән комплексҡа индерергә була, тигән һығымтаға килгән.

■ Аалто университеты (Финляндия) ғалимдары әйтеүенсә, һуң ятырға өйрәнгән кешеләрҙә насар ғәҙәттәр ҙә күберәк була, был иһә үҙ сиратында эш хаҡының түбән булыуына килтерә икән. Белгестәр 1966 йылда үткәрелгән һорау алыуҙарҙың мәғлүмәттәрен йыйып, 5 мең кешенең ғәҙәттәрен һәм эш хаҡы күләмен өйрәнгән. Кем һуң йоҡларға ята, ғәҙәттә, йоҡоһоҙлоҡтан да яфалана, улар араһында тәмәке тартыусылар, алкоголь ҡулланыусылар ҙа күберәк, ялҡаулыҡ кеүек сифаттар физик яҡтан әүҙем булыуға ла ҡамасаулай. Уларҙың, ысынлап та, иртә ятып, иртә тороусыларға ҡарағанда эш хаҡы ла аҙыраҡ була икән. Ғалимдар был "ҡанун"дың сәбәбен асыҡлау маҡсатында тикшеренеүҙәрҙе дауам итергә ниәтләй.

■ Аллерголог-иммунолог Елена Грек билдәләүенсә, кеше көҙөн вируслы сирҙәр менән йышыраҡ ауырый башлай. Быны төп сәбәбе - һауа торошона ярашлы кейенмәү. Күптәр көндәр һыуытҡас та, йылыраҡ кейенергә ашыҡмай һәм һалҡын тейҙерә. "Ҡайһылар, киреһенсә, нығ йылы итеп кейенә һәм тирләп йөрөй. Йәғни, организм йылынмай, кейем еүешләнгәс, өшөй башлай", - ти табип. Шулай уҡ D витамины етешмәүенән һәм ҡояш яҡтылығы кәмеүенән депрессияға бирелеү ҙә көҙгә хас. Быуын сирҙәре лә көҙөн аҙып китә. Неврологик ауырыуҙар ҙа, остеохондроз, радикулит, умыртҡалар араһы дискыһы бүсере менән яфаланыусылар ҙа көҙөн сәләмәтлеккә туймаҫ. Көндәр һыуытҡас, күберәк йоҡларға, яҡшыраҡ ашарға кәрәк. Көҙ һағыш мәле түгел, уның да үҙ йәме бар, шуға ла һәр миҙгелгә ҡыуанып йәшәһәң, бер сир ҙә һине йонсотмаясаҡ, тигән фекерҙә табип.

БАҠСА МӘШӘҠӘТТӘРЕ

# ҠЫШЛАУҒА...

## һарымһаҡ сәсәйек

**Йәйҙе йәйләп, алтын көҙгә лә аяҡ баҫтыҡ, шөкөр. Көндәр ҡыҫҡарҙы, һалҡынайтты, шулай ҙа баҡсала күңелле әле. Астралар, хризантемалар, гортензиялар, георгиндар сәскә ата, ағастар япраҡ ҡоя, уңғандар баҡсаһын ҡышҡа әҙерләй: көҙҙөң дә үҙенең йәме һәм хәстәрҙәре бар. Бөгөн баҡса миҙгелен ябыр алдынан башҡара торған эштәрҙең береһе - ҡышҡылыҡҡа һарымһаҡ сәсеп ҡалдырыу тураһында оҫта баҡсасы һм хужабикә Ләлә МОЗАФАРОВА менән әңгәмәләшәбеҙ. Ул Ейәнсура районы Иҫәнгол ауылында йәшәй.**

**➔ Ләлә апай, һеҙ баҡса үҫтереү менән күптән шөғөлләнәһегеҙме? Нимәләр үҫтерәһегеҙ?**

- Беҙ ирем менән Алыҫ Көнсығышта хеҙмәт иттек. Мин бәйләнеш өлкәһендә эшләнем. Бер бәләкәй генә хәрби ҡаласыҡта йәшәнек. Унда беҙҙәге кеүек тупраҡ юҡ, ере ҡомло. Шунда ла ләк үҫтерә торғайныҡ. Түтәлде ныҡытып берәй нәмә ҡуймаһаң, ямғыр яуғанда аға ла китә ине. 12 түтәл ләгем булды, ныҡ уңа торғайны.

1996 йылда пенсияға сығып, тыуған яғыбыҙ Ейәнсураға ҡайттыҡ. Миңә ул саҡта 37 йәш ине. Ҡараһаҡ, нимә генә юҡ баҡсаларҙа, кеше дәртләнеп эшләй. Беҙ ҙә район үҙәгендә төпләндек тә, баҡсаһын да үҫтерә башланыҡ. Былай миңә артыҡ әллә нимә кәрәкмәй, үҙебеҙ ашарлыҡ емеш, йәшелсә булһа, етә. Климат йылы, нимә ултыртһаң да уңа. Умарталығыбыҙ бар, баҡсамдың күберәге унда, картуфты ла шунда сәсәбеҙ, сөнки йәй башлыса шунда үтә. Яратып, йәйләү тип йөрөтәбеҙ уны.

Күп йыллыҡ сәскәләр яратам. Флокстарым матур. Пиондарым күп төрлө, улар күнелемә яҡын. Әле бына һалҡындар төшкәс, хоста шул тиклем шатланып ултыра, уға ямғырҙар килеште, һыуыҡҡа ла бирешмәй, сәскә ата. Бәрхәт сәскәһен үҫтерәм, улар оҙаҡ сәскә ата. Матурлығы өсөн лаванданы ултыртам, уны аҙын йәлләмәй, ҡырҡһаң, тарбаҡланып, йәйелеп китә. "Төнгө матурҡай" ("Ночная красавица") тигән сәскә оҡшай, георгиндың күп йыллығына ҡушып, "Дружные ребята" тигән бер йыллыҡ сортын сәсәм.



Алыҫ Көнсығышта йәшәгәс, лимонник үҫә беҙҙә, былтыр ҡыҙым багульник алып ҡайтты. Ул ҡарағат һымаҡ ҡыуаҡлыҡ, сәскә ата. Шунда тыуғас, үҙҙәренсә улар ҙа һағына ул яҡтарҙы. Шуға Алыҫ Көнсығыштан бер сәләм булып ултырһындар, тинек.

Ятыраҡ үсентеләрҙән һап-һары булып сәскә атҡан, крыжовник һымаҡ оҙонса емешле ҡарағатым бар, уны үҙемсә төҫөнә ҡарап, "алтын ҡарағат" тип йөрөтәм. Ирга үҫтерәм. Уларҙың емештәрен йыйып алырға ҡабаланмайым, баҡсала үҫкән һәр бер ҡыуаҡ - емешен өҙөп алып, ашап йөрөр өсөн. Ҡурай еләге 3 төрлө, ремонтант сорты ҡышҡа тиклем яҡшы уңыш бирә, яңыраҡ һары ҡурай еләге ултырттым. Атайымдың баҡсаһынан ҡаҙып алып ҡайтҡаны ҡыр ҡурай еләге, тәрбиәләһәң, емеше лә эре була. Үҙебеҙ өсөн йөҙөм дә үҫтерәбеҙ, "Алешкин", "Изабелла" сорттары, һуңғыһын кеше әллә ни яратмай, миненсә, компот өсөн бик яҡшы. 2 төрлө крыжовник, алма - барыһы ла бар.

**➔ Баҡса миҙгеле һеҙҙең өсөн ҡасан башлана? Үсентеләрҙе лә үҙегеҙ сәсәһегеҙме?**

- Үсентеләрҙе тормош иптәшем сәсә, уның ҡулы енел. Шулай ҙа күп ултыртмайбыҙ, хәҙер баҙарҙа ла йәшелсә күп бит. Әйтәйек, һары төҫтәге помидор күрһәң, ҡыҙыҡ өсөн булһа ла уны һатып алып ашап ҡарайһың. Ә былай баҡса эшен яратҡас, уны ауырлыҡ һанамайбыҙ. Барына шөкөр итеп, күңелле генә итеп эшләйбеҙ, улыбыҙ - Өфө-



АҢЛАТАБЫҘ...

# МЕЖАЛАУ



**Участканы межалау нисек һәм ни өсөн үткәрелә - "Росреестр"ҙың Башҡортостан буйынса идаралығы белгестәре аңлата.**

Закон буйынса межалау булмаған өсөн бер ниндәй ҙә сикләү юҡ, сөнки ул - ирекле ғәмәл. Әммә ер участкаһының сиктәре билдәләнмәһә, милекселәргә ергә межа ярыу һәм Берҙәм дәүләт күсемһеҙ милек реестрына аныҡ мәғлүмәттәр индереү яҡшыраҡ булыр.

**Ни өсөн был мөһим?**

**Ерҙе межалау түбәндәге мәшәҡәттәрҙән арындырасаҡ:**

● милекселәрҙе күп юридик проблемаларҙан азат итә - әгәр ыҙан һалһаң, Берҙәм дәүләт күсемһеҙ милек реестрында участкаһың аныҡ сиктәре күрһәтелә. Шулай итеп, үҙ хоҡуҡтарыңды яҡларға һәм ер бәхәстәрен мөмкин тиклем кәметергә була, сөнки аныҡ ҡына сиктәрҙең булмауы күршеләр араһындағы низағтарға сәбәп булып тора;

● участка менән төрлө операциялар һәм алыш-биреш эштәре башҡарырға мөмкин. Мәсәлән, уны һатыуы еңелерәк буласаҡ;

● мөмкин булған хаталарҙы, шул иҫәптән файҙаланылған майҙан тураһындағы мәғлүмәттәрҙе төҙәтергә ярҙам итәсәк. Участкаың майҙаны тураһындағы хата мәғлүмәттәр уның кадастр хаҡын дөрөҫ билдәләмәүгә һәм, һөҙөмтә буларaҡ, ер һалымы күләмен дөрөҫ билдәләмәүгә сәбәпсе булыуы ихтимал;

● милекселәргә ер участкаһын бүлеү мөмкинлегә буласаҡ, сөнки был ғәмәл билдәләнгән сик булғанда ғына мөмкин.

**Берҙәм дәүләт күсемһеҙ милек реестрына ер участкаһының сиктәре инғәнме-юҡмы икәнлеген нисек белергә?**

Кәрәкле мәғлүмәт Берҙәм дәүләт күсемһеҙ милек реестрынан алынған төп характеристикалар һәм күсемһеҙ милек объектына теркәлгән хоҡуҡтар тураһындағы белешмәлә урын алған. Әгәр реестрҙа кәрәкле мәғлүмәт булмаһа, яҙмала ошондай билдә буласаҡ: "Ер участкаһы сиктәре ер ҡануниәте талаптарына ярашлы билдәләнмәгән".

**Белешмәне нисек алырға?**

Быны "Росреестр" сайтындағы һәм Дәүләт хеҙмәттәре порталындағы электрон сервистар ярҙамында эшләргә мөмкин. Шулай уҡ "Асыҡ кадастр картаһы" сервисы менән файҙаланырға була. Унда тәғәйен объектты адрес буйынса табыу еңелерәк. Әгәр объекттың тасуирламаһында "Сиктәр координатаһы юҡ" тигән билдә торһа йәки майҙан иғлан рәүешендә күрһәтелһә, тимәк, участка сиктәре билдәләнмәгән.

**Участкаңың сиктәрен нисек асыҡларға?**

Был эш менән кадастр инженерҙары шөғөлләнә. Тап улар бөтә кәрәкле үлсәүҙәр һәм иҫәп-хисаптарҙы алып бара. Билдәле кадастр инженеры тураһындағы мәғлүмәтте "Росреестр" сайтында "Кадастр инженерҙарының дәүләт реестры" бүлегендә ҡарарға мөмкин.

**Эш нисек ойошторола?**

Кадастр инженеры урынға барып кәрәкле үлсәүҙәр үткәрә. Әгәр ҡойма бар икән, үлсәү ҡоймалар буйынса уҙғарыла. Әгәр ҡойма булмаһа, алдан участка мөйөштәрен ҡаҙыҡ менән билдәләү яҡшыраҡ. Киләһе этап - үлсәү һөҙөмтәләре менән танышыу. Артабан - сиктәш участкаларҙың хужалары менән сиктәрҙе килешеү эше. Башҡарылған эштәр һөҙөмтәһендә кадастр инженеры ыҙан планын әҙерләй.

Межалау буйынса кадастр эшенең ыңғай яҡтары күп, бер генә кире яғы бар - ул ваҡытлыса һәм финанс сығымдар. Хеҙмәт түләүле, 10-14 эш көнөндә башҡарыла.

лә, ҡыҙыбыҙ Иҫәнғолда, улар ғаиләләре менән ярҙам итә. Йәй баҡсаға ғына йәбешеп ятмайбыҙ, сәйәхәт итергә яратабыҙ, был йәһәттән балалар беҙгә матур өлгө. Беҙҙе лә ҡалдырмай йөрөтәләр.

Мин яратып eләк үҫтерәм. Ремонтант eләктәр үҫә миндә, исемдәрен дә онотҡанмын. Береһе ғәҙәти баҡса eләге, икенсеһе баҡсала үҫә торған ҡайын eләге, русса "земляника садовая" тип йөрөтөлә. Уныһы әле лә сәскә атып ултыра, ейәнем яңы ғына 4 литрҙай йыйып алды. Eләкте умарталыҡта ла үҫтерәм. Август тыуып, 15-тәре етһә, йыйып алынған һуған, һарымһаҡ урынына eләктең йәш үҫентеләрен күсереп ултырта башлайым. Eләк бит ул йәйелеп үҫергә ярата, шуларҙың яҡшыларын ҡырҡмай ҡалдырам да, 20 см аралыҡ ҡалдырып, яңы түтәлгә ултыртып сығам. Ошо үҫентеләр яҙын яҡшы уңыш бирә. 2-3 йылдан уны ҡаҙып ташлайым, ҡарт eләктән файҙа юҡ. Ошо рәүешле яйлап-яйлап яңырта барырға кәрәк. Май айында ла күсереп ултыртам, улары инде көҙгә уңыш бирә башлай. Eләктәрем майҙа шау сәскәлә була, 1 июнгә инде тәүге eләктәр бешә. Һуңғы арала Ейәнсурала ямғырҙар яуҙы, "садовая земляника" тигәне һыуға туйынып, ныҡ матурайып китте, әле лә уңышы менән ҡыуандыра.

**➔ Ремонтант eләкте йылына бер тапҡыр уңыш бирә торған баҡса eләге янында үҫтерергә ярамай, тиҙәр, был дөрөҫмө?**

- Минең ундай сорты ла бар. Уныһы бигерәк тәмле шул, бер eләк менән дә алыштырып булмай. Ысынлап та, уларҙы ҡатнаштырып, бер-береһенә яҡын сәсергә ярамай. Ремонтант eләк яйлап шул бер тапҡыр уңыш биреүгә күсә, сорттың үҙенсәлеге боҙола.

Һәр хәлдә, ниндәй генә сорт булмаһын, eләккә ныҡ иғтибар кәрәк. Төп шарт - ҡуйыртмау, мыйыҡтарын ҡырҡып тороу. Мин йәлләмәйем, 10 көн һайын тигәндәй ҡарап, күсереп ултыртҡандайҙарын ҡалдырып, ҡалғанын ҡырҡып ташлап торам. Тотош келәм булып китһә, eләге булмай. Ваҡытында күп кенә итеп һыуын да һипһәң, уңыш яҡшы була. Ошо ваҡытта eләк ашап ултырыу күңелле лә инде. Көҙгә ваҡлана инде, шулай ҙа магазиндан алынған eләк түгел, үҙендеке. Эше күп, әммә һөҙөмтәһе лә яҡшы. Ҡайнатма ла яһамайым, туңдырмайым да. Шул килеш ашайҙар ейәнейәнсәрҙәр, витамин туплап ҡалһындар ҡышҡа тейем. Үҙҙәре лә ярҙамлаша, йыйырға яраталар. Әле ейәнем артып ҡалғанын йыйып, һатырға ла өйрәнде.

Ҡышҡылыҡҡа eләк ҡыуаҡтарын япмайым, яҙын инде ҡарап, таҙартаһың. Насарыраҡ япраҡтарын да мөмкин тиклем алам. Бер ниндәй ҙә ашлама ла ҡулланмайбыҙ, араһына көл генә һалам. Көл килешә былай, беҙҙә тупраҡ әсерәк. Бәлки, башҡа төбәктәрҙә йәшәүселәр өсөн был кәңәш килешмәҫ тә, шуға ла тәүҙә тупраҡтың торошон асыҡларға кәрәктер.

**➔ Һеҙ һарымһаҡты ҡышҡылыҡҡа сәсеп ҡалдырам, тигәйнегеҙ. Был йәшелсәне орлоҡтан да үҫтерәһегеҙ икән?**

- Һарымһаҡтың башы орлоҡҡа китә бит инде, шуларҙың эре генә бер нисәһен өҙөп ташламай, ҡалдырам. Ҡойолоп төшмәһен тип ҡарап тороп, йыйып алам, киптерәм. Шул орлоҡтар сөгөлдөр орлоғо тиклем генә була. Берәмләп түтәлгә төртөп сығам. Быны ямғырҙар башланмаҫ борон, октябрҙә эшләргә кәрәк. Йылына ҡарап, һауа торошона ҡарап, үҙегеҙ самалайһығыҙ. Иртә сәсһәң, шытып сыға ла, һыуыҡҡа, сирҙәргә бирешә. Ултыртҡас, һыу ҡоймайым, өҫтөнә ҡул менән баҫҡылап, һуҡҡылап ҡуям. Шуны икенсе йыл августа ҡаҙып алаһың. Тағы ла сәсһәң, өсөнсө йылына ғәҙәти, бүлкәтле һарымһаҡ була. Әсәйемдәр ҙә элек, орлоҡҡа ҡалдырам, тип әйтә торғайнылар. Көҙөн өс төрлө һарымһаҡ сәсәм йыл һайын: орлоҡтан, бер йыл ҡышлағандарын һәм беҙ өйрәнгәнсә, бүлкәттәрҙән. Өҫтөнә ағас онтағы һибәбеҙ. Яҙын иң тәүҙә һарымһаҡтар ерҙе төртөп килеп сыға.

Һуғанды ла орлоҡтан сәсәм, "ҡара һуған" тип йөрөтәм уны. Ғөмүмән, һуғанды иртә сәсергә ярамай, ул орлоҡ ебәрә башлай. Орлоҡҡа китһә, уңыш насарая. Ә бына ошо орлоҡтарын өҙмәй ҡалдырып, киптереп, тупраҡҡа ҡом ҡатыштырып сәсһәң, һыу һипһәң, ашарға яраҡлы ҙур ғына һуғанбаштар алырға ла була. Мин уның тәмен яратам. Йәшел һуғаны ла тәмле. Яңы йылға тиклем ошо һуғанды тотонам. Шулай уҡ "Семейка" һуған үҫтерәм. Төбөндә бер генә түгел, бер нисә һуған була, шуға ла "ғаилә" тип атала. Уны бер сәсһәң, киләһе йылына тағы ултыртҡы килә, нисектер күңелле итеп, күмәкләшеп, бер-береһенә йәбешеп үҫәләр. Һаҡлар өсөн дә әллә нимәләр ҡыландырмайым, пластик йәшниктәргә һалам да, газ яға торған бүлмәлә һаҡлайым.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Үҙ ҡулдарың менән үҫтергәнде тыныс күңел менән ашайһың" - Ләлә апайҙың был һүҙҙәрендә хаҡлыҡ бар. Баҙарҙа бары ла бар ҙа, тик ул йәшелсә-емеште нисек үҫтергәндәр икәне барыбер билдәһеҙ. Шуға ла үҙегеҙ өсөн генә булһа ла баҡса үҫтерегеҙ һәм тәжрибәгеҙ менән мотлаҡ уртаҡлашығыҙ. Хәбәрҙәр көтәбеҙ һеҙҙән.**

**Ләйсән НАФИҠОВА әңгәмәләште.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ҺОРАҒЫҘ - АЛЫРҺЫҒЫҘ

## Аңдың икенсе торошо: үҫешкән интуиция

Әгәр һеҙ уңышлы булырға теләһәгеҙ һәм уңышлы кешеләрҙең тәү сиратта үҙҙәренең инстинктына буйһоноуын беләһегеҙ икән, һеҙгә лә иң элек уларҙы үҫтереү менән шөғөлләнергә кәрәк.

Был проблема мәғариф системаһының нескә урыны булып тора. Мәктәптәрҙең күпселеге рациональ фекер йөрөтөү һәм интеллектты үҫтереүгә иғтибар йүнәлтә, шуға күрә иң уңышлы кешеләр араһында мәктәп аттестаты алып сығыусылар бик аҙ. Марк Твен бер ваҡыт: "Мәктәптәге дәрестәрҙең минең белем алыуыма ҡамасаулауына бер ваҡытта ла юл ҡуйманым", - тип белдерә.

Әгәр берәй саҡ мәктәптәр балаларҙа интуиция, инстинкт һәм ижади һәләттәрҙе үҫтереүгә иғтибар йүнәлтеп, табелдәр, баһалар һәм бер-берең менән ярышыуҙан баш тартырға уйлаһа, мин ҡабаттан уҡырға барыр инем! Әммә әлегә мәктәп минең һәм балаларым өсөн өҫтөнлөклө булып тормай.

## "Ижади ҡарашы булмаған өсөн" эштән бушатылған

Уолт Диснейҙың журналист булыуы һеҙгә мәғлүмме? Һуңынан ғына ул кинола карьера яһап, бик күп онотолмаҫ образдар тыуҙыра һәм донъя балаларына Диснейлендты бүләк итә. Ә уны етәксеһе хыялы юҡлыҡҡа бәйле эштән ебәрә. Әгәр Уолт Диснейҙың хыялы булмаған икән, уның етәксеһенең хыялы ниндәй кимәлдә булды икән? Дисней үҙенең хыялына ихтыяр биреп, аҡса тураһында уйлауҙан туҡтағас, шаҡ ҡатырғыс хәлдәр башлана. Был йәһәттән ул: "Әгәр мин банкирҙарҙы тыңлаһам, бер нәмәлә лә уңышҡа өлгәшә алмаҫ инем", - ти.

## Аңдың өсөнсө торошо: дүрт йәшлек бала самимилығы

Әгәр һеҙҙән, кем күңелле һәм бер ғәмһеҙ йәшәй, тип һораһам, балалар, тип яуап бирерһегеҙ. Бигерәк тә бәләкәй балалар.

Ҡулына бала алған кеше белә: уларҙан шундай аңлатып булмаҫлыҡ ҡыуаныс ипкене бәрелә. Уларҙан беҙгә шик-шөбһәләрҙән, хәүефтән, стресс һәм ғәйеп тойғоһонан азат бер ҡатлылыҡ күсә. Уларҙың үткәне булмағас, иҫтәлектәр һағышландырмай, улар бары тик бөгөнгө менән йәшәй.

Әгәр мөғжизәле тормошҡа өлгәшкегеҙ килһә, кирегә ҡайтығыҙ һәм үҙегеҙҙе дүрт йәшлек сағығыҙҙағы аң кимәле үҫеше торошонда эҙләп табығыҙ. Бер ҡатлылығығыҙҙы, тормошҡа ҡыуаныуығыҙҙы йәнләндерегеҙ һәм күршеләр, кешеләр нимә уйлар, тип, һис хафаланмағыҙ.

Ғайса бәйғәмбәр: "Балаларҙы ебәрегеҙ һәм миңә килеүҙәренә ҡаршы булмағыҙ, сөнки улар - Күк Кәнсәһе", - тип юҡҡа әйтмәгән. Шуға иғтибар итһәгеҙ, ул буласаҡ тимәй, әлеге ваҡытта барлыҡты белдерә. Күк Кәнсәһе тап бына ошонда, ерҙә ул. Әммә уға инеү өсөн һеҙ балаларға оҡшарға, йәғни балалар кеүек уйларға тейешһегеҙ. Аҡсаһын иртәгәгә тип һаҡлаған йәиһә пенсия фондына, инвестиция иҫәбенә һалып ҡуйған дүрт йәшлек баланы беләһегеҙме? Йәиһә бәләкәй ҡыҙығыҙ берәй тапҡыр: "Атай, миңә шул тиклем ҡыйын. Мин кисә ашханала һөт түктем һәм шуға үҙемде ғәйепле тоям. Моғайын, мин бығаса булған кеүек шат була алмам. Миңә психотерапевҡа мөрәжәғәт итергә кәрәктер", - тип әйткәне бармы? Йәиһә кескәй улығыҙ электрон органайзер тултырып, бер көндә эшләнәсәк эштәренең исемлеген ҡараймы?

Шикләнәм. Балаларҙың тормошо әлеге ваҡытта үҙ ағышы менән китеп бара. Улар өсөн аҡыллы ололар баштарына көсләп һеңдергәнгә тиклем ахмаҡ концепциялар бер ниндәй әһәмиәткә эйә түгел. Ә беҙ быны нисек тормошҡа ашырабыҙ? Ябай ғына:

- Бар, йоҡла, иртәгә мәктәпкә барырға.
- Йоҡлағым килмәй.
- Барыбер, марш урыныңа.
- Ни өсөн?
- Сөнки һинең өсөн шулай яҡшыраҡ.

Беҙ уларҙы үҙ йәшенә ҡарата оҙағыраҡ йоҡларға өйрәтәбеҙ. Уларға 30, 40, 50 йәш булғас, йоҡо өсөн ваҡыт әҙерәк ҡаласаҡ һәм был шулай булырға тейеш тә. Үҙенең организмын түгел, ә һеҙҙең бойороҡто үтәргә мәжбүр булған бала нимә уйлай? Ысынбарлыҡта йәшәү урынына ул уйлап сығарылған ҡағиҙәләр донъяһында йәшәй башлай. Иртәнге ваҡытын ул үткәндәргә үкенеү һәм киләсәкте планлаштырыуға сарыф итә башлаясаҡ. Ул "кисә" һәм "иртәгә" тигән төшөнсәләр менән таныша.

Шуға ҡарамаҫтан, балалар туралығын һаҡлап ҡала. Мәҫәлән, күптән түгел минең бәләкәй ҡыҙым: "Атай, барыһына ҡарағанда нығыраҡ әсәй арыған, ә ни өсөн ул түгел, мин йоҡларға тейеш?" - тип һораны. Эээ... бары тик шулай кәрәк...

**Пьер МОРАСИ.**

*АҢЛАТАБЫҘ...*

# СОЦИАЛЬ КОНТРАКТ НИМӘ УЛ?



**Әгәр ғаиләнең килеме йәшәү минимумынан түбән булһа, уны социаль яҡлау органдары һәм социаль контракт ярҙамында арттырырға мөмкин.**

Социаль контракт - ул дәүләт һәм ғаилә йәки дәүләт һәм граждан араһындағы килешеү. Уның сиктәрендә социаль яҡлау органдары социаль ярҙам күрһәтәсәк. Шул уҡ ваҡытта икенсе яҡ ғаиләнең йәшәү кимәлен күтәреү өсөн билдәле бер эштәрҙе үтәү бурысын үҙ өҫтөнә ала.

Социаль контракт 6-12 айға төҙөлә һәм түләүҙәрҙе йә бушлай хеҙмәттәрҙе күҙ уңында тота. Ниндәй дәүләт ярҙамы тәғәйенләнәсәге һәр осраҡта шәхсән әҙерләнгән адаптация программаһына бәйле. Мәҫәлән, һеҙ тормош иптәшегеҙ менән ике бала тәрбиәләйһегеҙ. Һуңғы өс айҙа ғаиләнең дөйөм килеме 110 мең һум тәшкил иткән.

- Ғаиләнең аҙ тәьмин ителгәндәр категорияһына инеү-инмәүен билдәләү өсөн йәшәү минимумын иҫәпләйҙәр: (13 789 һум x 2 + 12 271 һум x 2) / 4 кеше. = айына 13 030 һум. Әйткәндәй, балалар өсөн йәшәү минимумы эшкә һәләтле халыҡтыҡынан айырыла.
- Ғаиләләге бер кешегә йән башына уртаса килем түбәндәгесә иҫәпләнә: 110 мең һум / 3 ай / 4 кеше = 9 166 һум.
- Һуңынан ғаилә өсөн билдәләнгән йәшәү минимумын (13 030 һум) уның йән башына уртаса килеме (9 166 һум) менән сағыштыралар. Ғаиләнең йән башына уртаса килеме йәшәү минимумы дәүмәленән артмауын иҫәпкә алып, ғаилә аҙ тәьмин ителгәндәр категорияһына индерелә. Тимәк, ярҙам һорап мөрәжәғәт итергә мөмкин.

**Аҡса нимә өсөн бирелә?**

- Үҙеңдең эшеңде асыуға - 350 мең һумға тиклем;
- шәхси ярҙамсы хужалыҡты үҫтереүгә - 200 мең һумға тиклем;
- ауыр тормош хәлен яйға һалыуға - ай һайын 13 789 һум (максималь түләүҙәр ваҡыты - 6 ай);
- эш табыуға - контракт төҙөгән осраҡта 13 789 һум, артабан эшкә урынлашҡас - шундай уҡ күләмдә тағы 3 түләү.

Бынан тыш, социаль контракт сиктәрендә ҡайтанан уҡыуға 30 мең һумға тиклем аҡса алырға мөмкин.

Социаль ярҙам шарттары һәм уны тәғәйенләү тәртибе тураһындағы мәғлүмәт БР Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығының һәм Республика халыҡҡа социаль ярҙам үҙәгенең рәсми сайттарында бирелгән. Шулай уҡ программала ҡатнашыу шарттары буйынса аңлатмаларҙы йәшәгән урын буйынса Республика халыҡҡа социаль ярҙам күрһәтеү үҙәге филиалдарында, мәшғүллек үҙәктәрендә , "Ғаилә" үҙәктәрендә, шулай уҡ Күп функциялы үҙәктә алырға мөмкин.



## 11 СЕНТЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.45 "Жить здорово!" [16+]
10.35, 11.20, 0.15, 1.00, 1.40, 2.20, 3.05, 3.40, 4.15 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
12.50, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
17.15 Премьера. "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Угрюм-река". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Наши. [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Спасская. Новые серии". [16+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05 Т/с "Тайны следствия-3". [12+]
3.45 Т/с "Семейный детектив". [12+]
4.34 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**10.00 "Байыҡ-2023". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**11.00, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**11.45, 14.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Спортивная история. [12+]**
**12.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**12.45, 4.15 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 14.30, 17.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.45, 0.00 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 "Этно-краса". [12+]**
**15.30 Преград. Net. [6+]**
**15.45 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**16.00 Д/ф "Сыны Отечества". [12+]**
**16.45 Пофутболим? [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**18.00 Вечерний телецентр.**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Металлург" (Магнитогорск). КХЛ.**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Д/ф "Азовсталь". Освобождение". [16+]**
**0.45 Новости (на баш. яз). [12+]**
**1.15 Спектакль "Последнее море Чингизхана". [12+]**
**3.00 История одного села. [12+]**
**3.15 Үткән ғүмер. [12+]**
**3.45 "Бай". [12+]**
**5.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**6.00 Следопыт. [12+]**

## 12 СЕНТЯБРЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.45 "Жить здорово!" [16+]
10.35, 11.20, 14.15, 19.00, 23.50 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 Премьера. "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Вечерние новости (с субтитрами).
20.15 Футбол. Сборная России - сборная Катара. Прямой эфир.
22.05 "Время".
22.50 Т/с "Угрюм-река". [16+]
0.45 Д/ф "Не люблю кино". К 90-летию Татьяны Дорониной. [12+]
1.40, 2.20, 3.05, 3.40, 4.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Наши. [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Спасская. Новые серии". [16+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05 Т/с "Тайны следствия-3". [12+]
3.45 Т/с "Семейный детектив". [12+]
4.34 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**10.00 "Ете егет". [12+]**
**10.45, 23.45 "Ҡурай даны". [12+]**
**11.00 Автограф. [12+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 21.30, 22.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 18.15, 19.30, 20.15 Интервью. [12+]**
**12.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**12.45 Счастливый час.**
**13.30, 14.30, 18.30 Новости (на баш. яз).**
**13.45 Бәхетнамә.**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Детей много не бывает. [6+]**
**15.45 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**16.00 Д/ф "Жизнь после смерти". [12+]**
**16.45 Криминальный спектр. [16+]**
**17.00, 6.00 "Дорога к храму". [6+]**
**17.30 Д/ф "Спецпоселения. Затерянные в лесах". [12+]**
**19.00 "Елкән". [6+]**
**19.45 Полезные новости. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 Вечерний телецентр.**
**22.00, 3.45 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Башкирские каникулы. [12+]**
**0.00 Бәхетнамә. [12+]**
**0.45 Новости (на баш. яз). [12+]**
**1.15 Спектакль "Любовь на троих". [12+]**
**3.15 Тормош. [12+]**
**4.15 Счастливый час. [12+]**
**5.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 13 СЕНТЯБРЯ СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.45 "Жить здорово!" [16+]
10.35, 11.20, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 Премьера. "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Угрюм-река". [16+]
0.15, 1.00, 1.40, 2.20, 3.05, 3.40, 4.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Наши. [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Спасская. Новые серии". [16+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05 Т/с "Тайны следствия-3". [12+]
3.45 Т/с "Семейный детектив". [12+]
4.34 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Әлләсе... [6+]**
**10.45, 23.45 "Ҡурай даны". [12+]**
**11.00 "Дорога к храму". [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 19.30, 20.15 Интервью. [12+]**
**12.00 Дознание. [16+]**
**12.15 Пофутболим? [12+]**
**12.30 Новости спорта (на рус. яз).**
**12.45 Счастливый час.**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.45 Бәхетнамә.**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 "КультУра". [6+]**
**15.45 МузКәрәҙ. [6+]**
**16.00, 6.00 Тайм-аут. [12+]**
**16.45, 3.30 История одного села. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30 "Башҡорт аты-2023". [12+]**
**19.00 Тормош. [12+]**
**19.45 Полезные новости. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 Вечерний телецентр.**
**22.00, 3.45 Историческая среда. [12+]**
**23.00, 3.00 Автограф. [12+]**
**0.00 Бәхетнамә. [12+]**
**0.45 Новости (на баш. яз). [12+]**
**1.15 Спектакль "Наследство". [12+]**
**4.15 Счастливый час. [12+]**
**5.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 14 СЕНТЯБРЯ ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.45 "Жить здорово!" [16+]
10.35, 11.20, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 Премьера. "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Угрюм-река". [16+]
0.15, 1.00, 1.40, 2.20, 3.05, 3.40, 4.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Наши. [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Спасская. Новые серии". [16+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05 Т/с "Тайны следствия-3". [12+]
3.45 Т/с "Семейный детектив". [12+]
4.34 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Башкирские каникулы. [12+]**
**10.30 Тормош. [12+]**
**11.00 "Атайсал. Знай наших!" [6+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Историческая среда. [12+]**
**12.45 Счастливый час.**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.45 Бәхетнамә.**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 "Сулпылар". [6+]**
**15.45 "Городок АЮЯ". [6+]**
**16.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**16.45 Криминальный спектр. [16+]**
**17.00 "Башҡорт аты". [12+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Ак Барс" (Казань). КХЛ.**
**22.00, 3.45 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Бәхетнамә. [12+]**
**0.45 Новости (на баш. яз). [12+]**
**1.15 Спектакль "Одолжи мне жеребца". [12+]**
**3.15 Д/ф "Сыны Отечества". [12+]**
**4.15 Счастливый час. [12+]**
**5.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**6.00 "Это моя профессия". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 15 СЕНТЯБРЯ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 16.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.45 "Жить здорово!" [16+]
10.35, 11.20, 14.15, 17.10 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
15.10 Премьера. "Давай поженимся!" [16+]
16.15 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости.
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Премьера. "Голос. Уже не дети". [12+]
23.45 Д/ф Премьера. "Счастье - такая трудная штука". К 100-летию Михаила Танича. [12+]
0.50, 1.30, 2.10, 2.50, 3.25, 4.00, 4.40, 5.15 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.15 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
16.30 Прямой эфир. [16+]
21.30 Ну-ка, все вместе! [12+]
0.15 Истории Большой Страны. [12+]
1.15 Х/ф "Бабье лето". [16+]
4.33 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 18.00 "Йома". [6+]**
**10.30, 3.15 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]**
**11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45 Интервью. [12+]**
**12.00 История одного села. [12+]**
**12.15 Специальный репортаж. [12+]**
**12.45 Автограф. [12+]**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.45 Үткән ғүмер. [12+]**
**14.15 "Ҡурай даны". [12+]**
**15.00 "Гора новостей". [6+]**
**15.15 Лит-ра. [6+]**
**15.45 "Этно-краса". [12+]**
**16.00 "Аль-Фатиха". [6+]**
**16.45 Патриот РФ. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30 "Башҡорт аты". [12+]**
**19.00 "Честно говоря". [12+]**
**19.45 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.00 Х/ф "Дневник поэта". [12+]**
**22.00, 6.00 Спортивная история. [12+]**
**23.00 Д/ф "Монолог". [12+]**
**23.45 Д/ф "Путешествие в жизнь".[12+]**
**0.45 Новости (на баш. яз). [12+]**
**1.15 Спектакль "Бэндэбикэ и Ерэнсэ Сэсэн". [12+]**
**3.45 Историческая среда. [12+]**
**4.15 Д/ф "Монолог. Булат Юсупов".**
**5.00 Тормош. [12+]**
**5.30 "Бай". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 16 СЕНТЯБРЯ СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Премьера. "Поехали!" [12+]
11.05 Премьера. "ПроУют". [0+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Д/ф "Счастье - такая трудная штука". К 100-летию Михаила Танича. [12+]
13.20 Д/ф "Мороз и солнце". [12+]
14.05 Х/ф "Осенний марафон". [12+]
15.50, 16.25, 2.55, 3.30, 4.05, 4.40, 5.15 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
17.00 Д/ф "Ванга. Пророчества". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 "Сегодня вечером". [16+]
19.55 Премьера. "Кто хочет стать миллионером?" [12+]
21.00 "Время".
21.35 "Клуб Веселых и Находчивых". Встреча выпускников-2023. [16+]
23.50 "Горячий лед". Фигурное катание. Открытие сезона. Короткая программа. Камила Валиева, Елизавета Туктамышева, Софья Акатьева. [0+]
0.50 Х/ф "Эйфель". История создания символа Парижа. [16+]

### РОССИЯ 1
5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.50 В кругу друзей.
12.55 Доктор Мясников. [12+]
14.50 Юморина. [16+]
17.50 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "Превратности любви". [16+]
0.40 Х/ф "Долги совести". [12+]
4.05 Х/ф "Любовь на четырех колесах". [12+]
5.51 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30, 18.30 Новости (на баш. яз).**
**7.45 "Ете егет". [12+]**
**8.30 Башкирские каникулы. [12+]**
**9.15 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**9.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**10.00 Елкән. [6+]**
**10.30 Лит-ра. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 "Папа может все!" [6+]**
**11.30 МузКәрәҙ. [6+]**
**12.00 "Родина в сердце". Гульфия Юнусова". [12+]**
**12.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**13.00 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.00, 2.30 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Спектакль "Девушка с монистами". [12+]**
**19.00 Д/ф "Саптар". [12+]**
**19.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 "Байыҡ-2023". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**22.00, 3.45 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.30 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2023". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**0.00 Спектакль "Индийская насмешница". [12+]**
**1.45 Новости недели (на баш. яз). [12+]**
**3.30 История одного села. [12+]**
**4.15 Әлләсе... [6+]**
**4.45 "Млечный путь". [12+]**
**6.00 Мистический Башкортостан. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 17 СЕНТЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
6.00, 10.00 Новости.
6.10, 16.35, 2.20, 3.00, 3.40, 4.15 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
6.55 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.40 "Часовой". [12+]
8.10 "Здоровье". [16+]
9.20 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
9.40 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 "Жизнь других". [12+]
11.05 Премьера. "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Видели видео?" [0+]
14.00 Х/ф "Розыгрыш". Ко дню рождения Владимира Меньшова. [12+]
15.45 Д/ф "Владимир Меньшов. "Кто сказал: "У меня нет недостатков"?"[12+]
17.10 "Горячий лед". Фигурное катание. Открытие сезона. Короткая программа. Камила Валиева, Елизавета Туктамышева, Софья Акатьева. [0+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 "Три аккорда". [16+]
21.00 "Время".
22.35 Х/ф Премьера. "Доктор". [16+]
1.00 "Горячий лед". Фигурное катание. Открытие сезона. Произвольная программа. Камила Валиева, Елизавета Туктамышева, Софья Акатьева. [0+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
6.10, 2.25 Х/ф "Блюз для сентября". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00 Вести.
11.50 Большие перемены. [6+]
12.55 Х/ф "ЗАГС". [12+]
17.50 Песни от всей души. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.30 Д/ф "Что пошло не так? К 50-летию переворотов в Чили, Аргентине, Уругвае". [18+]
4.02 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз).**
**7.45 "Йома". [6+]**
**8.15 Тормош. [12+]**
**8.45 "Ҡурай даны". [12+]**
**9.00 "Бай". [12+]**
**9.30 Новости (на рус. яз).**
**10.00 "Книга сказок". [6+]**
**10.15 "Городок АЮЯ". [6+]**
**10.30 Сулпылар. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 "Атайсал. Знай наших!" [6+]**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз).[12+]**
**13.15 "Алтын тирмә". [6+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**15.00 "Дорога к храму". [6+]**
**15.30 Неизвестный Башкортостан.[12+]**
**15.45, 4.30 Историческая среда. [12+]**
**16.15, 2.00 "Честно говоря". [12+]**
**17.00 Д/ф "Один из тринадцати". [12+]**
**17.30 Х/ф "Визит". [12+]**
**18.15 Д/ф "Монолог. Булат Юсупов". [12+]**
**19.00 История одного села. [12+]**
**19.15 Әлләсе... [6+]**
**20.00 Патриот РФ. [12+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 Атлас Баженова: Башкортостан.**
**21.00, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**21.15 Дознание. [16+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз.).**
**22.15, 4.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 Х/ф "Всадник на золотом коне". [12+]**
**0.00 Спектакль "Касатка". [12+]**
**2.45 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**3.15 Башкирские каникулы. [12+]**

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1445 һижри йыл.*

| Сентябрь (Сәфәр - Рабиғел әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 11 (26) дүшәмбе | 5:12 | 6:42 | 13:30 | 17:13 | 19:42 | 21:12 |
| 12 (27) шишәмбе | 5:13 | 6:43 | 13:30 | 17:10 | 19:39 | 21:09 |
| 13 (28) шаршамбы | 5:15 | 6:45 | 13:30 | 17:08 | 19:37 | 21:07 |
| 14 (29) кесе йома | 5:17 | 6:47 | 13:30 | 17:06 | 19:34 | 21:04 |
| 15 (30) йома | 5:19 | 6:49 | 13:30 | 17:04 | 19:32 | 21:02 |
| 16 (1) шәмбе | 5:21 | 6:51 | 13:30 | 17:02 | 19:29 | 20:59 |
| 17 (2) йәкшәмбе | 5:23 | 6:53 | 13:30 | 17:00 | 19:26 | 20:56 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

✓ *Мәхрүм булғандар үсләшмәһен, нәфрәтләнгәндәр яратырға өйрәнһен, ҡыуылыусылар түҙһен, әрләнгәндәр өндәшмәһен - шулай итеп гонаһты үлтерһен. (Владимир Мономах).*



*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# СЕНТЯБРЬ ЮБИЛЯРҘАРЫ

Көҙҙөң беренсе айы - сентябрь бик күп иҫтәлекле көндәргә бай. Был айҙа башҡорт далаларында шифалы ҡымыҙ менән дауаланырға ятҡан һәм ата-бабаларыбыҙ менән аралашыуҙан күңел тыныслығы тапҡан бөйөк рус яҙыусыһы Лев Толстой, тыуған яҡты өйрәнеүсе, Өфө губерна статистика комитеты китапханасыһы һәм "Башҡорт Салауат Юлаев, Пугачев бригадиры, йырсы һәм импровизатор" хеҙмәте авторы Руф Игнатьев, профессиональ балет сәнғәтенә һәм башҡорт халыҡ хореографияһына нигеҙ һалыусы Хашим Мостаев, атаҡлы ҡурайсы Ишмулла Дилмөхәмәтов, журналист, яҙыусы, әҙәби тәнҡитсе Имай Насыри, билдәле кинорежиссер Булат Йосопов, физика-математика фәндәре докторы, профессор Мөхәмәт Харрасов, М. Ғафури исемендәге БАДТ артистары Илдар Ғүмәров һәм Ирек Булатов кеүек талант эйәләре донъяға килгән.

Әйткәндәй, сентябрь айында Ҡыҙ йондоҙлоғо аҫтында тыуғандар (22 август - 22 сентябрь) ғәҙеллек һәм сафлыҡты кәүҙәләндерә, һәр нәмәлә камиллыҡҡа ынтылалар, тәрән аҡылға эйә булыуҙан тыш, эшсән һәм түҙемлеләр, тип иҫәпләнә. Улар эше менән йәмғиәткә файҙа килтереүен белгән осраҡта ғына тормоштарынан йәм таба. Барыһын да алдан уйлап, планлаштырып башҡара, үтә яуаплылар. Ҡыҙ йондоҙлоғонда тыуғандар хыянатҡа һәләтһеҙ, эргә-тирәләгеләрҙең барыһы менән дә асыҡ һәм ғәҙел мөнәсәбәт ҡоралар, алдашмайҙар. Сөнки тыумыштан һалынған әхлаҡи сифаттары быға юл ҡуймай. Ә был йондоҙлоҡ кешеләренә тап килгән төҫтәр һары, һоро, йәшел булһа, уларҙы һаҡлар таштарҙан тау гәлсәре, аҡыҡ, нефрит, гранат, малахит, ынйы, йәшмә һ.б. айырып әйтәләр. Шулай, беҙҙең халыҡ йондоҙлоҡтарға бик ышанып бармаһа ла, был төрлө халыҡтарҙың быуаттар дауамында күҙәтә килеп формалашҡан фараздарына бәйле күренеш булғас, хаҡлыҡ барҙыр.




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**34-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Лапти. Морщуни. Гәзит. Урама. Аулаҡ. Лауреат. Постоли. Аҡбур. Сабата. Трико. Кут. Бабич. Ра. Итек. Йыһат. Елкән. Үлем. Әй. Үксә. Артек. Деканат. Луганск.

**Вертикаль буйынса:** Пайтәхет. Уссурийск. Опто. Инә. Моэм. Йындал. Алиса. Лар. Күк. Каҫата. Зороастр. Үс. Ләм. Идиот. Төк. Ата. Быйма. Ҡата. Ут. Ҡар. Читек.

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*

### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**14 сентябрь "Оҫҡон осто, янғын сыҡты"** (А. Ишбулдина). 12.00 6+

**15 сентябрь "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама. 16+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**13 сентябрь "Айболит и Бармалей"** (К. Чуковский), мюзикл. 11.00 0+

**"Диңгеҙ ярын иңләй ала эт"** (С. Айытматов), хикмәт. 12+

**15 сентябрь "Килә яуа, килә яуа"** (З. Хәким), комедия. 16+

**16 сентябрь "Силсәүит, Алдар һәм Адвокат"** (М. Кәрим), драма. 18.00 12+

**17 сентябрь "Арба"** (Тансулпан, Зәһрә Бураҡаевалар), әкиәт. 11.00 6+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

*Башҡорт опера һәм балет театрынын Бәләкәй сәхнәһендә:*

**16 сентябрь "Гадкий утенок"** (Г.-Х. Андерсен). 12.00, 14.00 0+

**17 сентябрь "Муха-цокотуха"** (И. Романов). 12.00, 14.00 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**12 сентябрь "Камерный музыка концерты".** 6+

### А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**"Һинән - фатир, минән - ир"** (Н. Ғәйетбай), комедия-гротеск менән Хәйбулла районы буйлап гастролдәрҙә:

**11 сентябрь** - Быҙаулыҡ, **12 сентябрь** - Бүребай, **13 сентябрь** - Татырүҙәк, **15 сентябрь** - Маҡан;

**14 сентябрь** - Йылайыр районы Йылайыр ауылында.19.00 16+

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

## БАШҠОРТ ЭПОСЫ - БЕЙЕҮҘӘ



**3 сентябрҙә Новосибирскиҙағы Евразия концерт залында Фәйзи Ғәскәров исемендәге халыҡ дәүләт ансамбле "Урал һәм Шүлгән" спектаклен тәҡдим итте.**

Ул "Место притяжения - Сибирь" Бөтә Рәсәй традицион вокал-хореография һәм театр сәнғәте фестивале сиктәрендә үтә, тип хәбәр иттеләр "Башинформ"ға коллективтың матбуғат хеҙмәтенән. "Урал һәм Шүлгән" - рус телендәге хореографик спектакль. Уның нигеҙендә башҡорт халыҡ эпосы ята. Боронғо эпостың образдары яҡшылыҡ менән яуызлыҡ араһындағы көрәштә ҡатнаша. Күренеш геройҙары тылсымлы көскә эйә булған фантастик донъяла бара. Хореографик тамашала башҡорт халҡының мәҙәни оҫталығы, байлығы һәм күп төрлөлөгө яңғыҙ лирик, виртуоз һәм сағыу күмәк номерҙарҙа күрһәтеләсәк. Проект авторы һәм балетмейстеры - Йәмилә Бикбаева, режиссеры - Фирғәт Ғарипов. Спектакль өсөн музыканы Илшат Яхин һәм Вәсил Ғафаров яҙған.

✓ Мәүлетбай, ата-әсәһенең: "Ауылда ҡал, беҙгә терәк-таяныс булырһың", - тиеүенә ҡарамай, ямалған салбары менән Өфөгә юлланмаһа, Башҡортостан мәҙәниәте ниндәй моңло йырсыһын юғалтыр ине.



СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# ҠИТҒАЛАРҘЫ БЕРЛӘШТЕРЕР ЙЫРҘАР

**Һуңғы арала байрамдар, фестиваль-конкурстар күбәйеп киткән кеүек булһа ла, сәхнәлә барған хәл-ваҡиғаларҙың шаһиты булғандан һуң, бөгөн халыҡҡа тап ошондай тамаша кәрәклегенә инанаһың, етмәһә, һәр сараның үҙ ҡатнашыусыһы, үҙ талап-ҡиммәттәре бар. Ул сараларҙы күҙәтеү генә лә күңел офоҡтарыңды киңәйтеп, һүнеп барған хәтер ҡуҙҙарын баҙратып, йөрәккә ут тоҡандырып ебәрә. Залдан асылың уянып, бөтөнләй икенсе кеше булып сығаһың ҡай ваҡыт. Яңыраҡ ҡына Ишембай районында булған ике мәҙәни сара ошондай уйҙарға һалды.**



## Хәтер һәм Ҡәҙер кисәһе

Башҡортостандың халыҡ артисы Мәүлетбай Ғәйнетдиновтың тыуыуына 85 йыл тулыуға арналған "Һандуғас моңдары" башҡорт йырҙарын башҡарыусыларҙың Эткол ауылы Мәҙәниәт һарайында үткән асыҡ район конкурсы ысын мәғәнәһендә Хәтер һәм Ҡәҙер кисәһенә әйләнеүе менән әһәмиәтле булды. Сара халҡыбыҙҙың милли вокал сәнғәтенең үсешенә ҙур өлөш индергән данлыҡлы яҡташыбыҙҙың ҡәберенә зыярат ҡылыуҙан башланып китте. Ауылдаштары Мәүлетбай Сөләймән улын ҙур хөрмәт менән иҫкә алды.

Конкурстың үҙен Мәүлетбай ағайҙың йыры асты. Бәйге шарттарына ярашлы, һәр конкурсант Мәүлетбай Ғәйнетдинов репертуарынан бер йыр башҡарҙы, оло йәштәге йырсылар йырсы тураһында хәтирәләре менән дә бүлеште. Ваҡыты-ваҡыты менән Мәүлетбай Сөләймән улының туғандары түҙмәне, конкурсанттарҙы сәхнәгә ҡабат саҡырып сығарып, ағайҙары айырыуса яратып башҡарған "Һәләүегем", "Гармунсы", "Ҡурайсы егеткә", "Яратам мин һинең көләүеңде", "Һуңлап килдең", "Сибай", "Буранбай", "Соҡан батыр" кеүек йырҙарҙы тағы ла бер башҡарыуҙарын һоранылар. Йырсының ҡыҙы Гөлнара Хәмзина атаһы тураһында йылы тойғолары менән бүлеште: "Туғандарҙы әле һаман атайымдың моңо берләштерә", - тине ул.

Мәҙәниәт йортоноң һәүәҫкәр артистары сәхнәләштергән күренештән күҙҙәргә йәш эркелде: йырлай-йырлай Һәләүек буйында ауыл көтөүен көткән үҫмер Мәүлетбай, ата-әсәһенең: "Ауылда ҡал, беҙгә терәк-таяныс булырһың", - тиеүенә ҡарамай, ямалған салбары менән Өфөгә юлланмаһа, Һәләүек буйы ғына түгел, Башҡортостан мәҙәниәте ниндәй моңло йырсыһын юғалтыр ине.

Хәтирәләр менән бергә үрелеп барған бәйге бер тынала үтте лә китте. Жюри ағзалары конкурсанттарҙың әҙерлеген юғары баһаланы. "Мәүлетбай ағай үҙе лә тура һүҙле, гәҙел кеше ине, беҙ ҙә гәҙел булырға тырыштыҡ", - тине жюри рәйесе, Башҡортостандың халыҡ артисы Ғәзим Ильясов бәйгенең енеүсеһе, Уразбай ауылы ағинәйе Зөлфиә Вәлиеваға Гран-при тапшырғанда. Ғәзим Ильясовтың Эткол ауылы биләмәһе башлығына төбәп әйтелгән һүҙҙәрен дә ҡул сабып ҡеүәтләне ауыл халҡы: "Киләһе йылда үткәреләсәк конкурс бәйгеселәрен ҙур хәрефтәр менән яҙылған Мәүлетбай Ғәйнетдинов исемендәге Мәҙәниәт йорто ҡаршы алырға тейеш". Был тәҡдим иғтибарһыҙ ҡалмаҫ, моғайын. Башҡорт йыр сәнғәтенең моңло тарихын яҙыусы хаҡындағы Хәтер Мәүлетбай Ғәйнетдинов исемендәге мәҙәниәт усағына хаҡлы.

## Ретро-шлягер-2023

Йыр сәнғәтенең иң яҡшы өлгөләрен барлау һәм пропагандалау маҡсаты менән тағы ла бер сара - ретро йырҙар конкурсы үтте Ишембайҙа. Ул сараны конкурс тип кенә атау байрамдың бәсен төшөрөр һымаҡ - ысынлап та байрам булды ул. Йыр байрамы! Һәр хәлдә, ишембайҙарҙың әлегә тиклем бындай тамашаны күргәне юҡ. Конкурсанттарҙың жюри ағзалары менән бергә Ҡала мәҙәниәт һарайы алдына лимузинда килеп туҡтап, тамашасыларҙың көслө алҡыштары оҙатыуында сәхнәгә тиклем ҡыҙыл келәмдән атлап үтеүе әйтеп аңлатҡыһыҙ ярһыу хистәр тыуҙырҙы. Ә жюри ағзалары һуң - торғаны менән Йондоҙҙар парады: Башҡортостандың халыҡ артистары Азамат Тимеров (жюри рәйесе), Әлфиә Юлсурина, Ғәзим Ильясов, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Заһир Иҫәнсурин, Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Мәрйәм Солтанова, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Татьяна Яровая.

Конкурсҡа килгән 130 ҡатнашыусының 80-е генә һайлап алыу туры үткән; конкурсанттар ике турҙан торған бәйгелә бер һалмаҡ, бер дәртле йыр башҡарып, Ҡала көнө сиктәрендәге Гала концертта 80 бәйгесенең иң-индәре - дипломанттары һәм лауреаттары ғына сәхнәгә күтәрелде. Еңеүселәрҙе билдәләү өсөн ниндәй бәхәстәр булғандыр - уныһын жюри ағзалары үҙҙәре генә белә, әммә көнө буйы дауам иткән бәйгенең иң ҡыҙыу мәлдәрен тамаша барған майҙан экран аша күҙәтте. Азамат Тимеров менән Әлфиә Юлсуринаның бәйгеселәргә ҡушылып йырлап ултырғанын күреү ниндәй йәнлелек тыуҙырғанын күрһәгеҙ! Бындай тамаша Ишембайҙа ғына түгел, Башҡортостанда булғаны юҡ! Үҙебеҙҙекеләр менән бергә, Силәбе, Ырымбур, Мәскәү, Мәскәү өлкәһенән килгән йырсыларҙы тыңлап та хайран ҡалдыҡ. Рус телендә йырлаусылар башлыса Мөслим Магомаев йырҙарын һайлаған, башҡорт йырсылары Радик Гәрәев, Илһам Смаков, Рим Хәсәнов, Мәүлетбай Ғәйнетдинов йырҙарын үҙ иткән.

Уныш Радик Гәрәевтың "Һуң түгелдер" йырын башҡарған сығышы менән Баймаҡ районы егете, Ишембай Мәҙәниәт һарайы йырсыһы Рәфис Ишбаевҡа йылмайҙы - тамаша майҙанынан ул "Ретро-шлягер - 2023" II Асыҡ район конкурсы еңеүсеһенә тәғәйенләнгән Лада Гранта автомобилендә ҡайтып китте. Автомобиль асҡысын уға Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары - Башҡортстан Республикаһы Хөкүмәте Аппараты етәксеһе Азамат Абдрахманов тапшырҙы. Лауреаттар һәм дипломанттар ҙа ҡиммәтле бүләктәр алып ҡыуанды. Тамашасылар араһында ҡиммәтле призлар менән бергә лотереяла уйнатылған һыуытҡыс Ҡала көнө тамашасылары өсөн ҙур бүләк булды. "Конкурсанттарҙың әҙерлек кимәле һүҙ әйтерлек түгел, йырсылар көслө, - ти байрамды ойоштороусыларҙың береһе, жюри ағзаһы, ретро йырҙар конкурсы идеяһы авторы, Башҡортостандың халыҡ артисы Ғәзим Ильясов,- Халыҡ ысынлап та бай ул, талантлы ул. Үлемһеҙ йырҙарыбыҙ ҙа күп, уларҙы оноторға хаҡыбыҙ юҡ. Шуға был конкурсты киләһе йылдарҙа ла үткәрергә ниәтләйбеҙ һәм ул мотлаҡ Ишембайҙың халыҡ-ара кимәлдәге бренды буласаҡ". Үлемһеҙ йырҙарҙың ҡитғаларҙы берләштерәсәгенә шик юҡ.

**Ғәлиә КӘЛИМУЛЛИНА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## БАЙ ТУҒАНДАН...

### болот яҡын

Яҡшы һүҙ ике аяҡлы, яман һүҙ дүрт аяҡлы.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Кеше йәне бөтәһенә лә һәләтле, сөнки унда үткәндәр ҙә, киләсәк тә - барыһы ла тупланған.

**(Джозеф Конрад).**

Мәрхүм булғандар услөшмәһен, нәфрәтләнгәндәр яратырға өйрәнһен, ҡыуылыусылар түҙһен, әрләнгәндәр өндәшмәһен - шулай итеп гонаһты үлтерһен.

**(Владимир Мономах).**

Тормоштағы иң ҙур бәхет - ниндәй булыуыбыҙға ҡарамаҫтан, беҙҙе яратыуҙарына ышаныу.

**(Виктор Гюго).**

Балалар - ярлының байлығы.

**(Инглиз мәҡәле).**

Ут менән һоҡланғанда, күккә ҡарап торғанда үткәндәр рухы уларҙа икәнен онотмағыҙ.

**(Нанакауатцин).**

Кем ҡурҡыуҙа йәшәй, ул ҡурҡыуҙа үләсәк тә.

**(Леонардо да Винчи).**

Әхлаҡлылыҡ һинең холҡоңда булырға тейеш.

**(Иммануил Кант).**

Насар закондар - тиранлыҡтың иң насар төрө.

**(Эдмунд Берк).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер байҙың көтөлмәгән ниндәйҙер ҡылыҡ ҡылыу, башҡаларҙы шаяртыу ғәҙәте булған. Бына ул бер саҡ үҙенең батрағы янына килгән дә, уның эшләпәһен сисеп, башынан һыйпаған. Ә батраҡ аптырап ҡарап торған да, хужаһына телен сығарып күрһәткән.**

**- Эй, батраҡ, һин мине аңламаның, - тигән бай уға. - Мин һинән: "Нимәгә һинең башың ауырта?" - тип һорарға иткәйнем, ә һин дөрөҫ яуапламаның...**

**- Эй, бай, бушты бушҡа ауҙарып йөрөйһөң инде шунда... - тип ысҡындырған шунда батраҡ.**

**- Һин шулай телләшә беләһеңме ни әле?- тип асыуланып ҡамсылы менән һелтәнгән бай. Батраҡ байҙың ҡамсылы ҡулынан тотоп алған һәм:**

**- Бына хәҙер аңланым, бай ағай, баш оҙон теллелектән ауырта икән... - тигән.**

**Байға батраҡтың яуабы оҡшаған, ул уны аҡыллы яуабы өсөн маҡтаған һәм мул ғына итеп бүләкләгән..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.
1 582218 911006 23035

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
Мөхәрририәт:
Ләйсән ВӘЛИЕВА,
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
8 сентябрь 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3177
Заказ - 1229